ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

30-6 июнь-июль (һөтай-майай)

2018

№26 (808)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Балаларыбыҙҙы...**

туған телдә уҡытайыҡ!



5-6

**Һаҡал оҙонлоғо, доға ҡылыу исулы...**

йөҙ йыртыуға сәбәп була алмай



8-9

**Милли театрҙы...**

тел генә йәшәтә



11

**Ҡораманы ла...**

сәнғәт кимәленә күтәреп була икән



12-13

**ТВ-программа** 14

***Боронғо аҡһаҡалдарыбыҙ илгә ниндәйҙер хәл иткес һүҙ әйтер алдынан өс һорау - өс ҡапҡа аша үтер булған. Тәүҙә аҡһаҡал үҙенән: "Һүҙҙәрем хаҡ булырмы?" - тип һораған. Хаҡ булғанына төшөнгәс, икенсе һорау-ҡапҡаға күскән. Үҙенә: "Минең һүҙҙәремә ихтыяж бармы һуң?" - тигән һорауҙы биргән. Әгәр ихтыяж булһа, аҡһаҡал артабан үҙ-үҙенә ошондай һорау биргән: "Минең һүҙҙәремдә изгелек бармы?" Был һорауына ыңғай яуап булғанда ғына аҡһаҡал ил буйлап таралыр һүҙҙәренә ирек биргән.***

***Робин ШАРМА.***

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Пенсия йәшен арттырыуға нисек ҡарайһығыҙ?

***Мәжит МӘХМҮТОВ, физика-математика фәндәре кандидаты, профессор, Юғары һөнәри белем биреү буйынса Рәсәйҙең почетлы хеҙмәткәре:*** Был мәсьәләгә мин тыныс ҡарайым, сөнки пенсия йәшен барыбер яйлап арттыра барыу кәрәктер, тип уйлайым. Ни өсөн тигәндә, бөгөн күпселек кеше пенсияға сыҡҡандан һуң да эшләүен дауам итә. Ләкин бының үҙ сәбәптәре лә бар, әлбиттә: бер пенсияға ғына йәшәүе беҙҙә бик ҡыйынға тура килә, айырыуса, пенсионер ғаиләлә берҙән-бер аҫраусы булған осраҡта... Белгестәр килтергән шундай дәлилде иҫкә төшөрөү ҙә етә бында: әгәр элек пенсияға сығыусылар һаны йылына 500-600 мең кеше тәшкил итһә, бөгөн был күрһәткес миллиондан ашып киткән. Берәр 20 йылдан Рәсәйҙә хеҙмәткә һәләтле кешеләр һаны ни бары тиҫтә миллионға тороп ҡалыуы ихтимал, тип тә фаразлана. Былай барһа, тиҙҙән пенсия түләргә аҡса ҡайҙан табырҙар? Хатта әлеге сумманы түләү ҙә проблемаға әйләнәсәк. Ә инде пенсия реформаһын ҡабул итмәгән хәлдә, дәүләт социаль түләүҙәрҙе, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау сығымдарын ҡыҫҡартырға мәжбүр буласаҡ. Унан һуң, эшләгән кеше физик һәм социаль әүҙемлеген дә бер кимәлдәрәк һаҡлай. Шулай ҙа пенсия йәшен арттырыу ҡабул ителгән хәлдә, ул барыбер кешелекле йүнәлешкә эйә булһын ине: ауыр һәм зарарлы шарттарҙа эшләүселәргә, күп балалы ҡатындарға, сирлеләргә ҡарата элекке ташламалар һаҡланып ҡалыр, моғайын. Иң мөһиме - шулай ҙа халыҡты тотороҡло эш урындары менән тәьмин итеү. Айырыуса йәштәрҙе. Юғиһә, пенсия йәшен арттырыу менән генә илдәге социаль-иҡтисади проблемаларҙы хәл итеп булмаясаҡ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# БЕЙЕҮ ХӘРӘКӘТЕ - АЙЫРЫМ МӘҒЛҮМӘТ,

## уның аша бала халҡы рухына яҡыная

**Өфөлә 3 йәштән 15 йәшкә тиклемге балалар араһында "Байыҡ - 2018" конкурсының Гала-концерты үтте. Башҡорт бейеүен пропагандалау, һаҡлау һәм республиканың хореографик сәнғәт өлкәһендә булған уңыштарыбыҙҙы башҡаларға күрһәтеү йәһәтенән тиңе булмаған бәйге ул "Байыҡ". БР Мәҙәниәт министрлығы, "Башҡортостан" дәүләт теле-радио компанияһы һәм Өфө ҡалаһы хакимиәте ойошторған был сарала бәйгенең төрлө йылдарҙағы еңеүселәре, быйылғы йылдың финалистары һәм сит төбәктәрҙән - Осетия, Чечен, Татарстан республикаларынан, Әстерхан өлкәһенән килгән ҡунаҡтар бер сәхнәлә сығыш яһаны.**

**(Дауамы 16-сы биттә).**




12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# РУХИ БАЙЛЫҠ...

## күңел ихтыяжы булһын

***Миңзәлә ЯХИНА, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы режиссеры:*** Бөгөн тормошобоҙҙа күҙәтелгән бер хәл мине нығ борсой: тик матди байлыҡты ғына уйлап, рухиәт тураһында онотоп китә бәғзеләр, заманса комфортҡа, сит илгә сәйәхәт итеү теләгенә алданып, үҙ асылын һаталар. Байлыҡ - бер айлыҡ, кеше мәңгелек түгел, ә тупланған малы был донъяла тороп ҡала. Халҡың телендә эшләгән эштәрең менән ҡалыу - ғүмер асылы булырға тейеш. Бай булды, һаран булды, тип һөйләмәһендәр, ә ярлы булһа ла кеше өсөн йәшәне, эшләне, тигән даның ҡалһын. Бәхет - текә машинала йөрөү менән түгел бит ул. Телефон - һөйләшер өсөн, машина йөрөү өсөн кәрәк, уларҙың "текә" булыу-булмауы мөһим түгел. Эконом-класс автомобиль алып, исраф итмәй ҡалдырған аҡсаңды халыҡ мәнфәғәтендә ниндәйҙер файҙалы эшкә тотоноу шәберәк, минеңсә. Дүрт тәгәрмәс 300 меңлек булһа ла, 7 миллионлыҡ булһа ла, шул уҡ дүрт тәгәрмәс инде ул. Мода, бренд тип, аҡса ҡоло булырға ашыҡмағыҙ, башҡортҡа хас түгел ул артыҡ байлыҡ артынан ҡыуыу. Тапҡан-таянғанына риза булмай, тағы ла зиннәтлерәк йәшәү өсөн һаулыҡтарын аямай, хатта үҙ принциптарынан тайпылып булһа ла аҡса эшләргә ынтылыусыларҙы күҙенә аҡ-ҡара күренмәгән фанатиктарға оҡшатам. "Һайт" тигәнгә "тайт" тип, бөтәһе лә шулай эшләй, тип, аңһыҙ йәшәмәгеҙ, туғандар. Беҙҙең халыҡҡа хас булған тәртип тураһында, һәр эштә алтын урталыҡты һаҡлау тураһында онотмаҫҡа кәрәк.

Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһындағы эшем буйынса ла, бына бер-нисә йыл ойоштороп килгән "Ҡош юлы" фестивале аша ла йәштәр менән тығыҙ аралашырға тура килә. Мин ҡатнашҡан бөтә сараларҙа ла зиһенле, аҡыллы йәштәр йөрөй. Шундай аңлы йәштәр араһында булырға теләгән өсөн дә мин ошо сараларҙы атҡарып йөрөйөм. Быға тиклем бер аҙ эсеңкерәп, илке-һалҡыраҡ йөрөгән йәш кеше беҙҙең мөхиткә килеп инһә, холҡо тик ыңғай яҡҡа үҙгәреүенә шаһит булғаным бар, ошонда яңы дуҫтар, яңы идеялар, рухи тәрбиә алып, беҙҙең арала ҡалыуҙы хуп күрә улар. Быйыл "Ҡош юлы. Балалар" асыҡ башҡорт бард конкурсын үткәргәндә Өфө ҡалаһында беҙҙең быуындан эстафетаны ҡабул итерҙәй матур балалар булғанын асыҡланыҡ. Туған телдәрен яҡшы белгән, башҡорт рухлы, тәртипле, талантлы быуын үҫеп килә. Ғаиләһе булған һәр башҡорттоң төп маҡсаты үҙенә алмашҡа бына ошондай балалар үҫтереүҙә булырға тейештәр.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Пенсия йәшен арттырыуға нисек ҡарайһығыҙ?



*Пенсияла беҙгә эш етерлек!*

**(Башы 1-се биттә).**

***Рим ИСХАҠОВ, Ҡырмыҫҡалы районы, Бишауыл-Уңғар мәктәбе уҡытыусыһы, РФ мәғариф отличнигы, Журналистар һәм Яҙыусылар берлеге ағзаһы:*** Уҡытыусы һөнәренең дә еңелдән түгеллеген бер кемгә лә анлатып тороу кәрәкмәйҙер. Хөкүмәт был һөнәр эйәләренә юҡҡа ғына эш стажына ҡарап, ваҡытынан алда эшләнгән йылдар өсөн пенсия тәғәйенләмәй. Мин йәшем буйынса киләһе йыл пенсияға сығырға тейеш булһам да, стажым буйынса 8-се йыл инде бына шундай пенсия алам, эшләп тә йөрөйөм. Рәсәйҙең хеҙмәт министры М. Топилиндың ошоға ҡағылышлы аңлатмаһына ҡарағанда, уҡытыусылар һәм медицина хеҙмәткәрҙәре өсөн стажға талап элеккесә ҡаласаҡ, йәғни был хеҙмәткәрҙәрҙең категорияһына ҡарап, ул 15-30 йыл тәшкил итә, ә бына ваҡытынан алда пенсия мәсьәләһе, пенсия йәше артыу менән бәйле, шуға ярашлы кисектереләсәк, тиелә. Пенсия реформаһы хаҡында күптән инде имеш-мимеш хәбәрҙәр ишетелә торҙо, әлбиттә, шулай ҙа барыбер халыҡты алдан әҙерләү, аңлатыу кеүек саралар күрелмәне, шуға ла ул ҡапылдан әүҙем ҡаршылыҡҡа дусар. Ғөмүмән, популяр булмаған бындай яңылыҡтар һәр саҡ бик ауыр ҡабул ителә. Был осраҡта бигерәк тә, сөнки 60-та, ниһайәт, хаҡлы ялға китәм, тип өмөтләнеп йөрөгән ирҙәр тағы 5 йыл, ә ҡатындар хатта ки 8 йыл эшләргә тейеш булып сыға! Дөрөҫ, реформа әкренләп, эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырыласаҡ, тип әйтелә документтарҙа. Мәҫәлән, киләһе йыл хаҡлы ялға китергә тейешле 1959 йылғы ирҙәр һәм 1964 йылғы ҡатындар тағы бер йыл эшләгәндән һуң ғына пенсия ала башлаясаҡ. Уларҙан һуңғы быуын ике йыл оҙағыраҡ эшләйәсәк һәм артабан шулай дауам ителеп, ирҙәр өсөн яңы законға күсеү осоро - 2028, ә ҡатындар өсөн 2034 йылға тиклем дауам итәсәк. Ярай ҙа, ауыр һәм зарарлы эштә мәшғүлдәргә ташлама булһа, ә ул мотлаҡ булырға тейеш! Дөрөҫ, хаҡлы ялға сыҡһа ла эшләүен дауам итеүсе пенсионерҙар ҙа байтаҡ бит. Тимәк, бер яҡтан, 55 һәм 60 йәш - кеше өсөн эшкә һәләтлелектең сиге түгел. Бәлки, шуларға ҡарап та йүнәлеш алалыр хөкүмәт? Улай булһа, бер нәмә иғтибарҙан ситтә ҡалдырылмаһа ине: эшләп йөрөүсе пенсионерҙар байыу өсөн түгел (байырһың беҙҙә пенсияға), ә мохтажлыҡ кисергәне, пенсияһын еткерә алмағаны өсөн эшләй. Һаулыҡ яғы самалы булһа ла тик ятмай ундайҙар, сөнки нужа мәжбүр итә. Унан һуң сәләмәтлек торошо, ғаилә хәлдәре буйынса артабан эшләй алмағандар ҙа күп. Шунан сығып, пенсия йәшенән һуң да эште дауам итеү әлегесә өлкәндәрҙең теләгенә һәм мөмкинлегенә бәйле ҡалдырылһа, кешелеклерәк булмаҫ инеме, тигән фекер ҡала.

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Кемгә нисектер, әммә үҙ тәжрибәмдән сығып, шуны әйтәм: миңә 55 йәштән пенсияға китеү мораль яҡтан бик ауыр булды, сөнки яратҡан эшемде дауам итерлек дәрт тә, көс тә барлығын тоя инем әле, ләкин беҙҙең министрлыҡ буйынса күрһәтмә шундай тип, эштән китергә ғариза яҙырға ҡуштылар. Үҙемде кәрәге бөткән, арбанан төртөп төшөрөп ҡалдырылған әйбергә оҡшатып, бик кәмһенгәнем хәтеремдә. Бының менән шуны әйтергә итәм: ҡатындарға шуға күрә 63-тә үк булмаһа ла, 60 йәштән хаҡлы ялға китеү әлхәм булыр ине. Юғиһә, РФ хеҙмәт министры М.Топилиндың "Известия" гәзитенә интервьюһында, ҡатындар оҙағыраҡ йәшәй, шуға уларға пенсия йәше лә күберәккә - 8 йылға арттырыла, тип әйтеүе уның, ҡатындар ғаилә, йорт-хужалыҡ хәстәрен дә күберәк тарта, тигәненә ҡапма-ҡаршы килә түгелме? Икелатә йөкмәтеп, "эш аттарын" тамам биртендерә күрмәһен был хөкүмәт! Ирҙәр эсә, тәмәке тарта, шуға күрә аҙыраҡ йәшәй, тип йәлләүме әллә юғиһә уларға өҫтәлгән 5 йыл? Бәлки, уларға ла 63 йәштә китеү тамам булыр? Унан ары һәр кемдең үҙ мәйеле. Тик бына өлкәндәр арҡаһында йәштәргә эш урыны юҡ, тигән тауыштар ҙа ишетелә бит. Әлеге М. Топилин был мәсьәләлә бер проблема ла күрмәүен белдерҙе. Беренсенән, ти ул, хеҙмәт баҙарына 1990-2000 йылдарҙа тыуған аҙ һанлы быуын килә; икенсенән, йәштәрҙең хеҙмәткә ихтыяж өлкәһе лә башҡасараҡ: улар яңы төр һөнәрҙәрҙе, яңы технологияларҙы үҙ итә һәм өлкән быуынға әллә ни конкуренция тыуҙырмаясаҡ. Был фараздың ысынға тап килмәүе лә бик ихтимал, сөнки беҙҙең чиновниктар хәлде тормош ысынбарлығынан сығып анализлау, халыҡтың тормош-көнкүрешен ентекле өйрәнеү урынына гел генә абстракт фекерләү һәм фараздар менән эш итергә күнеккән. Пенсия йәшен арттырыу механизмы халыҡ аҡсаһын уның бер кеҫәһенән алып, икенсеһенә һалыу кеүек "күҙ бәйләү" иллюзияһын хәтерләтмәһен ине. Иҡтисад нигеҙен нығытыу, уны үҫтереү, байҙарға прогрессив һалым кеүек реаль эштәр менән дә тулыландырылһын бюджет тоғо. Әлегә бюджет хаҡтарҙы арттырыу, штрафтар һәм һалым иҫәбенә йүнәлеш ала кеүек. Ә инде дөрөҫөн генә әйткәндә, пенсия реформаһы - бер ниндәй ҙә яңылыҡ түгел, сөнки пенсионерҙарҙың хеҙмәткә һәләтле күпселек өлөшө былай ҙа эшләүен дауам итә һәм шуның язаһын да күрҙе инде: 2016 йылдан алып уларҙың пенсияһы законлы индексациянан мәхрүм ителде. Ҡайҙа бында логика?

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостандың юғары уҡыу йорттарында ҡабул итеү кампанияһы-2018 дауам итә. Быйыл республиканың юғары уҡыу йорттары бюджетҡа 9326 студент, шул иҫәптән 5024 бакалавр, 1212 белгес, 3090 магистр алырға тейеш, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Мәғариф министрлығынан. Әгәр абитуриенттар Берҙәм дәүләт имтиханы һөҙөмтәләре буйынса уҡырға инә икән, вуздарға документтар ҡабул итеү 26 июлдә тамамлана. Юғары уҡыу йорто үҙе һынауҙар үткәрһә, документтар ҡабул итеү 10 июлдән дә һуңға ҡалмайынса дауам итергә тейеш.

✓ Ҡырмыҫҡалы районының Бишауыл-Уңғар ауылында 7 июлдә традицион бесән сабыу һәм бесән мәле мәҙәниәтен яңыртыу, халыҡ йолаларын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен тергеҙеү маҡсатында бесәнселәрҙең "Сыңла, салғы!" республика фольклор байрамы уҙа. Фестивалдә йыйылма йәки ике кешенән торған (1 ир, 1 ҡатын) ғаилә командалары ҡатнаша ала. Ғаризалар 1 июлгә тиклем gukrcnt@mail.ru электрон адресына ҡабул ителә.

✓ Бөгөн Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов социаль өлкә учреждениеларында аутсорсинг ойоштороу мәсьәләләре буйынса кәңәшмә уҙғарҙы. Социаль өлкәгә аутсорсинг индереү изге ниәттәрҙе күҙ уңында тотто, тип билдәләне төбәк етәксеһе. Атап әйткәндә, учреждениеларҙы уларға хас булмаған функцияларҙа азат итеү, көстө төп эшмәкәрлеккә йүнәлтеү мөмкинлеген биреү, шулай уҡ профессионалдарҙы, махсуслаштырылған ойошмаларҙы йәлеп итеү иҫәбенә хеҙмәттәр сифатын күтәреү күҙалланды.

✓ Вәдүт Исхаҡов "Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире итеп тәғәйенләнде. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ултырышында уның кандидатураһын раҫланылар. Исхаҡов Вәдүт Ғәйфулла улы 2006 йылдан Ишембай ҡалаһының "Торатау" гәзитенә етәкселек итте. Быға тиклем "Башҡортостан" гәзитен 2018 йылдың апрелендә үҙ вазифаһын ҡалдырған яҙыусы һәм журналист Азамат Юлдашбаев етәкләне.

✓ Башҡортостан фехтованиеһының ике тәрбиәләнеүсеһе Европа чемпионатында алтын миҙал яуланы. Тимур Сафин һәм Тимур Арыҫланов Рәсәй йыйылмаһы составында Сербияла почет пьедесталының тәүге баҫҡысына күтәрелде.

✓ Почтаның бурысы халыҡҡа пенсия таратыу менән генә сикләнергә тейеш түгел. Ситтә тороп ҡалмаһын өсөн ауылға матбуғат баҫмалары таратыуға иғтибар көсәйтелһен ине, юғиһә, хат ташыусының сумкаһы күптән бушап ҡалды.



*БЫЛ АЙҘА...*

# ТӘБИҒӘТТӘ ОСРАҠЛЫЛЫҠ ЮҠ,

## барыһы ла сәбәп-һөҙөмтә шойҡаны

**Байрамлы айҙар шау-гөр килеп үтеп тә киттеләр, оҙайлы ялдарҙан ял итеп, эшкә тотонорға ла форсат тыуҙы: майай, урағай һәм һарысай буйына ҡышҡы миҙгелгә бол туплап ҡалырға, уңыш үҫтереп-йыйып өлгөрөргә кәрәк. Хоҙай көнөн бирһә, әлбиттә.**

Әҙәм балаһы нисек кенә кәперәйеп, үҙен донъя хужаһы итеп тойорға маташмаһын, "әтнәке" бөтәһе лә Илаһ ҡулында икәненә торған һайын нығыраҡ ышана бараһың. "Туҡта, ҡолом", - тип әйтер, тигән бит. Хаттин ашыу, шашыныуҙарға әленән-әле сик ҡуйып, иман һабаҡтары биреп тормаймы ни Ул? Тик бының айышын аңлаған, ғибрәт алған һирәктер. Юғиһә бит, мәлендә һыуытып, мәлендә йылытып, ҡарын да, ямғырын да ваҡытында яуҙырып, һауа торошон көйләп тороусы башҡа бер ниндәй ҙә механизм юҡ, тик ошо гармонияны боҙоусы ғына бар: ул да булһа, әҙәм балаһы. Шулай булмаһа, ниңә быйыл йәмлеләрҙән-йәмле һөтайыбыҙ йылыһына зар-интизар булып, көпө-кәпәс кейеп башланыҡ йәйебеҙҙе? Июнь баштарында уҡ төнгө һауа температураһы минусҡа тиклем төшөп китте, һалҡын ямғыр ҡатыш көслө ел өйөрмәләре туҡтауһыҙ ҡоторҙо. Байтаҡ уңыш культураларын ҡырау һуҡты. Юғары көстөң үҙенсәлекле иҫкәртеүе булып тойолмаймы был? Тәбиғәттә бер нәмә лә осраҡлы түгел, ә сәбәп-һөҙөмтә шойҡанылыр, тиҙәр. Ә инде белгестәр фекеренсә, бындай күренештәр, ысынлап та, тигенгә түгел: һәр төрлө катаклизм һәм тәбиғәт аномалиялары - кешелектең тирә-яҡ мөхиткә зыянлы йоғонтоһонон һөҙөмтәһе ул. Метеорологтар аномаль һыуыҡ йә эҫенең бер нисә сәбәбен билдәләй. Шуларҙың иң хәүефлеләре тип Ерҙең мезосфераһы (40-90 км юғарылағы атмосфера ҡатламы) һәм башҡа һауа ҡатламдарының ныҡ йылыныуы, туҡтауһыҙ спутниктар осоролоуы (улар аэроиондар бүлеп сығара), антициклон иҫәпләнә. Әйткәндәй, Баренц диңгеҙенең төньяҡ өлөшө атлантик климат билдәләренә оҡшай бара. Әммә йәй йәйлеген итмәй ҡалмаҫтыр барыбер, майайҙа Ҡояш апай, ниһайәт, үҙ вазифаһын тулы ҡеүәтенә башҡарырға тотонор, шәйт, сөнки был ай - йәй уртаһы ғына түгел, йылдың да ҡап уртаһына тап килә бит. Йыл ғәҙәти килгән саҡтарҙа йәйге селләнең иң ҡыҙған осоро ғәҙәттә тап июлгә тура килә торғайны ла. Метеорологтар ошоға нигеҙләнеп, майайҙа быйыл да йылы булырына, уртаса һауа температураһының йыллыҡ норманы тәшкил итеренә иҫәп тота, өмөттәре аҡлана күрһен!

Әҙәм балаһы ниндәйенә лә күнер, тик бына йыл уңышы зыян күрмәһен. Шул саҡ ауыл хужалығы етештереүселәре лә эшһеҙ, икмәкһеҙ ҡалмаҫ. Был тәңгәлдә ил күләмендә, шул иҫәптән, Башҡортостан буйынса тамыр йәйә башлаған ауыл хужалығы кооперативтары күҙҙә тотолоуы аңлашылалыр, сөнки бөгөн ауыл халҡының мәшғүллек мәсьәләһен фәҡәт кооперативтар ойоштороу юлы менән генә хәл итергә мөмкин. Был хаҡта һүҙ башлау осраҡлы түгел, Халыҡ-ара кооперация көнө (**7**) был темаға айырыуса иғтибар биреләсәк. Эште ойоштороуҙың был төрө элек, совет осоронда ла бар ине, ләкин колхоздар һәм предприятиеларҙың бөтөрөлөүе ауыл тормошон бөлгөнлөк алдына ҡуйҙы. "Был эште кисекмәҫтән атҡарырға кәрәк, - тигәйне республика Башлығы Рөстәм Хәмитов былтыр кооперация хәрәкәтен үҫтереү мәсьәләһе буйынса кәңәшмәлә. - Һәр ауылда бер-ике кооператив булһа ла ойоштороуға ирешергә кәрәк, ә беҙҙә 800-ҙән ашыу ауыл биләмәһе. Ауыл иҡтисадын ошо юл менән генә күтәрергә мөмкин..." Рөстәм Зәки улы әйтеүенсә, ҡайһы бер урындарҙа һаман да кемдеңдер килеп ойоштороуын көтөп ултыралар. Былай эш бармай, тине ул. Кооперация иң тәүҙә шәхсән ауыл халҡының үҙе өсөн кәрәк: улар эшле, аҡсалы буласаҡ. Теләһә ниндәй кооперативты эшмәкәр, дәртле, абруйлы кеше лидер булып башлап ебәрһен ине, башҡалар, һис һүҙһеҙ, уның артынан эйәрәсәк. Ә эш фронты сикһеҙ ауыл ерендә. Кемдер әле үк йылҡы аҫрай, ҡымыҙ, ҡаҙы эшләп һата башлаған; икенселәр һыйыр малы, һарыҡ-кәзә тота һәм һөт ризыҡтары: эремсек, ҡаймаҡ, ҡорот, сыр етештерә... Өсөнсөләр емеш-еләк, йәшелсә, бәшмәк үҫтереп һата. Дүртенселәр ҡаҙ, өйрәк, тауыҡ ите етештерә, себештәрен сығарып һата. Дөрөҫ йүнәлеш, һүҙ ҙә юҡ, юғиһә, ауыл ерендә йәшәп, эшһеҙ, аҡсаһыҙ көн күреү ул йылға буйында һыуға интегеүсе хәлен хәтерләтә түгелме? Йәки быуа буйында. Тик быуа булыуын булһа, йүнле кеше унда балыҡ үрсетә башлар ине, моғайын да һәм 8 июль - Балыҡсы көнөн билдәләп, әлеге кооператив хәрәкәтенә лә ҡушылып китер ине, бәлки.

Ғаилә көнө тип йөрөтөлгән ошо уҡ дата (**8**) Рәсәй почтаһы байрамы булараҡ та календарҙа үҙ урынын алған, тип иҫкә төшөрөп китәйек, булмаһа. Юғиһә, почта бүлексәһенә юлды онота башланыҡ, сөнки уның халыҡҡа хеҙмәт күрһәтеү төрҙәре юҡҡа сыға бара. Уларҙы ла ябылып бөткән ауыл мәктәптәре, медпункттар яҙмышы көтмәйме? **Почтаның бурысы бөгөн халыҡҡа пенсия таратыу менән генә сикләнергә тейеш түгелдер бит. Иң мөһиме ситтә тороп ҡалмаһын өсөн ауылға матбуғат баҫмалары таратыуға иғтибар көсәйтелһен ине, юғиһә, хат ташыусының сумкаһы күптән бушап ҡалды бит. Айырыуса республикабыҙҙа тыуған телдә нәшер ителеүсе баҫмаларҙы яҙҙырыуға иғтибар көсәйтелһен ине, шул саҡ почта хеҙмәткәренең гәзит-журнал килтереүен һәр кем ҡапҡа янына сығып, ҡунаҡ көткәндәй ҡаршылап торор.**

Июль байрамдарға бай түгел, сөнки, башта әйтеп кителеүенсә, байрамдар күп булды, әле иһә ҡыҙыу эш мәле. Шуға күрә, оҙаҡ сурытып тормай, ҡайһы бер иҫтәлекле даталарҙы һанап китеү менән сикләнәйек. Тик бына Бөтә донъя Ер йөҙөндә йәшәүсе халыҡ көнө (**11**) хаҡында ғына бер кәлимә: планетала йәшәүсе халыҡ һаны бөгөнгө көнгә 7,5 миллиардтан да ашып киткән, ә Ерҙең кешелек өсөн нормаль йәшәү мөмкинлеге 9-10 миллиард кешегә иҫәпләнгән, ти ғалимдар. Ер йөҙөндә халыҡ һаны Ҡытай, Азия, Африка, Латин Америкаһы илдәре иҫәбенә арта ғына бара, ә цивилизация үҫешкән Европала, шулай уҡ Рәсәйҙә халыҡ кәмей. Шуға ла беҙҙә ил етәкселеге демография проблемаһын үҙенсә хәл итергә, тыуымды арттырырға тырыша, тик барыбер финанс ҡытлығынан ҡотола алмай яфалана: бер тишекте ары-бире ямауға, икенсе ерҙә бүҫерелә. Шунан һуң ирекһеҙҙән: "Бындай шарттарҙа йәшәп, фәҡирлекте арттырыуҙан кемгә ниндәй файҙа булыр?" - тигән уй ҡала...

Һәр айға хас һөнәрмәндәр көндәре июлдә лә бар: Металлург (**15**), Этнограф (**17**), Янғын һағы күҙәтеүсеһе (**18**), Сауҙа хеҙмәткәрҙәре (**22**), Парашютсы (**26**), Хәрби-диңгеҙ флоты (**29**) көндәре, шулай уҡ Бөтөн донъя шоколад (**11**), Халыҡ-ара шахмат һәм Халыҡ-ара торт (**20**), Халыҡ-ара дуҫлыҡ (**30**) көндәре билдәләнә.

**Майай юбилярҙары:**

**2** - терапевт, токсиколог, медицина фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Зәкиә ТЕРЕҒОЛОВАға - 75 йәш** (1943).

**26** - Рәсәй дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, хоҡуҡ белгесе, юридик фәндәр докторы, профессор, Федерация Советы ағзаһы, яҙыусы, скульптор, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Рафаил Зиннуровҡа - 65 йәш** (1953).

**28** - сәнғәт белгесе, профессор, БР Рәссамдар берлеге ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре **Әлмира Йәнбухтинаға - 80 йәш** (1938).

**31** - тел белгесе, филология фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһы мөхбир ағзаһы **Талмас Ғариповҡа - 90 йәш** (1928).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*



**"Хәҙерге заман гәзите ниндәй булырға тейеш?" тигән һорауға яуап эҙләгәндә күптәр "Уның биҙәлеше үҙгәрергә тейеш", тигәнерәк яуап бирә. Гәзиттең биҙәлеше лә мөһимдер инде, әммә, минеңсә, уның йөкмәткеһе мөһимерәк. Шуға ла мин бөгөнгө баҫмаларға баһаны уларҙың эстәлегенән сығып бирәм.**

# МАТУР БЕР ӨЛГӨ...

Мәктәп уҡыусыһы булған саҡтарым үткән быуаттың 90-сы йылдарына тура килде. Әсәйҙәр гәзит-журналдарҙы күпләп алдырҙы. Почтальон баҡсаға ҡыҫтырып киткән гәзитте өйгә индерәһең дә, күмәкләп ултырып ҡарап алаһың. Эштәр бөткәс, йайлап уҡыйһың. Йылы бер хәтирә булып ҡалған күңелдә ошо күренеш. Ул мәлдә "Аманат" журналы ла ҡыҙыҡлыраҡ ине һымаҡ, әллә күпме белем эстәнек унан. "Ағиҙел"де ҡулдан-ҡулға йөрөтөп уҡыныҡ, яҙыусыларҙың әҫәрҙәре башлап ошонда баҫыла ине. Эстәлеге бай булғанға ла ошо баҫмалар хәтерҙә ҡалғандыр, тип уйлайым. Биҙәлешен күҙ күргән дә - оноҡҡан, ә бына йөкмәткеһе иҫтә.

"Киске Өфө"нө лә тулы эстәлеге өсөн юғары баһалайым. Уның бынан ун йыл элек сыҡҡан һанын табып уҡыһаң да, бер мәғлүмәт тә иҫкермәгән икәнен күрәһең. Сөнки ундағы материалдар бер ауылға йә районға ҡағылған, йә булмаһа, әле генә булып үткән ваҡиғаларға арналмай. Унда тотош башҡорт донъяһына ҡағылған, иҫкермәй, ваҡыты үтмәй торған факттар, мәғлүмәттәр баҫыла. Шуға ла үҙенә күрә энциклопедия кеүек ул. Шул уҡ ваҡытта, көнүҙәк мәсьәләләрҙе лә урап үтмәй. Тос ҡына итеп фекерен дә әйтә. Башҡорт матбуғатының матур бер өлгөһө ул "Киске Өфө" гәзите.

**Фаяз ҠАНСУРИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың Урман хужалығы министрлығы республиканың дүрт районында урман биләмәләрен ҡуртымға алыу хоҡуғына аукцион уҙғарыу тураһында иғлан итте. Әбйәлил урмансылығында бесән сабыу өсөн тәғәйенләнгән 18 гектарлыҡ участкалар, Әлшәй районында рекреацион эшмәкәрлек өсөн сирек гектарлыҡ участка ҡуйылған. Ағас әҙерләү өсөн Нуриман урмансылығында 1210 гектарлыҡ майҙан тәҡдим ителә.

✓Рәсәйҙең дүрт төбәгендә үҙенә эшләгән граждандар өсөн яңы һалымды һынап ҡарайҙар. 2019 йылдың 1 ғинуарынан Мәскәүҙә һәм Мәскәү өлкәһендә, Татарстанда һәм Калуга өлкәһендә үҙенә эшләгән граждандар (бала ҡараусылар, репетиторҙар, сирлене тәрбиәләүселәр, ваҡ кәсепселәр) махсус ҡушымта ярҙамында килемдән һалым түләргә тейеш. Физик берәмектәргә хеҙмәт күрһәткәндәргә 3 процентлыҡ пошлина һалына. Юридик берәмектәр менән эшләгәндәр 6 процентлыҡ һалым түләргә бурыслы.

✓Башҡортостанда Урал дәүләт физик культура университетының Стәрлетамаҡ филиалын яптылар. Студенттарҙы Башҡортостан физик культура институты ҡабул итергә әҙер. Белем биреүҙең барлыҡ йүнәлештәре лә һаҡлана. Өҫтәмә мәғлүмәтте факультет деканатында (телефон - 8(347) 273-90-21), шулай уҡ Башҡортостан физик культура институтының кадрҙар бүлегендә алырға мөмкин.

✓Башҡортостан халҡы бына инде бер аҙна ысын йәйге эҫелек менән рәхәтләнә. Көндөҙ термометр күрһәткесе +31 градустан юғары күтәрелә. Ләкин 7 июлдә һауа температураһы 18 градусҡаса төшә. 8 июлдә термометр күрһәткесе +13 градус билдәһендә туҡтай. Бындай һауа торошо дүрт көн дауам итә. Һуңынан республиканың баш ҡалаһына йәнә 30 градуслы эҫе көндәр ҡайта, тип фаразлай метеорологтар.

✓"АвтоВАЗ" концерны автомобиль кузовы һәм юл араһында тоташтырыу звеноһы ролен уйнаусы деталдәр, узелдар һәм механизмдар йыйылмаһында (подвеска) проблемалар сәбәпле Рәсәйҙә 7,2 меңдән ашыу Lada Xray автомобилен ҡайтарып ала. 2017 йылдың ноябренән һатылған автомобилдәрҙә ныҡлы суйын урынына һороһонан эшләнгән боролоу йөҙроҡсаһында газ бушлыҡтары барлығы ҡайтарып алыу сәбәбе булып тора.

✓ Үҫмер йылдарында үҙе лә спорт менән шөғөлләнгән ҡала хакимиәте башлығы "ысын ирҙәр тәрбиәләүсе" көс, таһыллыҡ талап иткән спорт төрҙәренә, уларҙың үҫешенә һәм популярлашыуына ҙур иғтибар бүлә.



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БАЛАЛАР БЕҘҘӘ УЙНАЯСАҠ

**Өфө ҡала округы хакимиәте менән Халыҡ-ара балалар уйындары комитеты араһында 2019 йылда 53-сө уйындарҙы Башҡортостандың баш ҡалаһында үткәреү тураһында Килешеү төҙөлдө. Документҡа хакимиәт башлығы Ирек Ялалов менән Комитет Президенты Торстен Раш ҡул ҡуйҙы.**

Килешеүгә ярашлы, үҙ вәкәләттәре сиктәрендә Өфө ҡалаһы хакимиәте положениеларҙы үтәргә һәм Олимпия хәрәкәте, Халыҡ-ара балалар уйындары идеалдарына тоғро ҡалырға, ярыштарҙы юғары кимәлдә, дуҫлыҡ һәм ғәҙел көрәш рухында уҙғарыу өсөн барлыҡ шарттар тыуҙырырға; ҡатнашыусылар һәм ҡунаҡтар өсөн дуҫтарса имен атмосфера булдырырға; ҡала халҡын сараның ирекмәндәре рәтенә йәлеп итеү өсөн мәғлүмәт таратырға; йәштәр араһында спортты, сәләмәт тормошто пропагандаларға; Уйындарҙы йәштәрҙең мөмкинлеген үҫтереү өсөн нигеҙ итеп файҙаланырға һәм бөтөн донъя буйынса Халыҡ-ара балалар уйындарының үҫешенә һәм алға барыуына ярҙам итергә йөкләмә ала. Сара 2019 йылдың 9-14 июнендә үтәсәк. Яҡынса баһалауҙар буйынса баш ҡалаға бөтөн донъянан 1,5 мең спортсы, шулай уҡ уларҙың тренерҙары һәм көйәрмәндәре, Европанан, Азиянан, Төньяҡ һәм Көньяҡ Американан, Австралиянан рәсми делегациялар киләсәк. Сараның флагын рәсми тапшырыу быйыл августа, Иерусалимда үтәсәк Йәйге Уйындарҙы ябыу тантанаһында атҡарыласаҡ.

## БЕРГӘ ТӘРТИП ҺАҠЛАЙБЫҘ

**Йыл башынан ҡала территорияһында халыҡ күпләп ҡатнашҡан 565 сара, шул иҫәптән 162 - мәҙәни, 157 - асыҡ, 126 спорт сараһы үткәрелгән. Уларҙа йәмәғәт тәртибен һаҡлауға 14 мең эске эштәр хеҙмәткәрҙәре йәлеп ителгән.**

Баш ҡалала тәртип һаҡлау "Йәмәғәт именлеге үҙәге" вәкилдәре менән берлектә алып барыла. Шулай уҡ баш ҡалала ойошторолған халыҡ дружинаһы ла йәмәғәт тәртибен урынлаштырыуҙа әүҙем эшләй. Улар ҡатнашлығында меңдән ашыу административ хоҡуҡ боҙоу иҫкәртелгән. Дружинасылар тәртип һаҡлау менән бер рәттән, йәш быуынды тәрбиәләү менән дә шөғөлләнә. Был йәһәттән полицияның эшмәкәрлеге үҫмерҙәрҙең хоҡуҡ боҙоуҙарын һәм урам ҡыҙырыуын иҫкәртеү системаһы субъекттары менән берлектә алып барыла. Бынан тыш, ҡала хакимиәтенең Йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты менән берлектә ҡала райондары базаһында "социаль хәүеф" төркөмөндә тороусы үҫмерҙәр өсөн йыйындар үткәрелә. Берлектәге эшмәкәрлек һөҙөмтәһендә көнкүреш енәйәте, балиғ булмағандар тарафынан ҡылынған ауыр һәм бик ауыр енәйәттәр иҫәбе кәмегән. Шул уҡ ваҡытта ағымдағы осорҙа иҫәпкә алынған енәйәттәрҙең дөйөм һаны бер ни тиклем артҡан. Уларҙың төп өлөшөн яуыз ниәт менән ҡылынған, шәхескә ҡаршы эшләнгән, иҡтисади енәйәттәр алып тора. Полиция хеҙмәткәрҙәре тарафынан Интернетта наркотик матдәләр таратыусы 60 сайт тураһында мәғлүмәт республиканың тикшереү органдарына ебәрелгән. Әлеге ваҡытта был ресурстарҙың 56-һы ябылған. Шулай уҡ алкоголь продукцияһы әйләнеше өлкәһендә лә хоҡуҡ боҙоуҙарға һәм енәйәтселеккә ҡаршы етди эш башҡарылған. Хоҡуҡ һаҡлау органдары рәхсәтһеҙ миграция мәсьәләләре менән дә шөғөлләнә. Быйыл 21 меңдән ашыу сит ил граждандары миграцион иҫәпкә алынған.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ



**Ҡала киңлектәрен төҙөкләндереү - республикаcouldның ғына түгел, тотош ил муниципалитеттарының иғтибар үҙәгендә булған иң мөһим өлкәләрҙең береһе. Уңайлы ҡала мөхите булдырыуға йүнәлтелгән проекттың төп маҡсаты ла атамаһын аҡлай: граждандарҙың тормошо, йәғни йәшәү, ял итеү, күңел асыу өсөн уңайлы булған шарттар тыуҙырыу. Шуға ла ремонт миҙгеле етеү менән был тема ҡала хакимиәте башлығының һәр сығышында урын ала һәм һәр ваҡыт иғтибар үҙәгендә тора. Сираттағы оператив кәңәшмә лә ошо теманан башланды һәм Ирек Ишмөхәмәт улы был мәсьәләгә яуаплы ҡарауҙы, бюджет аҡсаларын һөҙөмтәле тотоноу һәм башҡарылған эштәрҙең сифаты буйынса ныҡлы контроль булдырыу, төҙөкләндереү эштәре барышында граждандар яғынан да контроль булдырыуҙы төп бурыс итеп билдәләне.**

# ГЕЛ МАҠТАУ ҒЫНА БУЛМАЙ...

## тәнҡит тә кәрәк

Әлеге ваҡытта талап ителгән конкурс процедураларын үткән подряд ойошмалары ремонт эштәрен башлаған. Быйыл 80 күп фатирлы йорттоң 55 ихата территорияһы ремонтланасаҡ. Был маҡсатта рейтинг тауыш биреүҙәрендә асыҡланған ике объектты - "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркы менән "Тулҡын" скверын да индереп, 330 миллион һум финанс бүлеү ҡаралған. Проектҡа ярашлы, ихаталарға асфальт һалынасаҡ, уларға үтеү юлдары киңәйтеләсәк, бордюрҙар алмаштырыласаҡ, парковка урындары арттырыласаҡ, яңы яҡтылыҡ сығанағы терәүҙәре ҡуйыласаҡ. Былтыр ошо программа буйынса 82 ихата төҙөкләндерелгән.

Үҫмер йылдарында үҙе лә спорт менән шөғөлләнгән ҡала хакимиәте башлығы "ысын ирҙәр тәрбиәләүсе" көс, таһыллыҡ талап иткән спорт төрҙәренә, уларҙың үҫешенә һәм популярлашыуына ҙур иғтибар бүлә һәм спортсыларҙы һәр саҡ ихлас ҡабул итә, ҡалала билдәле спортсылар, уларҙың күп меңле көйәрмәндәре армияһы бар. Ошо көндәрҙә Өфөгә көнсығыш бералышы буйынса иң уңышлы көрәшсе Хәбиб Нурмагомедовтың килеүе лә быға дәлил. Уның менән осрашыуҙа ҡалала көс спорты төрҙәре мәсьәләләре, уларҙы популярлаштырыу буйынса ла фекер алышынды. Һуңынан инде Ҡунаҡһарай алдындағы майҙанда ғәмәлдәге чемпион менән киң мәғлүмәт саралары вәкилдәре, көйәрмәндәр өсөн матбуғат конференцияһы уҙғарылды.

Оператив кәңәшмәләрҙә, ғөмүмән, Ирек Ялалов ыңғай күренештәрҙе генә билдәләмәй, етешһеҙлектәргә төртөп күрһәтеп, кәрәк икән, тәнҡит утына ла тота. Был юлы ла ул "Хәүефһеҙ һәм сифатлы юлдар" программаһын тормошҡа ашырыу барышы буйынса үҙенең теләктәрен, асыҡлап әйткәндә, трамвай киҫелештәрен үткән ваҡытта автомобилселәрҙең уңайһыҙлыҡтар кисермәҫкә тейешлеген һәм юлдарға билдәләр һалғанда уларҙың ҡулланылыу ваҡыты оҙағыраҡ булһын, аҡсаны елгә осормаҫ өсөн, был участкаларҙан транспорт ағымын үткәреүҙә туҡтатып тороу зарурлығын билдәләне.

Шулай уҡ ҡала өсөн мөһим мәлдәрҙең береһе булып төҙөлөш эштәре күпләп алып барылған һәм эштәрҙә бер нисә подрядсы башҡарған территорияларҙа сиктәр араһында бушлыҡ, хужаһыҙ ерҙәр булыуына юл ҡуймау тора. Сөнки Һупайлы биҫтәһе төҙөлөшө тәжрибәһенән сығып ҡарағанда, ике территория араһында хужаһыҙ ҡалған ерҙәрҙә төҙөкләндереү эштәре башҡарылмай, унда сүп-сар йыйыла һәм уны таҙартыу муниципалитет йәки идара итеүсе компаниялар, йәғни милекселәр елкәһенә ята. Шуға ла үҙләштерелеүсе территориялар сиктәрен аныҡ билдәләү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә.

Ошо көндәрҙә баш ҡалала тарихи-мәҙәни объекттарҙа (Черниковкалағы 8 ҡатлы йорт - "8-этажка" һәм Карл Маркс урамындағы Виденеевтарҙың килем йорто) күҙәтелгән проблемалар төрлө имеш-мимештәр таралыуға сәбәп булды, йәнәһе лә, мәҙәни объекттарҙы реставрацияламау өсөн махсус рәүештә ут төртәләр һ.б. Ҡала хакимиәте башлығы белдереүенсә, "8-этажка" тип аталған йортта ғына түгел, ғөмүмән, уҙған быуаттың 60-сы йылдарында төҙөлгән "хрущевка"-ларҙа балкондар ҡот оскос хәлдә. Артабан уларҙы ошо торошта ҡалдырыу унда йәшәүселәр өсөн дә, тротуарҙан хәрәкәт итеүселәр өсөн дә хәүефле. "Белгестәр шундай балкондарҙы һүтеүҙән башлап, уларҙы заманса пластик күсермәләр менән алмаштырыуға тиклем бер нисә вариант тәҡдим итте. Был осраҡта балкон үҙенең төп тәғәйенләнешен юғалта һәм бары тик декоратив элемент булып ҡына ҡала. Нисек кенә булмаһын, проблема үҙенән-үҙе юҡҡа сыҡмаясаҡ, уны хәл итергә кәрәк", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы.

Виденеевтарҙың килем йорто буйынса төп тәнҡит журналистар адресына яуҙы: "Зинһар, төрлө уйҙырмалар уйлап сығарып, шау-шыу ҡуптармағыҙ. Был тотош кварталды биләп торған ҙур комплекс буйынса 5 йыл инде төҙөүселәрҙең нисек итеп тарихи һәйкәлде тергеҙәсәге тураһындағы әкиәтен тыңлайбыҙ. Бындай объекттар ҡала буйынса йөҙләгән һәм, ҡағыҙҙа булараҡ, улар балаларҙың, йәштәрҙең мажаралы уйындары, асарбаҡтарҙың торлаҡ урынына әүерелә. Хатта ҙур төҙөлөш компаниялары эшмәкәрлек алып барған территорияларҙа ла яңынан әленән-әле күҙәтелә. Әйткәндәй, ошо көндәрҙә элекке УЗЭМИК заводы территорияһында ла янғын сыҡты. Ул да ташландыҡ объект. Әммә бергә ҙә был ҡахта һүҙ ҡуҙғатманы, янғын махсус ойошторолған тип белдермәне. Беҙ тыныс ҡалала йәшәйбеҙ һәм сәбәп булмаған ерҙә халыҡты ҡуҙғытмауығыҙҙы үтенәм. Юҡһа, бары тик беҙҙең дөйөм: коммуналь, торлаҡ, социаль проблемаларҙа үҙегеҙгә пиар

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ "Салауат" балалар бейеү академияһы X "Сиктәр юҡ. Юниор. 2018" халыҡ-ара балалар һәм үҫмерҙәр милли ижады фестиваль-конкурсында Гран-при яуланы. Фестиваль Абхазия Республикаһының Багрипш ҡасабаһында уҙҙы. Академия тәрбиәләнеүсеһе Салауат Бакиров фестивалдең иң яҡшы солисы тип танылды. Конкурс йомғаҡтары буйынса "Салауат" бейеү академияһы балалары халыҡ-ара фестивалдәрҙең береһендә ҡатнашыу өсөн Санкт-Петербургҡа саҡырыу алды.

✓ Башҡортостандың Мәғарифты үҫтереү институтында башҡорт телен уҡытыу курстары уҙа. Тәүге дәрестәрҙә көҙ уртаһында башларға ҡуҙаллайҙар. Курсты башлап ебәреүсе, Өфөләге "Арт-клуб"ты ойоштороусы Айгөл Рәшитова хәбәр итеүенсә, Мәғарифты үҫтереү институтында документтар һәм уҡытыу программаһы өҫтөндә эш башланған да инде.

✓ Өфөлә Ағиҙел йылғаһының яр буйын ҡарау өсөн яуаплы махсуслаштырылған ойошма булдырыла. Ошондай йөкләмәне Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов бирҙе. Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һүҙҙәренсә, хәҙер яр буйының торошо өсөн Өфөләге Киров районының ҡарау һәм төҙөкләндереү буйынса идаралығы яуаплы, әммә биләмәне таҙартыу эштәре һуңғы сиратта башҡарыла. Рөстәм Хәмитов был өлкәлә башҡа ҡалаларҙың тәжрибәһен өйрәнеү кәрәклеген билдәләне.

✓ Мәскәүҙә Рәсәй Федерацияһындағы бөтә моноҡалалар өсөн төп рейтинг һөҙөмтәләре иғлан ителде. Күмертау йәнә Рәсәйҙең иң яҡшы моноҡалаларының береһе тигән исемен раҫланы. Былтыр ҙа Күмертау тәүге ун лидер исемлегенә инде, 2018 йылда үҙенең статусын дәлилләне. Йыл ярым эсендә йылдам социаль иҡтисади үҫеш биләмәһе статусында Күмертауҙа туғыҙ резидент үҙ предприятиеларын асты, ҡала халҡы өсөн 1300-ҙән ашыу эш урыны булдырыҙы.

✓ Өфө урман техникумы 9-сы һәм 11-се синыфты тамамлағандарҙы уҡырға саҡыра. Ҡабул итеү - аттестаттағы уртаса балл күрһәткесе буйынса. Студенттар был уҡыу йортонда бюджет нигеҙендә көндөҙгө һәм ситтән тороп уҡыу бүлектәрендә төрлө специальностар буйынса белем алыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Аныҡ мәғлүмәтте www.yltt.ru рәсми сайтынан ҡарарға була.

✓ *Иң һәҙәмтәле ысул - вакцинация. Әммә ата-әсәләрҙең балаларына прививка эшләтеүҙән баш тартыуы сирләүселәрҙең артыуына килтерә. Былтыр республика буйынса бер осраҡ теркәлһә, быйыл - йыл башынан алып алты кеше.*



эшләргә тырышаһығыҙ. Үҙегеҙҙе яҡшы журналист итеп күрһәтер өсөн икенсе юлдар табығыҙ. Сенсация артынан ҡыуғансы, янғын һүндереүселәрҙең нисек оператив эшләүе, ғүмерҙәрен хәүеф аҫтына ҡуйып, бинаға инеүҙәре хаҡында яҙығыҙ, янғындың нилектән килеп сығыуы буйынса журналист тикшереүе үткәрегеҙ. Беҙ бер нәмә лә йәшермәйбеҙ, кәрәк икән, объектҡа алып инеп, уның ниндәй торошта икәнен дә күрһәтергә әҙербеҙ".

Әле балаларҙың каникулдар мәле. Мәктәптәрҙә ойошторолған көндөҙгө лагерҙар эшен тамамлаһа, һауыҡтырыу, спорт һәм хеҙмәт лагерҙары эшен дауам итә. Ошо көндәрҙә хакимиәт вәкилдәре уларҙың бер нисәһе менән танышыуын билдәләп, Ирек Ишмөхәмәт улы республикала ҡыҙылса ауырыуы менән сирләүсе балалар һаны артыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды һәм төрлө имеш-мимешкә юл ҡуймау өсөн Башҡортостан Республикаһы буйынса Роспотребнадзор идаралығы етәксеһе урынбаҫары Галина Перминаның хәл-торошҡа объектив баһа биреүен һораны.

- Йыл башынан республикала ҡыҙылса менән ауырыған 6 осраҡ теркәлгән, - тип билдәләне Галина Яковлевна. - Уларҙың береһе - Туймазы, 2-һе - Өфө районында, ҡалғандары - Өфө ҡалаһында. Әлеге ваҡытта Роспотребнадзор идаралығы хәл-торошто үҙ контроленә алды, прививкалары булмаған граждандарға пландан тыш вакцинация эшләнә, сир буйынса мониторинг алып барыла. Өҫтәмә вакцина алыуға һорау ебәрелгән.

Ҡыҙылсаға ҡаршы иң һәҙәмтәле ысул - вакцинация. Әммә һуңғы йылдарҙа ата-әсәләрҙең балаларына прививка эшләтеүҙән баш тартыуы сирләүселәрҙең артыуына килтерә. Былтыр республика буйынса бер осраҡ теркәлһә, быйыл - йыл башынан алып алты кеше. Ирек Ялалов яуаплы ведомстволарға БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы менән берлектә эш алып барыу бурысын йөкмәтте. Ни тиһәң дә, Украинала бөгөн 20 мең кеше ошо сиргә дусар, тиҫтәнән артыҡ кеше вафат булған. "20 йыл инде прививкаларҙың кәрәкме, юҡмы икәнлеге тураһында бәхәстәр бара. Ата-әсәләрҙең ғәмһеҙлеге шундай аяныслы һәҙәмтәләргә килтерә. Республикаға мигранттарҙың күпләп инеүе лә хәүеф зонаһын тыуҙыра. Әле Башҡортостанда 21 мең мигрант теркәлгән. Шуға күрә бигерәк тә балаларға етди иғтибар бирергә кәрәк. Сирҙең тәүге билдәләре күренеү менән ярҙам итергә тейешбеҙ", - тине ул.

**Зәйтүнә НИҒМӘТЙӘНОВА.**

*КӨН ҠАҘАҒЫ*

# БАЛАЛАРЫБЫҘҘЫ...

## туған телдә уҡытайыҡ!

**Рәсәй Дәүләт Думаһының бер төркөм депутаттары инициативаһы менән тәҡдим ителгән "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль законына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы закон проекты (туған телдәрҙе, милли республикаларҙың дәүләт телдәрен уҡытыу мәсьәләһе буйынса) йәмғиәтте тағы ла ҡуҙғытып ебәрҙе, Рәсәй субъекттарынан Дәүләт Думаһына ҡултамғалар ебәрелде, хаттар яҙылды. Татарстан депутаттары был проектҡа ҡаршы сығыш яһаны. Һөҙөмтәлә закон проектын ҡарау көҙгөләккә ҡалдырылып, Дәүләт Думаһы 8 июлгә тиклем төбәктәрҙән тәҡдимдәр ҡабул итәсәген белдергәйне. Әммә закон сығарыусылар ҡапыл ғына фекерен үҙгәртеп, яңы уҡыу йылы ошо ҡанунға ярашлы башланырға тейешлеге менән дәлилләп, уның беренсе уҡыу датаһын 19 июнгә билдәләне һәм күпселек тауыш менән ҡабул итеп тә ҡуйҙы.**

Ошо ваҡиға уңайынан 22 июндә РФ Дәүләт Думаһы депутаты, ҡанунды тикшереү һәм уны камиллаштырыу буйынса парламентта ойошторолған эшсе төркөмдән Башҡортостан вәкилдәренең береһе, "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары ассамблеяһы" төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Зөһрә Рәхмәтуллина Халыҡтар дуҫлығы йортонда ойошмаға инеүсе милли-мәҙәни һәм төбәк йәмәғәт ойошмалары рәйестәренә закон проекты буйынса аңлатмалар бирҙе. Зөһрә Йыһанур ҡыҙы айырыуса туған телдәрҙе һәм дәүләт телдәрен өйрәнеүҙе һайлау ата-әсәләрҙең йәки уҡыусыларҙың законлы вәкилдәренең ихтыярында булыуына һәм шуға күрә улар менән даими эш алып барырға, ә иң мөһиме, ғаиләлә туған теленә һөйөү тәрбиәләргә, балалар менән шөғөлләнергә кәрәклегенә баҫым яһаны.

- Был закон проекты РФ Дәүләт Думаһына ҡарауға индерелеү менән, апрель айында уҡ, республикала эшсе төркөм булдырылды, унда мин һәм Зариф Байғусҡаров инде, - тине Зөһрә Йыһанур ҡыҙы. - Юристар, йәмәғәт ойошмалары фекерен, тәҡдимдәрен дә иҫәпкә алып яҙылған хатыбыҙ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры ҡултамғаһы менән Дәүләт Думаһына ебәрелде. Унда шундай талаптар индерелгәйне:

1) Туған телдәрҙе уҡытыуҙы мотлаҡ инвариатив өлөштә ҡалдырырға;

2) Милли мәғариф, туған телдәрҙе уҡытыу концепцияһы булдырырға;

3) Ата-әсәләрҙән ғаризаларҙы бер тапҡыр ғына яҙҙырырға: йә башланғыс мәктәпкә килгәндә, йә төп белем биреү кимәлендә.

Был закон проекты буйынса Дәүләт Думаһында ла эшсе төркөм төҙөлдө, мин Башҡортостандан унда ағза булараҡ индем. Бик оҙаҡ фекер алышыуҙарҙан һуң эшсе төркөм был закон проекты буйынса Дәүләт Думаһының махсус ҡарарын ҡабул иттереүгә өлгәште. Ул Башҡортостандан тәҡдим ителгән 3 төп талапты закон проектының икенсе уҡыуға ҡаралырға тейешле тексына индереүҙе гарантиялай. Шулай итеп, 22 июндә булған ултырышта депутаттар закон проектының беренсе варианты менән параллель рәүештә ошо ҡарарҙы ҡабул итте, 373 депутат ыңғай тауыш бирҙе. Тимәк, закон проектын икенсе уҡыуҙа ҡарағанда беҙҙең төп талаптар тексҡа инәсәк. Был осорға РФ Мәғариф министрлығы шуға ярашлы норматив документтар әҙерләргә тейеш.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*ИҒТИБАР!*




# КОНКУРСТА ҠАТНАШ ӘЙҘӘ!

**Башҡортостанда республиканың дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан халыҡтары телдәрен һаҡлауға һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән Башҡортостан Башлығы гранттарын алыуға ғаризалар ҡабул итеү башланды. Бынан алда республика Башлығы Рөстәм Хәмитов ошондай проекттарға булышлыҡ итеү тураһында тейешле указға ҡул ҡуйғайны. Уның ҡушыуы буйынса, Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы дәүләт ярҙамы сараларын тапшырыу тәртибен әҙерләнә.**

Ведомствола асыҡлыҡ индереүҙәренсә, республика Башлығы гранттарына мәҙәниәт, мәғариф, фән, киң мәғлүмәт саралары, йәштәр сәйәсәте һәм спорт өлкәләрендә республиканың дәүләт һәм уның халыҡтары телдәрен, шулай уҡ төбәктән ситтә башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү буйынса эшмәкәрлек алып барған коммерцияға ҡарамаған ойошмалар, дәүләт һәм муниципаль унитар предприятиелар дәғүә итә ала.

Конкурста ҡатнашыуға ғаризалар 2-23 июлдә Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығының этномәҙәни үҫеш һәм төбәк-ара хеҙмәттәшлек бүлегендә иртәнге сәғәт 10-дан киске 5-кә тиклем ҡабул ителә. Ярҙамдың дөйөм суммаһы - 50 миллион һум. Гранттар түбәндәге йүнәлештәр буйынса субсидиялар формаһында бирелә:

✓ республиканың дәүләт телдәрен һәм Башҡортостан халыҡтары телдәрен, шулай уҡ төбәктән ситтә башҡорт телен һаҡлауға, үҫтереүгә, популярлаштырыуға йүнәлтелгән яңы мәҙәни мәғариф һәм ғилми проекттар булдырыу һәм тормошҡа ашырыу;

✓ рус теле һәм әҙәбиәтен, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен, Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен уҡытыу һәм өйрәнеү методикаларын тикшереү һәм әҙерләү;

✓ рус һәм башҡорт телдәрен, Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрен һаҡлау, үҫтереү, популярлаштырыу өлкәләрендә мәҙәни, мәғариф, нәшриәт, мәғлүмәт, телгә яраҡлашыу һәм башҡа проекттар, программалар әҙерләү;

✓ республиканан ситтә башҡорт халҡының мәҙәни мираҫын һаҡлау, сит илдәрҙә башҡорт диаспораларының эшмәкәрлегенә булышлыҡ итеү; халыҡ-ара, мәҙәни һәм фәнни бәйләнештәрҙе һәм хеҙмәттәшлекте киңәйтеү, туған телдәрҙе уҡытыу һәм өйрәнеү йәһәтенән үҙара файҙалы мәғлүмәт һәм тәжрибә менән алмашыу;

✓ Башҡортостандың дәүләт һәм уның халыҡтары телдәрен һаҡлауға һәм үҫтереүгә ҙур өлөш индергән билдәле эшмәкәрҙәрҙең хәтерен мәңгеләштереү;

✓ Рәсәйҙә һәм сит илдәрҙә республиканың мәҙәниәт һәм сәнғәт ҡаҙаныштарын пропагандалау һәм үҫтереү.

Республика Башлығы гранттарын алыуға конкурс 2018 йылдың 1-14 августында уҙа.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Кариес

❖ Кариес бәләкәй балаларҙа ла осрай. Уның сәбәбе - сабыйға төнгөләккә татлы сироптар, башҡа аҙыҡтар биреү. Балаға ваҡ итеп туралған йәшелсә, емештәр бирегеҙ, уларҙы сәйнәгәндә тештәре таҙарыр. Балалар кариесының тағы бер сәбәбе - стафилококк. Бала ауыҙына бысраҡ әйберҙәр ҡапмаһын. Уйынсыҡтарҙы йыуып, баланы тештәрен таҙа фланель туҡыма менән һөртеп торорға кәңәш ителә. Һөт тештәренең тағы бер дошманы - татлы ризыҡтар. Теш ҡаҙнаһы сирҙәре булмаһын өсөн кипкән икмәк, сөтләүек, йөҙөм, өрөк ашатығыҙ.

❖ Аҡыл теше лә күптәргә ауырлыҡтар тыуҙыра. Теш сыҡҡан ваҡытта температура күтәрелеүе, һыҙлау булыуы ихтимал. Аҡыл теше дөрөҫ үҫмәһә, кариес башланыуы бар. Шуға ла уны һурҙырыу күпкә яҡшыраҡ.

❖ Көн дауамында үлән төнәтмәләре менән тештәрҙе сайҡатыу файҙалы. 1-әр балғалаҡ сельдерей менән календула үләненә 300 мл эҫе һыу ҡойоп, термоста 3 сәғәт төнәтергә. Йәки тигеҙ күләмдә мәрүәт (просвирник) менән мәтрүшкә алып, 1 ҡалаҡ үләнгә 250 мл эҫе һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә.

❖ Аш содаһы менән теш таҙартмағыҙ. Сәләмәт тештәр аҡ төҫтә түгел, ә бер аҙ һарыраҡ йәки күгелйем булырға тейеш. Ә бына тештәге аҡ таптар кариес башланыуын күрһәтә, йәки һеҙ теш ағартыу менән мауығаһығыҙ.

❖ Теш ҡаҙнаһындағы таштарҙан төнәтмә: 1,5-әр балғалаҡ 5-7 йыллыҡ ҡайын ҡайырыһы, ҡаҙ үләненә (лапчатка прямостоячая) 200 мл эҫе һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнап ултырған һыуҙа тоторға, һөҙөргә һәм 40 минут төнәтергә. Көнөнә 5-7 тапҡыр ауыҙ ҡыуышлығын сайҡатырға.

❖ Теш пастаһын дарыухананан алыу яҡшыраҡ. Уны йәшәгән ерегеҙҙәге минераль матдәләрҙең дефицитына ҡарап һайлағыҙ. Балаларға паста йәше буйынса тура килһен. Пастала үләндәр, бал продукттары булһа, уның тәьҫире лә көслөрәк. Гель формаһындағы пасталар теш эмален нығыта, тик уларҙы ябай паста менән сиратлап тотонорға кәрәк. Сөнки гель ҡулланыу һөҙөмтәһендә тештәр тәбиғи төҫөн юғалта. Теш таҙартҡанда теш ҡаҙнаһына ла массаж яһарға. Был уларҙы нығыта.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ *Туған телдәрҙе һәм дәүләт телдәрен "белем усағының мөмкинлектәренән сығып" уҡытырға, тигән юлдар булғанда, милли республикаларҙың туған һәм дәүләт телдәрен уҡытыу бер ваҡытта ла ышанысы булмаясаҡ.*



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

### Иҫкәртеү һаңға һуғылмағас...

Халҡын иманға саҡырып та уларҙы тыңлата алмағас, Шөғәйеп бәйғәмбәр Алланан уларҙы енергә көс биреүен һорай. Алла әхлаҡһыҙ халыҡҡа ҡаршы сығырға ҡыйыулыҡ иткән һәр илсеһенә лә ярҙам итә. Шөғәйептең халҡы бәйғәмбәрҙең саҡырыуҙарын һаңға һуҡмай, аҙғынлыҡ ҡылып йәшәүҙәрен дауам иткәс, Алла уларға көслө ғәрәсәт ебәрә. "Ер тетрәй башлағас, иң ҡаты язаға лайыҡлы был иманһыҙҙарҙың йөрәктәре урынынан ҡупты һәм ҡоттары осҡан кешеләр ҡалалары-ние менән ҡыйралды, хатта бер генә кейек-януар һәм башҡа йән эйәләре тере ҡалманы".

Өс сүрәлә Шөғәйеп бәйғәмбәрҙең әхлаҡи яҡтан тарҡалған халҡының ҡылған аҙғынлыҡтарына ярашлы, төрлө язалар бирелеүе иҫкә алына. Мәҫәлән, бер сүрәлә Шөғәйеп бәйғәмбәрҙең уларҙы әхлаҡ һәм иманға саҡырыуҙарын мыҫҡыллап көлгән халыҡтың ҡоролоҡ ярҙамында ҡырылыуын бәйән итә. Ергә аҙ ғына ла ел иҫмәгән ете көнлөк ҡоролоҡ ебәрелә. Аҙғын халыҡ тынды өтөрҙәй эҫелектән нисек ҡотолорға белмәй. Хатта күләгәлә һыу ҡайнонп йәки мәмерйәгә ҡасып та эҫенән ҡотола алмағас, барыһы ла сүллек өҫтөндә пәйҙә булған ҡара болот күләгәһенә йүгереп килеп өйөлөп тора. Ләкин ямғыр урынына Алла болоттарҙан уларға ут ямғыры яуҙыра һәм көслө дауыл ҡуҙғыта. Шөғәйеп бәйғәмбәрҙең аҡыллы һүҙҙәренә ҡолаҡ һалып, уның саҡырыуҙарын ҡабул итеп, Алла яҡлауына һыйынып, Уға рәхмәтле булып, иманлы тормошта йәшәргә теләмәгән аҙғындарҙан береү ҙә иҫән ҡалмай, хатта ҡасандыр бында кемдәрҙер йәшәгән һымаҡ та булмай, сөнки күңелдәре бысраҡ, боҙоҡ халыҡты ер йөҙөнән юҡ иткән яман ғәрәсәттән һуң күк йөҙө асылып, ергә һиллек килә. Шулай итеп, Аллаһ һанламаған иманһыҙ халыҡ Ер йөҙөнән юҡ ителә.

### Яҡуп менән Исхаҡтың тарихы

Исхаҡ тыуғанда атаһы Ибраһимға - 100, әсәһенә 90 йәш булған. Ул Исмәғил ағаһынан 14 йәшкә кесе. Ҡөрьәндә Исхаҡ бер нисә тапҡыр маҡталып телгә алына.

Исхаҡ Рифҡә Битваил исемле ҡыҙға өйләнә. Тәүҙә ул түлһеҙ була, ләкин Аллаға ялбарғас, Рифҡә игеҙәк ир балалар таба. Уларҙың береһенә Айсу, икенсеһенә Яҡуп тип исем ҡушалар. Айсу һунынан римдарҙың, ә Яҡуп израилдәрҙең атаһы булып таныла. Исхаҡ Яҡупҡа ҡарағанда Айсуҙы яратыңҡырай, ә ҡатыны Рифҡә Айсуҙан бәләкәйерәк тип, Яҡупты нығыраҡ ярата. Исхаҡ ҡартайып, күҙҙәре насар күрә башлағас, ашар ризыҡ табып килтер тип, бер мәл Айсуҙы һунарға ебәрә. Ул киткәс, Рифҡә улы Яҡупты саҡырып ала ла, атаһының фатихаһын алыу өсөн тиҙ генә көтөүҙәге иң һимеҙ ике һарыҡты алып ҡайтып, Айсу ҡайтҡансы ризыҡ әҙерләргә ҡуша. Үҙе Яҡупҡа Айсуҙың кейемен кейҙереп, муйынына, ҡулдарына һарыҡ тиреһен (Айсуҙың тәне йөнлө булған) бәйләй. Яҡуп атаһына яҡынлашҡас, атаһы: "Һин кем?" - тип һорай. "Мин һинең улың", - тип яуаплай Яҡуп. Атаһы: "Тауышың Яҡуптыҡы һымаҡ, ләкин кейемең дә, тәнең дә Айсуҙыҡына оҡшаған", - ти ҙә, ашап туйғас, улына һәм уның варистарына фатихаһын бирә.

Яҡуп киткәс, һунарҙан Айсу ҡайта. "Был нимә?" - тип һорай атаһы ул килтергән ризыҡҡа ишаралап. "Һинең яратҡан ашамлығың", - ти Айсу. "Бер сәғәт элек кенә ашап, һинең өсөн доға ҡылып, фатихамды бирҙем. Шул ризыҡты һин килтермәнеңме ни?" - ти ғәжәпкә ҡалған атаһы. "Алла менән ант итәм, мин түгел", - ти Айсу. Ул быны Яҡуп эшләгәнен аңлай һәм атаһы үлгәс, Яҡупты үлтерергә ант итә. Атаһынан үҙе өсөн дә доға ҡылыуын һорай һәм Исхаҡ Алланан Айсуға һәм уның варистарына Ерҙәге иң бай ерҙәрҙе бүләк итеп, уларҙы шул ерҙәрҙең хакимдары итеүен һорап, доға ҡыла.

Рифҡә Айсуҙың ҡустыһын үлтерергә ниәт итеүен белеп ҡала ла, Харран ерендә йәшәүсе ағаһы Лабан янына китергә, уның ҡыҙҙарының береһенә өйләнергә ҡуша. Ул шулай уҡ ире Исхаҡтан да игеҙәк һыңары Яҡупҡа ағаһының еренә китеп йәшәргә ҡушыуын үтенә. Исхаҡ ҡатыны үтенесен кире ҡаҡмай, Яҡупҡа Лабан ағаһы янына китеп йәшәргә кәңәш итә һәм уның өсөн доға ҡылғас, Яҡуп төндә юлға сыға.

**(Дауамы бар).**

КӨН ҠАҘАҒЫ

# БАЛАЛАРЫБЫҘҘЫ...

## туған телдә уҡытайыҡ!



*Туған телдә әкиәттәр һөйләп, Башҡорт улы булып үҫәм мин...*

**(Башы 5-се биттә).**

Беренсе уҡыуҙа ҡабул ителгән закон проектына килгәндә, дөйөм алғанда, туған телдәрҙе һәм дәүләт телдәрен вариатив өлөштә ҡалдырыуҙы күҙаллаған тәүге проект менән сағыштырғанда, уның ыңғай яҡтары ла бар. Мәҫәлән, 11-се статьяның 5-се пунктына өҫтәмә индерелеүе (1-се пунктына 6-сы подпункт өҫтәлә тип аңлайым, сөнки беренсе пункт гарантиялай, ә 5-се пунктта һүҙ икенсе нәмә тураһында бара). Шулай булған хәлдә, был подпункт 14-се статьяның 4-се пунктын көсәйтә генә. Йәғни 14-се статьяның 4-се пункты белем биреү учреждениеһының мөмкинлегенән сығып, туған телдә белем алыу һәм тәрбиә хоҡуғы барлығын белдерһә, яңы өҫтәлгән пункт ошо мөмкинлекте гарантиялай, бары тик ата-әсәләрҙең (балаларҙың законлы вәкилдәренең) уҡытыу һәм тәрбиә телен һайлауы ғына шарт. Был бигерәк тә баш ҡалалағы һәм башҡа ҡалаларҙағы башҡорт гимназиялары өсөн йәшел юл асасаҡ, сөнки белем усаҡтарына балаларҙы беркетелгән территория буйынса ҡабул итеү талабы һәҙәмтәһендә, бында икенсе милләт балалары ла уҡыуына һылтанып, уҡытыу һәм тәрбиә өлкәһендә әсә телен бөтөрөргә тырышыуҙары сер түгел. Ә милли белем усаҡтарының уставтарына ярашлы, уларҙа белем алыу һәм тәрбиә эше туған телдә алып барылырға тейеш.

Икенсенән, Башҡортостандан ебәрелгән тәҡдимдәр РФ Дәүләт Думаһының махсус ҡарарына индерелгән, йәғни унда туған телдәр мотлаҡ уҡытылырға тейешле өлөштә (инвариатив) ҡалдырыла, тиелгән (Бында шуны ла билдәләп китергә кәрәк: закон проектын тәүге вариантында ҡабул итеүгә ҡаршы Рәсәйҙән 20 мең самаһы ҡултамға йыйылһа, шуларҙың 17 меңе - Башҡортостандан, 2 мене - Татарстандан, ҡалған өлөшө башҡа милли республикаларға тура килә). Ләкин, мотлаҡ өлөш мотлаҡ уҡытыу тигәнде аңлатмай: туған телдәр, шул иҫәптән туған телдәр исемлегендә законлы рәүештә нығытылған рус теле лә, ата-әсәләрҙең ғаризаһына ярашлы һәм белем биреү учреждениеһының мөмкинлектәренән сығып уҡытыласаҡ. Ябайлаштырып әйткәндә, әгәр ата-әсәләр башҡорт телен һайламай икән, хәл-торош шул килеш ҡаласаҡ йәки һайлаусылар аҙ булғанда, мәктәп-гимназия-лицей хакимиәте мөмкинлек юҡҡа һылтанасаҡ. Һәр хәлдә, ата-әсәләр туған тел булараҡ башҡорт телен һайлаһа, был дәрестәр һаҡланасаҡ.

Ләкин тағы бер нәмә күңелдә өйкәп тора: әгәр рус ата-әсәләре (улар күпселекте тәшкил итә) туған тел булараҡ рус телен уҡыуҙы һайламаһа? Сөнки туған телдәрҙе көсләп уҡытып булмай, ул һайлау буйынса тормошҡа ашырыла, тимәк, рустар туған тел булараҡ рус телен һайламаҫҡа ла хоҡуҡлы. Ул саҡта "баш тартыусыларға" ниндәй предмет тәҡдим ителәсәк? Мотлаҡ өлөштәге икенсе предметмы, әллә БДИ тапшырылмаған башҡа фәнме? Һәр хәлдә, быны мәктәп хакимиәте менән ата-әсәләр комитеты һәм балалар үҙҙәре хәл итә. Тап ошо мәсьәлә борсой ҙа инде: рустар үҙ телен туған тел булараҡ һайлармы, әллә баш тартырмы? Шулай уҡ, рус теленең инвариатив өлөштә туған тел булараҡ закон менән нығытылыуы быға тиклем баҫҡан тырмаға ҡабаттан баҫтырмаҫмы? Сөнки быға ҡаса ата-әсәләр һәм уҡыусыларҙың законлы вәкилдәре үҙ туған телен һайлауҙан баш тартып, ни өсөн рус теленә өҫтәмә бер кемгә лә сер булманы: был дәрестәрҙә балаларҙы БДИ-ға әҙерләнеләр. Артабан бындай күренештәргә юл ҡуйылмаясаҡ, дәүләт теле һәм туған тел - икеһе ике предмет өлкәһе, улар ике төрлө программа буйынса уҡытылырға тейеш, тип ышандырған булалар ҙа ул, әммә бөгөнгә ике төрлө стандарттар заманында быға ышаныуы бик икеле.

Ике төрлө стандарттар, тигәндән, Рәсәйҙә дәүләт телдәрен һәм туған телдәрҙе уҡытыу тап ошо ике төрлө стандарттарға ярашлы тормошҡа ашырыла ла инде. Миҫал эҙләп йыраҡҡа йөрөйһө түгел: ошо закон нигеҙендә лә асыҡ сағыла ул. Сағыштырыу өсөн дәүләт телдәрен уҡытыуҙы алып ҡарайыҡ. Вазифа биләүселәр аңлатыуынса, рус теле - Рәсәй территорияһында дәүләт теле булып тора һәм шуға күрә ул барлыҡ белем усаҡтарында ла аҙнаһына 8-9 сәғәт уҡытыла. Шул уҡ ваҡытта Төп Законға (68-се статья, 2-се өлөш) ярашлы, республикалар үҙҙәренең дәүләт телен булдырырға хоҡуҡлы, РФ Конституция суды (16 ноябрь, 2014 йыл, №16-П) уны илдең төп дәүләт теле менән бер тигеҙ уҡытыу РФ Конституцияһына ҡаршы килмәй тип билдәләне. Әммә бөгөнгә хәлдәр демократияның ике төрлө стандарттарға ярашлы тормошҡа ашырылыуын ҡабат-ҡабат раҫлай: рус дәүләт теленә күп сәғәттәр бирелә, ә милли республикалар телдәренең урыны - вариатив өлөштә. Бында тағы ла дәүләт теленең бурыстары аныҡланмауы уйландыра.

Башҡа милләттәр үҙҙәренең милли туған телдәрен уҡығанда рус балаларына законлы рәүештә тағы ла өҫтәмә ике сәғәт бирелеүе лә ғәҙеллек принциптарын боҙа бит. Был ваҡытта улар республиканың дәүләт телен өйрәнһә, күпкә отошлораҡ булыр ине. Һәм быны ҡануниәттә мотлаҡ сағылыш табыуы зарур. Әгәр депутаттарҙың, дәүләт телдәре лә мотлаҡ уҡытылырға тейешле өлөштә, тигәненә ышанып, тынысланһаҡ, яңы уҡыу йылында бөтөнләй дәүләт телдәре дәрестәрһеҙ тороп ҡаласаҡбыҙ йәки улар факультативҡа әйләнәсәк. Сөнки парламентарийҙарҙың теләге менән ысынбарлыҡ айырыла: депутаттар вариатив өлөштә лә мотлаҡ уҡытылырға тейешле өлөш тип ҡарай (закон күҙлегенән был дөрөҫ тә), ә ғәмәлдә ундағы предметтар уҡыу программаһына һайлап индереү нигеҙендә тормошҡа ашырыла.

Беренсе уҡыуҙа ҡабул ителгән "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Законға үҙгәрештәр индереү тураһында" федераль закон проектында (ул элекке ҡанун тексында ла бар ине) туған телдәрҙе һәм дәүләт телдәрен "белем усағының мөмкинлектәренән сығып" уҡытырға, тигән юлдар булғанда, милли республикаларҙың туған һәм дәүләт телдәрен уҡытыу бер ваҡытта ла ышанысы булмаясаҡ, сөнки бөгөнгө иҡтисади тоторокһоҙлоҡ заманында мөмкинлектәр бөгөн - бар, иртәгә - юҡ. Шулай уҡ, әгәр мөмкинлектәрҙе һайлау хоҡуғы бирелгән икән, тимәк, күпселек осраҡта ул "юҡ" яғына ауышасаҡ, юҡтың башы ауыртмай бит... Ә инде закон бәләкәй граждандарҙың хоҡуғын тормошҡа ашырыуҙы һәм дәүләткә сығымдарҙы финанслауҙы мотлаҡ йөкмәтһә, хәл-торош бөтөнләй икенсе төҫ алыр ине. Беҙгә бит башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙәге милләттәштәребеҙ хаҡында ла оноторға ярамай. Был закон уларҙың туған телендә белем алыу һәм уны өйрәнеүен сикләргә түгел, киреһенсә, юл асырға тейеш. Закон "мөмкинлектәрҙән сығып" тигән һайлау ҡуйғанда, Башҡортостанда йәшәгән башҡорттар өсөн мөмкинлектәр булмағанда, ситтәгеләр тураһында әйтеп тораһы ла түгел...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әлегә бер генә мәл күңелде йыуата: закон проекты беренсе уҡыуҙы үткәндән һуң 30 көн эсендә тәҡдимдәр ебәрергә була. Ваҡыт бар, әммә ашығырға кәрәк.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

✓ *Бик боронғо дәүерҙәрҙә Урал ерлегендә төрки, фин, монгол ҡәбиләләре лә барлыҡҡа килеүенә ҡарамаҫтан, бары тик башҡорттар ғына үҙенең тәү Ватанында мәңгелеккә тороп ҡалған...*



*ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...*

# УРАЛ - БАШҠОРТТОҢ ТӘҮ ВАТАНЫ,

## йәки билдәһеҙ ғалимдың яҙмаһы ниҙәр һөйләй?



**Рәсәйҙең боронғо акттары дәүләт архивында билдәһеҙ автор тарафынан 1852-1855 йылдарҙа яҙылып, "Башҡорт-мишәр ғәскәрен тарихи һәм статистик яҡтан байҡау" тип аталған документ табылғайны. Ошо тарихи документ өлөшләтә "Башҡортостан архивтары" ғилми-документаль журналында 2007 йылда рус телендә баҫылып сыҡҡайны.**

Бынан 150 йылдан ашыу элегерәк барлыҡҡа килгән был яҙмала авторҙың башҡорт тарихына ҡағылышлы үҙенсәлекле генә ҡараштары сағылыш тапҡан. Күрәһең, яҙма авторы башҡорт халҡының боронғо тарихы буйынса мәғлүмәтле зат булған тарихсы-ғалим булғандыр. Ошо документта башҡорттарҙың Урал төбәгендә йәшәүсе иң боронғо халыҡтарҙың береһе булыуы тураһындағы фекер айырыуса иғтибарҙы йәлеп итеп тора: билдәһеҙ ғалимдың фекеренсә, башҡорттарҙың борон-борондан Урал буйҙарын төйәк иткән тәү ҡәбиләнең туранан-тура вариҫтары булыуы бәхәс тыуҙырмай. Бик боронғо дәүерҙәрҙә Урал ерлегендә төрки, фин, монгол ҡәбиләләре лә барлыҡҡа килеүенә ҡарамаҫтан, бары тик башҡорттар ғына үҙенең тәү Ватанында мәңгелеккә тороп ҡалған... Был документты башҡорттарҙың килеп сығышының һәм тарихының күскенселек концепцияһына тәнҡит күҙлегенән ҡарау өсөн тағы ла бер дәлил рәүешендә күрһәтергә була. Өфө ҡәлғәһенә 1586 йылда ҡала статусы бирелеү факты ошо яҙма авторы тарафынан уны нигеҙләү датаһы итеп күрһәтелеүгә сәбәп булғанлығына иғтибар итергә кәрәк. Ошо яҙмалағы тарихи мәғлүмәт уҡыусыларыбыҙҙа ла ҡыҙыҡһыныу уятыр,тип уйлайбыҙ.

**"Тарихи өлөш.** Башҡорттар тураһында боронғо мәғлүмәттәр. Хәҙер Ырымбур крайында көн иткән төрлө ҡәүемдәр араһында башҡорттар үҙҙәре биләгән ерҙәрҙә борон-борондан йәшәгән берҙән-бер халыҡ булып тора. Уларҙың Волга аръяғында йәшәүе тураһындағы мәғлүмәт Христос тыуғандан һуң X быуат башында уҡ билдәле булһа, бында осраған башҡа ҡәүемдәрҙең барыһы ла тарихи ҡомартҡыларҙа XVI быуат урталарынан, Грозныйҙың Ҡаҙанға яһаған походтарынан да иртәрәк иҫкә алынмай.

X быуат башҡорттары тураһында Хиванан (Джорджак) Волга булғарҙары батшаһына барышлай уларҙың ерҙәре аша үтеп сыҡҡан Моҡтадир хәлиф илсеһе Әхмәт ибн Фаҙлан аша хәбәрҙарбыҙ. Ул ошо халыҡтың атамаһы Башгурд булыуын билдәләй һәм, башҡорттарҙы төрки ҡәүемдәр иҫәбенә индереп, уларҙың иң көслөһө һәм уҫалы булыуы тураһында яҙа. Артабан ул, башҡорттарҙың мәжүси диндәре тураһында бер аҙ мәғлүмәт биреп, уларҙың ҡайһы берҙәренең мосолман булыуын да иҫкә ала... Ибн Фаҙландан һуң башҡорттар һәм Башҡортостан XIII быуатта Көнбайыш Европанан Урта Азияға бөйөк монгол хандарына папа илселәре сифатында килеп йөрөгән католик миссионерҙар яҙмаларында телгә алына. Уларҙың береһе, Плано Карпини, Половецтар (Ҡыпсаҡ) ере тураһында бәйән итеп, уның төньяҡтан "башҡорттар иле, венгрҙарҙың ватаны менән" сиктәш булыуы тураһында әйтә. Икенсеһе, Руисбрек (Рубрук. - Ред.), Башҡортостандың Волга менән Урал араһында, Волга булғарҙары еренә күрше булыуын иҫкә ала. Шулай уҡ ул Паскатир кешеләре "венгр телендә һөйләшә", тип билдәләй.

**Иң яңы тикшеренеүҙәр буйынса халыҡтың килеп сығышы.** Башҡорттарҙың венгрҙар менән оҡшашлығы тураһында иҫкә алынған миссионерҙар тарафынан әйтелгәндәр хәҙер ошо хаҡтағы күп тикшеренеүҙәрҙән һуң аҙ ғына булһа ла шик тыуҙырмай. Былары ла, тегеләре лә бер үк боронғо Урал ҡәбиләһенән килеп сыҡҡан. Хәҙерге заман этнографтары аңлатыуынса, был ҡәбилә тәү тормош дәүере ҡәбиләһе булып, бик боронғо замандарҙа уның нигеҙендә фин, монгол һәм төрки ҡәбиләләре, ә унан да һуңыраҡ бөтә хәҙерге фин-татар халыҡтары тип аталып йөрөлгәндәре барлыҡҡа килгән. Ул Урал ҡәбиләһе тип аталған, сөнки Урал тауҙары унын тәү төйәге итеп һаналған... Ҡәбиләнең үҙ Ватаны булған тауҙарҙа, Көньяҡ Урал һырттарында тороп ҡалған өлөшө иң кәмендә X быуаттан алып хәҙерге ваҡытҡа тиклем башҡорттар тип аталып йөрөүсе халыҡты барлыҡҡа килтергән...

**Башҡортостанда рус хакимлығының тәүге осоро.** Яңы подданныйҙарға еңел яһаҡ һалынып, уны индереү һәм бер үк ваҡытта Башҡортостан сиктәрендә рус власын нығытыу, уның халҡын нуғай баҫҡынсыларынан ҡурсалау маҡсатында 1586 йылда Өфө йылғаһы Ағиҙелгә ҡойған урында шулай уҡ Өфө тип аталған ҡала төҙөлә. Рәсәйҙән күсерелеп килтерелгән дворяндар һәм хеҙмәтсе кешеләр йәшәгән был ҡала, уны уратып ятҡан бөтә ил кеүек үк, махсус воевода идаралығына тапшырыла. Башҡортостан дүрт "юлға" ("дороги") бүленә: Өфөнән Ҡаҙанға табан ятҡан өлөшө - Ҡаҙан юлы, Оса (Камала) ҡала яны йүнәлешендәгеһе - Оса юлы; Себер тарафына ҡарағаны - Себер юлы, ә көньяҡ далалары йүнәлешендәгеһе - Нуғай юлы тип атала. Был бүленеш Ырымбур губернаһы ойошторолғанға тиклем һаҡлана. Һуңынан башҡорт ерендә аҡрынлап бүтән ҡалалар ҙа төҙөлә башлай: Бөрө, Минзәлә һ.б...

Башҡортостанда төҙөлгән ҡалаларҙан, дворяндарға һәм хеҙмәт итеүсе кешеләргә бирелгән ерҙәрҙән башҡа урындарҙа башҡорттарға үҙҙәренең боронғо ғөрөф-ғәҙәттәренә ярашлы старшиналары тарафынан идара ителеү мөмкинлеге бирелеп, беҙҙең хөкүмәтебеҙ уларҙың эске идаралығына бер нисек тә ҡыҫылманы, ә уларҙың башҡа ерҙәрен һатып йәки ниндәй ҙә булһа бүтән төрлө юл менән милеккә алыу ғына түгел, ә оҙайлы ваҡытҡа ҡуртымға алыу ҙа тыйылды.

Уларҙың "тархан" исеме алғандары яһаҡ түләүҙән азат ителеп, үҙ торлаҡтарына яҡын ерҙәрҙә генә түгел, ә батша ихтыяры ҡайҙа теләй, шунда хәрби хеҙмәткә саҡырыла. Яһаҡ юҡҡа тиң булғас, тарханлыҡ күрәләтә ауыр йөк рәүешендә ҡабул ителергә тейеш булыуына ҡарамаҫтан, был башҡорттарҙың яугирлығына тап-таман тура килгән хәл булды; тарханлыҡ хөрмәт билдәһе итеп ҡаралды, һәм башҡорттар һәр ваҡыт беренсе саҡырыу менән үк меңәрләп килеп, үҙҙәрен поляктарға һәм шведтарға, йәки төрөктәргә һәм ҡырымдарға ҡаршы хеҙмәткә ебәреүҙе талап итте..."

**Миңнәхмәт ВӘЛИЕВ әҙерләне.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Хәмит АЛҒАР*

# ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

Ҡаҙаҡтарҙы татар мәҙрәсәләрендә уҡытыу XVIII быуат аҙағында башлана: мосолмандарҙың Дини Йыйылышының беренсе мөфтөйө Мөхәмәтйәндең ҡаҙаҡ ханына кейәүгә бирелгән ҡыҙы Фатима иренә бер төркөм йәш ҡаҙаҡ егеттәрен үҙ иҫәбенә Стәрлебаш һәм Стәрлетамаҡ мәҙрәсәләренә ебәрергә тәҡдим итә. XIX быуат урталарына татарҙарҙың ҡаҙаҡтарға йоғонтоһо шул тиклем арта, хатта татар менән ҡаҙаҡ араһындағы был мөнәсәбәттәр руслаштырыу сәйәсәте өсөн ысын хәүеф тыуҙыра, тип уйлаған урыҫтарҙа һәм урыҫтар яҡлы күҙәтеүселәрҙә борсолоу уята. Мәҫәлән, урыҫ сәйәсәтенә төрлө юлдар менән хеҙмәт иткән ҡаҙаҡ Чокан Вәлиханов, үҙенең 1863 йылдан да һуң һәм 1864 йылдан да иртәрәк яҙылмаған, тип иҫәпләнгән йәшерен меморандумында ҡаҙаҡ далаларын мосолмандарҙың Ырымбурҙағы Диниә назараты юрисдикцияһынан сығарырға; татарҙар инанған дингә хөрмәт менән ҡарап, шул уҡ ваҡытта ҡаҙаҡтарҙың татарҙарҙан айырым халыҡ булыуын иҫәпкә алып, ҡаҙаҡтар өсөн айырым дини хакимиәт ойошторорға; "асыҡ булмаған маҡсаттар" менән татар мәҙрәсәләренән килеүсе хажи һәм ишандарға ҡаҙаҡтар араһында төпләнеүгә юл ҡуймаҫҡа; ошоларҙан башҡа, әле күрһәтелгән татар ишандары һәм хажиҙары, Баянаул һәм Ҡарҡаралинск райондарындағы һымаҡ дәрүиш һәм мистик ойошмалар төҙөүгә ҡамасаулыҡ итеү маҡсатында, ҡаты күҙәтеү аҫтында тотолорға тейеш, тигән тәҡдимдәр индерә.

Ошонан һуң егерме йыллап ваҡыт үтеүгә, билдәле этнограф В. Радлов "Себерҙә" тип исемләнгән хеҙмәтендә, татар сауҙагәрҙәренең эшмәкәрлеге тураһында үҙенең борсолоуҙарын белдереп, былай тип яҙған: "Көнсығыш далаларында Ислам йоғонтоһоноң үтә ныҡ көсәйеүе һөҙөмтәһендә йөҙәрләгән йәш ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ) егеттәре, үҙҙәрендә башланғыс белем алғас, татар мәҙрәсәләренә инеү өсөн Рәсәйгә йүнәлә һәм унда Ислам фәндәрен өйрәнә". Ул бер нисә тиҫтә йыл дауамында Стәрлебаш ауылына уҡырға йыл һайын йөҙ илле ҡаҙаҡ егете килеп, уларҙың бында уртаса алғанда ун йылға тиклем уҡып ятыуҙарын күрһәтә. Стәрлебаштың Нәҡшбәндиә туғанлығының урындағы үҙәге булыуын иғтибарға алырға кәрәк: бындағы мәҙрәсә Ниязкули хан Төркәмәни хәлфәләренең береһе Ниғмәтулла ишан ҡулы аҫтында була.

Троицкиға урыҫ биләмәләре сиктәрендә, ҡаҙаҡ далаларына яҡын булған ерҙә 1743 йылда нигеҙ һалынған; "Рәсүлиә" мәҙрәсәһенең бында урынлашыуы идеаль тип әйтерлек булып, татар, башҡорт һәм ҡаҙаҡ шәкерттәрен үҙенә тартып торған. "Рәсүлиә" мәҙрәсәһен тамамлаған шәкерттәрҙең иҫәбе билдәле түгел, шулай ҙа был турала яҙған әл Мағази XX быуат башына был һанды 311 тип күрһәтә. Шәкерттәрҙең составы, уларҙың этник төркөмдәренең нисбәте шулай уҡ билдәһеҙ; Зәйнулланың карьераһын сағылдырған, уның үҙенеке тип иҫәпләнгән отчеттарҙағы һандар, уның эйәрсәндәренең иҫәбе тураһындағы мәғлүмәттәр кеүек үк, бер-береһенә тап килмәй. Ямалетдин Вәлидов, мәҫәлән, уның унар меңләгән мөриттәре булып, күбеһенең ҡырғыҙ (ҡаҙаҡ) һәм башҡорт булыуы тураһында яҙа. Был мөриттәрҙең бөтәһе лә Зәйнулла ишан тарафынан Троицкиҙа уҡытылмаған - уның үҙ шәкерттәрен Ислам динен пропагандалау, дини мәғрифәт кимәлен күтәреү маҡсатында ҡаҙаҡтар араһына ебәреүе мөмкин. Шул замандағы бер мәғлүмәткә ярашлы, XX быуат башында түбәнге Волга, Урал, Себер тарафтарының күп ҡала һәм ауылдарында йөҙәрләгән мулла, башҡа руханиҙар Зәйнулла ишандың йоғонтоһо аҫтында булған.

**(Дауамы бар).**

***Ризаитдин Фәхретдиндең рухи мираҫында һаҡланған иң мөһим фекерҙәрҙең береһе - кемдер хәҡиҡәтте тик үҙ яғында ғына күрә икән, төрлө диндәр араһында һыйышып йәшәү мөмкин булмаясаҡ.***



# ҺАҠАЛ ОҘОНЛОҒО, йөҙ йыртыуға сәбәп

**XIX быуат аҙағында, XX быуат башында йәшәгән һәм ижад иткән арҙаҡлы дин һәм йәмғәт эшмәкәре, шәйех Зәйнулла ишан Рәсүлев, тағы ла бер күренекле шәхесебеҙ - Ризаитдин Фәхретдинов кеүек зыялыларыбыҙҙың тарихи роле баһалап бөткөһөҙ. Ошо шәхестәр һәм уларҙың йөҙәрләгән уҡыусылары башҡорт мәғрифәте һәм мәҙәниәтен күтәреү өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләгән. Бынан 100 йыл элек башҡорт зыялыларының берҙәм һәм ойошҡан рәүештә күтәрелеп сығып, үҙ артынан бар халыҡты әйҙәп барып, Рәсәйҙә иң тәүге автономия төҙөүгә өлгәшеүен бына ошондай юғары мәҙәниәтле заттарҙың күп йылдар буйына алып барған мәғрифәтселек хеҙмәтенең гүзәл емеше итеп ҡарау раҫтыр. Рәсми тарихсыларыбыҙҙың ҡайһы берҙәре дин эшмәкәрҙәренең ошо роленә иғтибар итмәй килде. Суфыйсылыҡтың һәм Ислам мәҙәниәтенең ижтимағи-сәйәси тормошобоҙҙа тотҡан урыны тураһында билдәле Ислам белгесе, философия фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһы Философия институтының Ислам донъяһы философияһы секторының әйҙәүсе ғилми хеҙмәткәре Илшат Рәшит улы НАСЫРОВтың фекерҙәрен һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим итәбеҙ.**

**Билдәле сәбәптәр арҡаһында Исламды фундаменталистар тыуҙырыусы дин рәүешендә ҡараусылар күбәйеп бара. Ысынбарлыҡта башҡа диндәргә тигеҙ һәм түҙемле ҡараш яҡлылар Исламда элек-электән өҫтөнлөк иткән түгелме һуң?**

- Беҙ бөгөн бөтә Рәсәйҙәге кеүек үк, Башҡортостанда ла диндең тергеҙелеп, унын йәмғиәттәге әһәмиәте күтәрелә барыуына шаһитбыҙ. XIX быуат аҙағында, XX быуат башында йәшәгән күренекле башҡорт дин эшмәкәрҙәре ижадына ҡарата ҡыҙыҡһыныу арта бара. Уларҙың рухи мираҫы милли сиктәрҙән сығып, тотош Ислам мәҙәниәтенең һәм уның аша донъя мәҙәниәтенең айырылғыһыҙ өлөшөнә әйләнде. Бына, мәҫәлән, арҙаҡлы башҡорт ғалимы, мәғрифәтсе һәм дин эшмәкәре Ризаитдин Фәхретдинов ижадының әле быға са тейешенсә баһаланмаған яңы һыҙаттары асыла бара. 2009 йылдың 28 ғинуарында Мәскәүҙә "Ризаитдин Фәхретдин Рәсәй журналистикаһы тарихында. Арҙаҡлы аҡыл эйәһе һәм нәшриәтсенең 150 йыллығына ҡарата" тигән Бөтә Рәсәй конференцияһы уҙғарылыуы ошоға дәлил. Конференцияла сығыш яһаған философия фәндәре докторы, профессор Тәүфиҡ Ибраһим Ризаитдин Фәхретдиндең Ислам тәғлимәте үҫешенә айырыуса ҙур өлөш индереүе тураһында белдерҙе. Уның әйтеүенсә, Р. Фәхретдинов киләсәктә лә бар Ислам донъяһының дин белгестәренән алдымыраҡ булған аҡыл эйәләренең береһе булып ҡаласаҡ. Профессор Тәүфиҡ Ибраһим билдәләүенсә, Ризаитдин Фәхретдиндең рухи мираҫында һаҡланған иң мөһим фекерҙәрҙең береһе - кемдер хәҡиҡәтте тик үҙ яғында ғына күрә икән, төрлө диндәр араһында һыйышып йәшәү мөмкин булмаясаҡ. Был һүҙҙәр ысынлап та бик дөрөҫ һәм ғәҙел әйтелгән. Ризаитдин Фәхретдин үҙенең "Ислам" әҫәрендә былай тип яҙа: "Диндар кешенең фекерләү даирәһе һуҡырҙарса түгел, аңлы рәүештә киңәйә, уның йәне һәм йөрәге башҡа диндәргә ышаныусыларҙан ситләшеүгә алып барыусы тупаҫ наҙанлыҡ фанатизмынан азат була. Уның йәне камиллаша һәм әхлағы күтәрелә. Ғәҙеллек һәм барыһына ла тигеҙ ҡараш ошо диндең нигеҙе булып тора".

**Дөйөм алғанда, хәҙерге заман күҙлегенән Ризаитдин Фәхретдиндең дини эшмәкәрлеген нисек баһалап була?**

- Ғалим-мәғрифәтсенең дини ҡараштары бөгөн дә көнүҙәклеген юғалтмаған. Уның бөтә ижади ғүмере асылда толерантлыҡ һәм диндәргә тигеҙ ҡараш һабағы булып ҡабул ителә. Күп яҡлы ғалим - теолог, философ һәм тарихсы булараҡ, шулай уҡ яҙыусы, журналист һәм "Шура" журналы мөхәррире сифатында ул дини белем таратыуҙан башҡа фән ҡаҙаныштарын пропагандалай, донъя фәненә үҙ асыштары менән ҙур өлөш индергән бөйөк Ислам ғалимдары тураһында китаптар нәшер итә. Киң ҡарашлы булыуы һәм юғары мәҙәни кимәле уға мосолман донъяһының төрлө идея йүнәлештәрен үҙ итеүсе заттары менән бәйләнеш тоторға ярҙам итә. Ул Рәсәй мосолман реформаторҙары - "йәҙитселек" яҡлылар позицияһын ҡабул итә алып, Исламды заманға ярашлы модернизациялау, мосолман йәмғиәтенә үҙгәрештәр индереү, донъяуи белем биреүҙе, фәнде һәм милли сәнәғәтте үҫтереү идеяларын хуплай.

Ризаитдин Фәхретдиндең күренекле дин эшмәкәре, ул замандағы мосолман донъяһында алдынғы Ислам уҡыу йорто булараҡ танылған Троицк ҡалаһындағы "Рәсүлиә" мәҙрәсәһен нигеҙләүсе башҡорт суфый шәйехе Зәйнулла Рәсүлевтың тоғро уҡыусыһы булыуын оноторға ярамай. Уның энциклопедик эшмәкәрлегенең ошо яҡтарына ғалимдар - филология фәндәре докторҙары Ғ. Хөсәйеновтың, И. Ғәләүетдиновтың, Ғ. Ҡунафиндың, М. Нәҙерғоловтың, тарих фәндәре докторы Л. Ямаеваның хеҙмәттәрендә һәм мәҡәләләрендә юғары баһа бирелде.

**Дини мәҙәниәт өлкәһендә иң күренекле шәхестәрҙән булған Р. Фәхретдиндең ҡараштарында Башҡортостанда киң таралыу тапҡан суфыйсылыҡ йоғонтоһон күрергә буламы?**

- Ҡыҙғанысҡа күрә, бөгөнгө йәмәғәтселек фекерендә, Ризаитдин Фәхретдингә күп быуатлы бай рухи һәм мистик традиция сифатындағы суфыйсылыҡ ят булған, тигән бер яҡлы һәм дөрөҫ булмаған ҡараш йәшәй. Сәбәбе - уның Исламда рационалистик йүнәлеш яҡлы рухани сифатында танылыу табыуында. Суфыйсылыҡ күп быуаттар дауамында Волга буйында һәм Уралда ғына түгел, ә мосолман Көнсығышының күп төбәктәрендә Исламдың (бигерәк тә "халыҡ" Исламының) берҙән-бер тип әйтерлек йәшәү формаһы булған. Ошоно иҫәпкә алһаҡ, Ризаитдин Фәхретдиндең дөйөм ҡабул ителгән дини традицияға ҡарата кире ҡарашта булыуы тураһында фекер тыуырға мөмкин. Әлбиттә, былай тип фараз йөрөтөү бөтөнләйгә дөрөҫ түгел, был уның хеҙмәттәрендә яҙылғанға ҡаршы килә: мәҫәлән, ул әл Ғазали һәм Ибн Араби кеүек иң күренекле Ислам мистик аҡыл эйәләренең ижадын яҡтыртыуға ҙур урын бирә. Ризаитдин Фәхретдиндең башҡорт суфый шәйехе Зәйнулла Рәсүлевты ныҡ хөрмәт итеүе, уның үлеме айҡанлы 1917 йылда нәшер ителгән некрологтар йыйынтығында мәрхүм шәйехте "халҡыбыҙҙың бөйөк тарихи шәхесе", тип атауы билдәле. Ошо һәм башҡа ошондай факттарҙы белмәү йәки иҫәпкә алырға теләмәү Ризаитдин Фәхретдиндең донъяға ҡарашын һәм фекер позицияларын, суфыйсылыҡҡа ҡарата мөнәсәбәтен дөрөҫ аңламауға килтерә. "Ислам йөрәге" сифатында донъя мәҙәниәтен юғары философик фекер үрнәктәре һәм Руми, Аттар ижады аша мистик поэзияның үлемһеҙ шедеврҙары менән байытҡан дини традицияны ошондай киң белемле һәм юғары мәҙәниәтле заттың ҡабул итмәүе мөмкин түгел.

**Ни өсөн ошо күренекле башҡорт руханийының ижади мираҫын суфыйсылыҡ традицияларынан айырып ҡарау киң таралып китә?**

- Ризаитдин Фәхретдиндең ҡараштарын халыҡтың күп быуатлыҡ дини мираҫына ҡаршы ҡуйыуҙың ике төп сәбәбе бар. Шуларҙың береһе - хәҙерге Рәсәй мосолмандары общинаһында Ислам үҫеше перспективалары буйынса бәхәстәр булыуы. Ҡайһы берәүҙәрҙә Ризаитдин Фәхретдиндең мәғәнәүи ерлегенән йолҡоп алынған фекерҙәрен "оппоненттар"ы менән бәхәстә ҡулланыу маҡсатында уның рухи мираҫын "хосусилаштырыу" теләге уяна. Икенсе бер мөһим сәбәп - СССР-ҙа рәсми марксистик идеология хакимлыҡ иткән шарттарҙа ватаныбыҙҙың Ислам белгестәре тиҫтәләрсә йылдар буйы мосолман Көнсығышының да, СССР-ҙың мосолман республикаларының да дини-философик мираҫы проблемаларын объектив өйрәнә алманы. Улар башлыса Ислам донъяһында рационалистик, атеистик һәи дингә ҡаршы ҡараштар барлыҡҡа килеүе менән генә ҡыҙыҡһына ине. Шуның арҡаһында Исламдың ҡайһы бер йүнәлештәрен яһалма рәүештә прогрессив, башҡаларын аң, уның мөмкинлектәре һәм сиктәре тураһында әйтелгән фекерҙәргә ҡарап ҡына реакцион тип нарыҡлау ғәҙәткә инеп китте. Бына ошо абстракт һәм схематик ҡарашҡа нигеҙләнеп, Исламдың төп дини-фәлсәфәүи йүнәлештәренең береһе булған суфыйсылыҡты консерватив күренеш сифатында, аңдың, ирекле фекерләүҙең



***Ҡыҙғанысҡа күрә, бөгөнгө йәмәғәтселек фекерендә, Ризаитдин Фәхретдингә күп быуатлы бай рухи һәм мистик традиция сифатындағы суфыйсылыҡ ят булған, тигән бер яҡлы һәм дөрөҫ булмаған ҡараш йәшәй. Әлбиттә, былай тип фараз йөрөтөү бөтөнләйгә дөрөҫ түгел, был уның хеҙмәттәрендә яҙылғанға ҡаршы килә: мәҫәлән, ул әл Ғазали һәм Ибн Араби кеүек иң күренекле Ислам мистик аҡыл эйәләренең ижадын яҡтыртыуға ҙур урын бирә. Ризаитдин Фәхретдиндең башҡорт суфый шәйехе Зәйнулла Рәсүлевты ныҡ хөрмәт итеүе, уның үлеме айҡанлы 1917 йылда нәшер ителгән некрологтар йыйынтығында мәрхүм шәйехте "халҡыбыҙҙың бөйөк тарихи шәхесе", тип атауы билдәле. Ошо һәм башҡа ошондай факттарҙы белмәү йәки иҫәпкә алырға теләмәү Ризаитдин Фәхретдиндең донъяға ҡарашын һәм фекер позицияларын, суфыйсылыҡҡа ҡарата мөнәсәбәтен дөрөҫ аңламауға килтерә.***

# ДОҒА ҠЫЛЫУ ЫСУЛЫ...

**була алмай**

> ***Ризаитдин Фәхретдинде суфыйсылыҡ традицияһынан ситләштереп ҡарарға тырышыу бар. Әгәр ҙә ошоноң артында диндәштәр араһында низағ тыуҙырыу тора икән, был тырышлыҡ бушҡа ғына буласаҡ. Беренсенән, шәйех Зәйнулла Рәсүлев һәм Ризаитдин Фәхретдин кеүек ике оло шәхесте бер бөйөк рухи традиция берләштерә, һәм улар, Исламда аң менән иман бер бөтөн булған кеүек, бер-береһен тулыландырып тора. Икенсенән, башҡорттарға дини фанатизм бөтөнләйгә ят күренеш. Тарихта башҡорттар күп нәмә өсөн яу асҡан (ирек, ер, боронғо азатлыҡ хоҡуҡтары өсөн), әммә бер ҡасан да һаҡалдарының оҙонлоғо йә иһә доға ҡылыу ысулы уларға бер-береһенең боғаҙын йыртыу өсөн сәбәп була алмаған.***

һәм прогрестың антиподы итеп ҡарай башланылар. Был суфыйҙарҙың аңдың сикләнгән булыуынан сығып, уны интуитив танып белеү менән тулыландырырға тырышыуы арҡаһында шулай килеп сыға. Ә Ризаитдин Фәхретдин аңға һәм фәнни белемгә дан йырлаған, уны-быны аңғармаған кешеләр ошо ғалимдың суфыйсылыҡҡа кире ҡараштa булыуы тураһында фекер тыуыуы мөмкин. Әммә бындай һығымта һис дөрөҫ түгел.

Ризаитдин Фәхретдин аңдың дини белем өсөн төп ҡорал булыуын раҫлап, аңдың (фәндең) һәм диндең (шәриғәттең) тура килешлеге хаҡында асыҡтан-асыҡ белдерә: "Ислам үҙенең бөтә өгөт-нәсихәтен аңға нигеҙләй, кеше аңын дәлиллекә алырға саҡырып һәм бар нәмәне аҡыл бизмәнендә үлсәп һөйләргә тәҡдим итеп, фекерләп йәшәргә өндәй, ырым-хөрәфәттәрҙән һаҡлай. Һис шикһеҙ, бындай динде аңға һалынған дин тип әйтмәйенсә булмай". Шул уҡ ваҡытта ул мистиктарҙы, йәғни суфыйҙарҙы ла бөйөк Ислам яҙыусылары, шағирҙары, ғалимдары һәм философтары рәтенә индергән. "Исламдың төү нигеҙе булып Аллаһты танып белеү һәм Уға ышаныу тора", һәм дә "кешенең Ер йөҙөндә бар булыуының маҡсаты камиллыҡҡа өлгәшеү булып, ошоға һәм шуның менән бергә бәхеткә өлгәшеү Аллаһы Тәғәләне белеүгә тиң", тип яҙа ул. Ә кешене әхлаҡи таҙарыныу һәм үҙ-үҙендә камиллаштырыу аша Аллаһты белә алыуға (мәғрифәт) илтеүсе мистик юл (тәриҡәт) тураһындағы тәғлимәт суфыйсылыҡҡа хас төп теоретик ҡараш булып тора бит.

**Суфыйсылыҡ традицияһындағы ошо күҙгә салынып торған ҡапма-ҡаршылыҡты нисек аңлатып була һуң?**

- Профессор М. Т. Степанянцтың бик ғәҙел әйтеүенсә, суфыйҙар тарафынан аңдың тәнҡитләнеүен уларҙың рациональ белемде ҡабул итмәүе рәүешендә ҡарау дөрөҫләккә тап килмәй. Быны уларҙың дини тәғлимәттең тик аң аша билеләүе менән ризалашмауы, тип баһалау дөрөҫөрәк. Суфыйҙар рациональ танып белеүгә һүлпән ҡараштa булһа ла, уның аң һәм әхлаҡ өлкәһендә нигеҙле ҡулланылыуын инҡар итмәй. Рәсәй философы, ғәрәп белгесе академик А.В. Смирнов күрһәткәнсә суфый аҡыл эйәләренең танып белеүҙең рациональ алымдарын киң ҡулланып, уның сикләнгәнлеген тәнҡитләгән хәлдә лә, үҙ өлкәләрендә файҙаланыуҙың хаҡлығын инҡар итмәүенә иғтибар итә.

Тимәк, Ризаитдин Фәхретдинде суфыйсылыҡҡа ҡаршы ҡуйып булмаған кеүек, суфыйсылыҡты Исламға яһалма рәүештә ҡаршы ҡуйыу өсөн бер ниндәй ерлек тә юҡ. Исламда сиркәү кеүек ойошма юҡ, шуның өсөн суфыйсылыҡты Ислам "ересы", йә иһә Исламға ят күренеш, тип раҫлау төптә дөрөҫ түгел. Ә суфыйсылыҡты Исламға хас булмаған күренеш сифатында ҡарау хатта дипломлы белгес булған кешеләрҙең аңына ла һеңгән. Мәҫәлән, Башҡорт дәүләт университеты уҡытыусыларының береһе миңә Әхмәтзәки Вәлидиҙең мосолман түгел, ә суфый булыуы тураһында белдергәйне. Был Рим Папаһын христиан түгел, ә католик, тип әйтеүгә тиң.

Беҙҙең ҡарашҡа, дөрөҫлөк XIX быуат аҙағында - XX быуат башындағы мосолман реформаторлығының Ризаитдин Фәхретдин ҡабул иткән "юғары", классик Исламға нығыраҡ хас булыуын раҫлаусы тикшеренеүселәр яғында. Батша Рәсәйенең күпселек мосолмандары өсөн суфыйсылыҡ тарафынан ғәмәлгә ашырылған "халыҡ Исламы" яҡыныраҡ булған. Суфыйсылыҡ үҙе лә бер төрлө күренеш булмаған: уны "юғары" тип нарыҡланған "либераль-мәғрифәти" һәм "аҫҡы", йәки "крәстиән-плебей" өлөштәренә бүлеп ҡарарға була. Шәйех Зәйнулла Рәсүлев кеүек шәхестәре менән билдәле "юғары" суфыйсылыҡ революцияға тиклемге Рәсәй, бигерәк тә Волга буйы һәм Урал мосолмандары тормошон (мәғариф, сәйәсәт һәм иҡтисад өлкәләрендә) яңыртыу өсөн күп нәмә эшләй. "Юғары" суфыйсылыҡ һәм бер үк ваҡытта "юғары" классик Ислам вәкилдәре үҙҙәренең иманлы ғәмәлдәре менән Ислам диненең күпселек тарафынан билдәле бер ҡағиҙәләр рәүешендә генә ҡабул ителмәйенсә, уларҙың тәрән һәм эскерһеҙ инаныуына әйләнеүенә булышлыҡ итә, мосолмандарҙың дөйөм аңына яңы прогрессив идеяларҙың яраҡлашыуын тәьмин итә.

**Ризаитдин Фәхретдиндең шәйех Зәйнулла Рәсүлевты Рәсәй мосолмандарының рухи лидерҙары рәтенә ҡуйыуы суфыйсылыҡтың юғары баһаланыуын раҫлаусы дәлил итеп ҡарарға булалыр?**

- Үрҙә әйтелгәндәр Ризаитдин Фәхретдиндең һәм уның фекерҙәштәренең суфый шәйехе Зәйнулла Рәсүлевҡа ҡарата тәрән хөрмәтле булып, 1917 йылда уның үлеме айҡанлы "Шәйех Зәйнулла ишан хәҙрәтләң тәржемәи хәле" тигән некрологтар йыйынтығын нәшер итеүенең сәбәбен аңлатып тора. Йыйынтыҡты төҙөүсе - Ризаитдин Фәхретдин үҙе. Был йыйынтыҡта шәйех Зәйнулла Рәсүлев "үҙ халҡының рухи короле" тип атала, һәм башлыса уның йоғонтоһо һөҙөмтәһендә шул осорҙағы Урал һәм Волга буйы мосолмандарының мәҙәни һәм ижтимағи тормошона күп яңылыҡтар индерелә алыуы раҫлана. Йыйынтыҡ авторҙары яҙыуынса, Зәйнулла Рәсүлевтың ҡаҡшамаҫ абруйы мосолман общинаһын яңыртыу һәм реформалау яҡлы булған "йәҙитселәр"ҙең мосолман традиционалистары "ҡәҙимселәр"гә ҡаршы көрәшенең уңышлы булыуына булышлыҡ итә, ә "йәҙитселек" идеологияны рупоры булған "Тәрджемән" журналы мөхәррире Исмәғил Гаспринскийға Зәйнулла Рәсүлевтың абруйы уны һаҡлаусы ҡалҡан кеүек була. Шәйех Зәйнулла Рәсүлев "йәҙитселәр"ҙе яҡлашҡан өсөн консерватив мосолман руханиҙарының баҫма органы "Дин вә мәғишәт" тарафынан тәнҡиткә дусар ителә.

Иҫкә алынған йыйынтыҡта яңы күренештәрҙең файҙалы һәм зыянлы яҡтарын тиҙ арала аңлай алыусы шәйех Зәйнулла Рәсүлевтың иҫ китмәле аҡыл үткерлеге билдәләп үтелә. Ул, дини фанатизмды ят күреп, алдынғы ҡарашлы кешеләрҙе юҡ ҡына сәбәп буйынса диндән яҙыуҙа һәм әхлаҡи боҙоҡлоҡта ғәйепләүсе наҙан муллаларға ҡәтғи рәүештә ҡаршы сыға.

Бында тура әйтелгән ошондай һүҙҙәр бар: "Уның (йәғни шәйех Зәйнулла Рәсүлевтың) суфыйлығы һуҡырҙарса оҡшарға тырышыу булманы. Уның суфыйлығы ысынбарлыҡҡа яҡын ине". Йыйынтыҡ авторҙары Зәйнулла Рәсүлевтың фатализмға, йәғни күренеш-ваҡиғаларҙың тәбиғи сәбәптәрен инҡар итеп, тулыһынса Аллаға ғына өмөтләнеүгә ҡаршы сығыуын билдәләй. Ул теге донъяны (әхирәтте) ғына ҡайғыртып, фани донъя мәнфәғәттәренән тулыһынса ваз кисергә саҡырыусы ишандарҙың ҡараштарын уртаҡлашмай. Ул йыш ҡына суфый йыйылыштарына зекер әйтергә барыусы шәкерттәргә: "Һеҙҙең зекерегеҙ - һеҙҙең һабаҡтарығыҙ", - тип, кире бороп булған.

Шулай итеп, Ризаитдин Фәхретдин суфыйсылыҡҡа ҡаршы булмаған, киреһенсә, ул суфыйҙарҙың арҙаҡлы шәйех Зәйнулла Рәсүлев кеүек башҡалар өсөн юғары өлгө булғандарын хөрмәт иткән. Башҡаса булыуы ла мөмкин түгел. Ризаитдин Фәхретдин Исламдың айырылғыһыҙ өлөшө булған суфыйсылыҡтың быуат төпкөлдәрендә тамырланған бай рухи мәҙәниәт икәнен бик яҡшы аңлаған. Уның үҙ эшмәкәрлегендә суфыйсылыҡты иҫәпкә алмауы мөмкин булмаған хәл.

**Ике бөйөк шәхесебеҙҙең рухи яҡынлығы һәм фекерҙәшлеге, уларҙың дини-философик һәм ижтимағи-мәҙәни мираҫы замандаштарыбыҙ өсөн рухи һабаҡ ролен үтәй аламы?**

- Ижтимағи күренеш булараҡ, мәҙәниәт кешенән дә (ваҡыты һәм масштабы буйынса), тотош быуындарҙан да киңерәк. Кеше һәм уның быуыны мәҙәни мөхит эсендә йәшәй, һәм уны мәҙәниәткә ҡаршы ҡуйырға маташыу һөҙөмтәһеҙ буласаҡ. Беҙҙең йәмғиәттә Ризаитдин Фәхретдинде суфыйсылыҡ традицияһынан ситләштереп ҡарарға тырышыу теләге тураһында ла ошоно уҡ әйтергә була. Әгәр ҙә ошоноң артында диндәштәр араһында низағ тыуҙырыу тора икән, был тырышлыҡ бушҡа ғына буласаҡ. Беренсенән, шәйех Зәйнулла Рәсүлев һәм Ризаитдин Фәхретдин кеүек ике оло шәхесте бер бөйөк рухи традиция берләштерә, һәм улар, Исламда аң менән иман бер бөтөн булған кеүек, бер-береһен тулыландырып тора. Икенсенән, башҡорттарға дини фанатизм бөтөнләйгә ят күренеш. Тарихта башҡорттар күп нәмә өсөн яу асҡан (ирек, ер, боронғо азатлыҡ хоҡуҡтары өсөн), әммә бер ҡасан да һаҡалдарының оҙонлоғо йә иһә доға ҡылыу ысулы уларға бер-береһенең боғаҙын йыртыу өсөн сәбәп була алмаған.

Бөгөн теләһә ниндәй ваҡ-ҡына мәсьәләләр буйынса ла ыҙғыш ҡуптарырға әҙер тороусылары арҡаһында диндәштәребеҙ ошоно аңлап етмәй. Хәлдәрҙең шулай мөшкөл булыуының сәбәптәре күп, әммә уларҙың иң беренсеһе - 70 йыл буйына көслөк менән һеңдерелгән атеизм арҡаһында мосолмандарҙың дини белемдәре менән бергә хоҡуҡи мәҙәнилегенән яҙыуы. Хәҙерге мосолмандарҙың башлыса дини белемһеҙ булыуы теләһә ниндәй шарлатандарға, авантюристарға, эшлекһеҙ һәм аҡса яратыусы заттарға үҙҙәрен уларҙың етәкселәре һәм өйрәтеүселәре сифатында күрһәтергә мөмкинлек бирә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был суфыйсылыҡҡа ла, дөрөҫөрәге, уның примитив өлөшөнә ҡағыла. Совет власы йылдарында урындарҙағы суфый шәйехтәре репрессияланды, рухи күсәгилешлелек линияһы (силсилә) өҙөлөп ҡалды. Йыш ҡына ошо шарттар менән сит-ят ерҙәрҙән, мәҫәлән Урта Азиянан килгән, үҙҙәрен "хәлфә", суфый шәйехтәренең вәкилдәре итеп белдергән ялған "остаздар" оҫта файҙалана. Уларҙың ҡайһы берҙәре үҙен хатта шәйех Бах әд Дин ән Нәкшбәндтең вариҫы итеп танытыуҙан да тартынмай. Ә был гастролерҙар ғәрәп телен дә йүнләп белмәй, шулай булғас, уларҙың Исламдың төп дини дисциплиналары буйынса белемдәре лә юҡ. Быны ғәмәлдә рухи традицияның коммерциялаштырылып, "бәрәкәт" менән һатыу итеүгә тиңләнеүе итеп баһаларға кәрәк.

Быларҙың барыһын да хәҙерге Рәсәй мосолман общинаһының "үҫеш сире" рәүешендә ҡарау фарыҙ. Ошо ауырлыҡтарҙы үтеп сығыу өсөн мосолман мәғрифәтен үҫтереү зарур. Беҙҙең ике бөйөк милләттәшебеҙ - шәйех Зәйнулла Рәсүлев һәм ғалим-мәғрифәтсе Ризаитдин Фәхретдиндең ошо изге юлда күрһәткән хеҙмәттәре замандаштарыбыҙҙың оло баһаһына лайыҡ.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ**
**әҙерләне.**

ХӘТЕРКИТАП

# БЕР НИСӘ ҒАИЛӘЛӘ...

## ҡыямат атай-әсәй булды атай-әсәйебеҙ

**Атайыбыҙ, XX быуатта арҙаҡлы сәсәндәрҙең традицияларын дауам итеүсе шәхес Кәрим Мөхәмәҙиә улы Дияров ҡурайсы, йырсы, бейеүсе, көрәшсе лә, ил уҙаманы ла ине. Баймаҡ районы Икенсе Этҡол һәм Ниғәмәт ауылында дүрт тиҫтә йылдан ашыу балаларға белем бирҙе. Ошо осорҙа уҡыусыларында ҡурайға һөйөү тәрбиәләүгә күп көс һала, ҡурай сәнғәтен пропагандалауға ла етди иғтибар бирә.**



Ҡурайҙа бала сағынан уйнап, 17-18 йәшенә еткәндә яҡшы ҡурайсы булып танылған ул. Йәштән ҡурайҙы үҙ итеүе, халыҡ ижадына мөкиббән китеүе тиккә түгелдер. Тыуған яҡтары - борон-борондан ҡурайсылар, йырсылар, сәсәндәр төйәге: замандаштары Бирғәле сәсән Ибраһимов, Ғәбит сәсән Арғынбаев һәм уның туғаны Әбәйт ҡурайсы, Хәмит сәсән Әлмөхәмәтов, Сөнәғәт Байбулов, Хисбулла Мөхәмәтҡолов, ағалы-ҡустылы Хәмитовтар уға дәрт-дарман биреп тороусы булғандыр. Сәсән булараҡ, атайым ҡурайҙа уйнар, йә йырлар алдынан иң алда күтәренке рух менән уның риүәйәт, легендаһын һөйләр һәм шул ваҡиғалар эсендә үҙе лә йәшәгән һымаҡ, образға инеп китер ине. Һөйләй барып, кәрәкле урында ҡурайын алып уйнап, йә йырлап күрһәтер, хатта төшөп бейеп тә китер ине. Был йәһәттән ул үҙенән алда килгән арҙаҡлы, мәшһүр Ишмөхәмәт сәсән Мырҙаҡаев һәм уның шәкерте Ғәбит сәсән Арғынбаев һымаҡ ҡурайсы ла, йырсы ла, тапҡыр һүҙ оҫтаһы ла, көйҙәрҙең тарих-легендаларын һәм кем-кемдән тапшырыла килгәнен белеүсе лә, үҙенән алда килгән оҫталарҙың мәшһүр таланттарын өйрәнеп, киләһе быуын ҡурайсыларына еткереүсе лә, халыҡ хазинаһын үҙенә генә хас импровизацияла һәм дә үҙенсә генә башҡарыуы менән халыҡҡа ҡайтарыусы ла. Ә ҡурайҙа көйҙәрҙе дөрөҫ уйнауҙы Ғәлимйән һәм Хәмит Әхмәтовтар, Сөнәғәт Байбулатов, Солтан Ибраһимов ағайҙарҙан өйрәнә.

Атайым 1920 йылдарҙан бирле халыҡ көйөн йыя башлаған. Өйрәнгән бер көйөн ҡағыҙға ла яҙа барып, йырҙарын, тарихын яҡшылап өйрәнеп бөткәс, халыҡҡа ишеттерә барған. Көйҙө ҡапыл ғына отоп алып булмай. Байҙарҙа һарыҡ көткән мәлендә мәжлес барған тирмәне тишеп, ҡурайсыны күҙәтер булған атайым. Ҡурайҙа уйнаған ҡурайсының бармаҡ менән баҫыуына, ауыҙына ҡарап, көйҙәрҙе отоп алыр булған. Һуңғы йылдарҙа әсәйем Фәрзәнә менән икәүләп эшләнеләр. Атайым әйтеп тора, ул яҙа, йәки ул ҡурайҙа уйнай, әсәйем йырлай. Әсәйем бушамаған ваҡытта Гөлнира апайым һәм мин дә хәтһеҙ көй тарихтарының һүҙҙәрен яҙырға ярҙам иттек. Магнитофондар сығарыла башлағас, көйҙәрҙе магнитофон таҫмаһына оҙаҡ йылдар һаҡланырлыҡ итеп яҙып ҡалдырайыҡ, тип уйлаштылар. Киләһе быуын өйрәнер тип, магнитофон һатып алдылар. Бөтәһе 300-гә яҡын көй яҙҙыҡ. 120-һен Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына тапшырҙыҡ. Мәскәүҙән ике мәртәбә килеп башҡорт көйҙәрен яҙҙырып алдылар. Унда 100-ән ашыу көй яҙылды.

Боронғо көйҙәрҙең береһе "Баяс" тураһында айырым әйткем килә. Халыҡ араһында бик маҡтаулы көй ул, "Баяс" йырын йырлай белгән кеше иң яҡшы йырсы, "Баяс" көйөн уйнай белгән кеше яҡшы ҡурайсы, тигәндәр. **Сөнки уның нотаға һалып булмаған бөгөлөштәре күп. Бындай бөгөлөштәр Рамазан Йәнбәковта, тағы ҡайһы бер йырсыларҙа ғына бар. Улар - моңло бөгөлөштәр. Йыш ҡына атайым уйнаған көйҙәрҙә ҡайтарып һуғыу алымын ишетә инем. Ул шулай тип аңлатты: бер көйҙө уйнағанда аҙаҡҡы өлөшөн ҡайтарып уйнап ҡуяһың, аҙаҡҡы 4-се өлөшөн уйнағанда ҡабатлап уйнап ҡуяһың. Шуны ҡайһы берәүҙәр бөкләп һалыу, ҡайһы берәүҙәр ҡайтарып һуғыу тип әйтәләр. Көйҙөң ошондай мәлдәре тыңлаусының үҙәген өҙҙөрә лә инде ҡурайсы уйнағанда. Ә тағы ла күкрәккә һалып, ҡуңғырлатып уйнау бар, йәғни, ҡурай буйлап шундай моң бирәһең, ҡумыҙҙа уйнаумы, скрипканың иң ҡалын тауышымы - бына шул инде ҡуңғырлатып уйнау була. Тағы ла өҙләү бар - көслө ҡурайсыбыҙ Ишмулла Дилмөхәмәтов таҙа көмөш тауыш сығарып өҙләр ине. Ул "Урал" көйөн уйнағанда аҙаҡтан өҙләп бөтөрөп ҡуя.** Атайым да өҙләй торғайны. Әммә бөтөн көйҙө лә өҙләп булмай, тип әйтә торғайны.

Атайыбыҙ йәш сағында данлы көрәшсе лә булған. Һабантуйҙарҙа һәр саҡ баш судья итеп ҡуйырҙар ине. Һунарға йөрөүгә лә бик әүәҫ булды. Ул алып ҡайтҡан ҡыр өйрәге, ағуна, ҡор һәм һуйырҙарҙы әсәй таҙартып өлгөрә алмай торғайны. Икеһе лә уҡытыусы булараҡ, беҙҙе илһөйәр, ысын патриот итеп тәрбиәләнеләр. Әсәйебеҙ Темәс педучилищеһын тамамлап, башланғыс кластарҙы уҡытты. Атайыбыҙ физика-математика, астрономиянан белем бирҙе. Ғаиләлә 4 ҡыҙ, 4 малай үҫтек. Өйҙә ҡурай, баян, мандолина, ҡумыҙ моңдары өҙөлмәне. Һәммәбеҙ үҙ тырышлығыбыҙ менән уларҙа уйнарға өйрәндек. Атайыбыҙ беҙҙе бейергә лә өйрәтте. Ҡунаҡ килһә, беҙ уларға концерт ҡуйып мәж килдек.

**Малайҙарына бесән-утын әҙерләү, уҡ-ян эшләү, балта эштәрен өйрәтеүҙән тыш, техника менән дә таныштырҙы. Күбеһенсә, был уйын рәүешендә башҡарыла ине. Мәҫәлән, атайҙың һуғыштан алып ҡайтҡан трофей немец телефон аппараттары бар ине (ул Бөйөк Ватан һуғышында элемтәсе була). Бер телефонды - мунсаға, икенсеһен - һарай башына, өсөнсөһөн - баҡса мөйөшөнә, тағы берәүһен өйгә урынлаштырҙы. Һәр бер нөктә штаб тип аталды. Баш командующий-атай өйҙәге телефонда. Был уйындар йәй үтер ине. Иртәнге сәйҙән һуң атайым һәр беребеҙгә эш бирер ине: Альмира менән Ленера апайымдар әсәйемә ярҙам итә, Ленц менән Динар ағайымдар утын быса, Урал менән Батыр ағайымдар яра, ә мин Гөлнира апайым менән утын өйәбеҙ. Утын өйөүҙең дә рәтен белергә кәрәк. Ситтәре ауып төшмәһен өсөн сатрашлап өйҙөрә лә, иң өҫтөнә туҙын өҫкә ҡаратып эрерәк ярылған утынды һалдыра. Был утынды ямғыр, еүеш ҡарҙан һаҡлай.** Төш мәле етһә, әсәйем бәйләнеш аша беҙҙе ашарға саҡыра. Урындыҡҡа һәр беребеҙ үҙ урынына теҙелешеп ултырабыҙ. Ашау яҡшы, мул. Сөнки атайым хужалығында бейә аҫырала ине. Ә әсәйем баҡса үҫтереүгә оҫта булды. Баҡсала помидор, кишер, ҡыяр, сөгөлдөр, һарымһаҡ менән бер рәттән тиҫтәнән ашыу алма, сейә, слива, крыжовник, ҡарағат, балан, муйыл үҫеп, емерелеп уңа ине. Күп емеш ағасын атайым Ленинград, Ижевск ҡалаларынан яҙҙырып алды, гастролдәрҙән алып ҡайта ине. Төшкө аштан һуң малайҙар һыу инергә, ҡыҙҙар эргәләге урманға eләк байҡарға сығып китәбеҙ. Ҡайтыуыбыҙға өйҙә йыш ҡына ҡунаҡтар була торғайны. Уларҙың үҙ әңгәмәһе, көй-тарих өйрәнәләр, атай бөтөнләй бушамай. Динар ағайым атай роленә күсә. Ә беҙ атай-әсәй күрмәгәндә сюрприз әҙерләйбеҙ тип тышта һыпырып эш эшләйбеҙ. Урамда ҡоҙоҡ булһа ла, баҡсаға ҡойор өсөн ат менән Таулы йылғаһынан тимер мискә менән һыу алып киләбеҙ. Ҡыҙҙар баҡса менән булышҡанда, малайҙар утын эшен бөтөрөп, ишек алдын һепереп, мунса яғалар. Динар ағайым эшебеҙҙе күҙәтеп ултырып, телефон аша күрһәтмәләр бирә, беҙ шылтыратып уға рапорт бирәбеҙ. Ошоноһо иң ҡыҙығы була торғайны. Ни тиклем эш эшләнә ине! **Тағы бер матур хәтирә күңелдә ҡалған. Беҙ бала саҡта мотлаҡ башҡорт радиоһын тыңлай инек. Тапшырыуҙар бары 25 минут ҡына бара. Атайым күп уйлап тормай, ауыл эсендә үҙ радиоһын асып ебәрҙе. Ул ҡурайҙа уйнай, әсәйем йырлай торғайны. Халыҡҡа был тапшырыуҙар бик оҡшай ине.**

Атайым күп һөнәргә эйә булды. Хужалыҡ ҙур булғанлыҡтан, малды үҙе ҡараны, дауаланы. Тегеү оҫталығына хайран ҡалырлыҡ ине. Атайыбыҙ беҙгә йәйге, ҡышҡы кейемде текте. Быйма баҫып та бирҙе. Ә төшөргән һүрәттәре! Атайым бейеһә, беҙ тын да алмай ҡарай инек. Үҙе генә бейеп ҡалманы, беҙҙе лә өйрәтте. Ҡурай ҡырҡып алып ҡайтып, уны эшләргә өйрәтте.

Атайыбыҙ ниндәйҙер кимәлдә халыҡ судьяһы ла ине. Бар кеше уға кәңәшкә килер ине. Ғаилә татыулығы буйынса үҙе өлгөлө булғанлыҡтан, атайыбыҙ насарыраҡ йәшәгән ғаиләләрҙе клубҡа саҡырып, ҙур йыйылыштар үткәрә торғайны. Аҙағынан ыңғай тәьҫораттар биреү өсөн сығышын йыр-моң менән тамамлар ине. Бындай саранан ғаиләләр көс-дәрт алып, татыулашып ҡайтып китерҙәр ине. Бер нисә ғаиләлә атай менән әсәйҙе ҡыямат атай-әсәй, ағай-апай итеп алдылар.

Атай йәш саҡтан туғандарына ныҡ ярҙам итеп йәшәне. Әсәһе үлгәс, бер туғандары Яҡуп ағайҙы, Рауза апайҙы үҙенә алып ҡарап, аяҡҡа баҫырға ярҙам иткән. Ғилминиса апаһының ире мәрхүм булғас, уны ике балаһы менән Икенсе Этҡолға саҡырып алып, күршелә бәләкәй йорт һалып, шуларҙы ҡараған. Булат, Яҡуп ҡустылары һәр саҡ атайымдың терәк-таянысын тойоп йәшәне.

**Гөлгенә ҠУНАҠКИЛДИНА (ДИЯРОВА).**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ИҢ МАТУР МӘМЕРЙӘ



**Башҡортостандың Бөрйән районындағы Шүлгәнташ мәмерйәһе Рәсәй биләмәһендә ҙур танылыу алған һәм иң матур биш мәмерйә исемлегенә ингән.**

Шүлгәнташ мәмерйәһе донъяла палеолит осоро рәсемдәре менән танылыу яуланы. Ҡаяға төшөрөлгән һүрәттәрҙең йәше - яҡынса 14-14,5 мең йыл. Рейтингтағы ике мәмерйә - Сочиҙа. Ахштыр мәмерйәһе Адлерҙа һәм Сочиҙа иң төп мәмерйә һанала. Уға өлкән кеше лә, бала ла барып етә ала, мәмерйә Мзымта өҫтөндәге ҡаяла урынлашҡан. Мәмерйәнең үҙенә ҡая менән упҡын араһындағы тар һуҡмаҡтан барырға мөмкин. Воронцов мәмерйәләре системаһы - миллиондарса йыл элек тәбиғәт тыуҙырған ер аҫты мөғжизәһе ул. Мәмерйәләрҙең ҙурлығы һәм матурлығы Сочиға ял итергә килгән бик күп туристарҙы йәлеп итә. Мәмерйәләр Хостинский районында урынлашҡан, хәҙер уларға теләге булған һәр кем бара ала. Комплекстың исеме эргәләге Воронцовка ауылынан алынған. Хакасиялағы Кашкулакск мәмерйәһе (Ҡара Иблес мәмерйәһе) шамандарҙың культ урыны булараҡ сығыш яһаған, улар унда нәҫел-ырыуҙы дауам итеү һәм уңдырышлылыҡ символы булған сталагмитҡа табынған, шулай уҡ ҡорбан килтергән. Хәҙер мәмерйәгә экскурсия менән барырға мөмкин. Көнгөр мәмерйәһе Пермь крайында урынлашҡан. Уның өҫкө өлөшө боҙ ҡатламы, бәҫ менән ҡапланған. Ғалимдар баһалауынса, боҙ ҡатламдарының йәше - яҡынса 10 мең йыл.

# АЛЫҪТАҒЫ МИЛЛӘТТӘШТӘР

**Алыҫ Көнсығышта икенсе башҡорт ойошмаһы асылды. Хәҙер Сахалинда "Башҡорт ҡоролтайы (конгресы) милли-мәҙәни автономияһы" Сахалин төбәк йәмәғәт ойошмаһы эшләй.**

Ойоштороу йыйылышы 2017 йылдың сентябрендә үк уҙғайны. Быйыл апрелдә ойошма дәүләт теркәүе тураһында таныҡлыҡ алды. Офис Сахалин өлкәһенең Холмск ҡалаһында урынлашҡан. "Төп маҡсатыбыҙ - берләшеү һәм Сахалин өлкәһе башҡорттарының милли-мәҙәни талаптарын һәм хоҡуҡтарын тормошҡа ашырыу механизмдарын әҙерләүҙә ҡатнашыу, дәүләт

✓ *Башҡорт балалары бәләкәйҙән үк һәләттәрен асһын, үҙҙәрен ышаныслы тойһон, аудитория алдында сығыш яһауҙан ҡурҡмаһын, үҙҙәрен тота белһен, тибеҙ. Ә актер булам тигәне бар икән, уға ярҙам итәбеҙ.*



*ИЖАДХАНА*

# МИЛЛИ ТЕАТРҘЫ...

## тел генә йәшәтә



**Артист һөнәренә өйрәнеп булмай, тиҙәр. Дөрөҫ, һәләтеңде үҫтерергә, телмәреңде ҡуйырға өйрәнеп була, ә бына тамашасыны хайран итергә өйрәнеп булмай. Бының өсөн актерлыҡ һәләте менән тыуырға кәрәктер, моғайын. Шулай ҙа актерҙың уңышы һәләтле булыуындамы, әллә тырышлығындамы? Ниндәй ул бөгөнгө заман театры актеры? Ошо хаҡта Ш. Бабич исемендәге Дәүләт йәштәр премияһы лауреаты, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры Фәнис РӘХМӘТОВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

### Таусылар нәҫеленән

Үҙенең ер аҫты байлыҡтары менән дан алған Хәйбулланамын һәм беҙҙең нәҫелдә барыһы ла тиерлек таусы. Атайым да Бүребай тау-байыҡтырыу комбинатында эшләй, һеңлем дә Урал таусылар университетын тамамлап, таусы һөнәрен алды. Әле ул ғаиләһе менән Екатеринбург ҡалаһында йәшәй, ике бала тәрбиәләйҙәр. Әсәйем дә, атайым да сәнғәткә ғашиҡ булғанлыҡтанмы, минең бала саҡтан сәхнәнән төшмәүемә аңлап ҡаранылар. Атайым үҙе оҫта бейеүсе, әсәйем йырлай, үҙешмәкәр ансамблдәрҙә шөғөлләнеп, бер-береһен шунда тапҡан кешеләр. Ҡурай буйынса тәүге уҡытыусым Сәйфулла Дилмөхәмәтов. Ҡурайҙан тыш, гармунда уйнай инем, бейенем, йырланым. Салауат музыка колледжын тамамлаған йылда Щепкин исемендәге юғары театр училищеһының ҡабул итеү имтихандарына эләгеп, актер һөнәре буйынса белем алдым. Театр донъяһынан йыраҡ торған кеше инем, актер булырға ла уйламай инем. Яҙылмаған аҡ ҡағыҙ инем. Уҡытыусылар минең һөнәргә ошолай "боҙолмаған" көйөнә килеүемдең насар яғы булмауын, киреһенсә, баштан башлауҙың ыңғай күренеш булыуын аңлатты. Мәктәп йылдарынан таныш булғас, студент йылдарында ла унан төшмәгәс, сәхнәнән ҡурҡыу булманы.

### Ижад битарафтарҙы үҙһенмәй

Тормошта мин актер түгелмен. Тәүлектә 24 сәғәт икән, һин уның 3 сәғәтендә - спектакль барышында ғына актерһың. Актерлыҡ йәшәү рәүешенә, ҡылығына, ҡыланышына әйләнгәндәр ҙә була бит, юғиһә. Һәр кем үҙ юлын үҙе һайлай, үҙен ошо шарттарҙа яҡшы тоя икән, ни өсөн тормошта ла актер булмаҫҡа. Тик минең өсөн ят сифат был. Мин шәп актер, тигән уй ҙа, үҙем менән һоҡланыу ҙа юҡ миндә. Ә бына үҙемде тәнҡитләргә яратам. Ижадымды ғына түгел, тормошомдо ла баһалайым, "Их, ошолай эшләргә ине, былайтырға кәрәк ине", тигән иҫкәрмәләр яһайым. Үҙемде башҡалар менән түгел, үҙем менән генә сағыштырам. Шулай ҙа башҡаларҙың ыңғай яҡтарын үҙемдә лә тәрбиәләргә ынтылам. Һөнәрем эҙләнергә, уҡырға өйрәтте, кеше психологияһын өйрәнеү ҙә йәшәйеште, нисектер, еңеләйтерә. Уҡытыусыларыбыҙ беҙгә тағы ла мөһим бер сифат һала алған, тип уйлайым. Ижадҡа битараф булмағыҙ, һөнәрегеҙҙең иңегеҙгә һалған яуаплылығын тойоғоҙ, тиҙәр ине улар. Иң мөһиме, һөнәремде яратам. Ниндәй генә һөнәр һайлаһаң да, эшеңде ятаһаң, эшләүе лә күңелле. Актер өсөн был бигерәк тә кәрәк, эшләгән, эҙләнгән килеп кенә торһа, ролдәрең өсөн үҙеңә лә оят түгел, тамашасыны ла ыҙалатмайһың.

Театрҙа актер булып китеү, һөнәрҙең нескәлектәренә төшөнөү өсөн кәмендә ун йыл ваҡыт кәрәк, тиҙәр. Уҡып ҡайтыуыбыҙға ун беренсе йыл китте, һәр беребеҙ айырылып тора, һәр кем үҙ урынында, һәр кемдең образдары, эштәре күренә - тимәк, был бик дөрөҫ фекер. Ғөмүмән, Мәскәү мине ныҡ үҙгәртте. Беренсенән, уҡыу йорто, ундағы шәхестәр һабағы бығы булышлыҡ итһә, икенсенән, мәҙәни тормошҡа башкөлләй сумып, аҙнаһына икешәр спектаклгә йөрөү, музейҙарға барыу ҙа тәрбиәләне. Ҡыҙыуыраҡ инем, үҙ өҫтөмдә эшләү ошонон кеүек ҡайһы бер сифаттарҙан арынырға булышлыҡ итте. Башҡорт дәүләт академия драма театрына эшкә ҡайтҡас, бындағы шәхестәр беҙҙе тағы ла үҫтерҙе. Ғаилә ҡороп, атай булғас, тормошҡа ла икенсерәк ҡарайһың хәҙер.

### Һәр роль үҙе тәжрибә

Минең Гамлетты, Аттиланы йәки башҡа берәй образды уйнағым килә, тип уйлағаным да юҡ. Ниндәй роль бирһәләр ҙә минә ҡыҙыҡ. Тәүге тапҡыр башҡорт театры сәхнәһенә йәш Әхмәтзәки роле ("Әхмәтзәки Вәлиди Туған", Н. Асанбаев) менән сыҡтым. "Ҡоҙаса" музыкаль комедияһындағы Басир ролен дә яратып уйнайым. Малай ("Аҡ пароход", С. Айтматов) роле лә тәжрибә туплау йәһәтенән ҙур мәктәп булды. Шулай ҙа иң яратҡан, ауыр бирелгән роль - ул "Джут" (О. Жанайдаров) драмаһындағы Әхмәт. Актер булараҡ тамашасыға ла, режиссерға ла, хатта үҙемә лә ошонда асылғанмындыр, тип уйлайым. Төрлө фестивалдәрҙә булдыҡ уның менән, ул "Алтын битлек" премияһының "Битлек плюс" программаһына ла инде. Бында минә үҙемде енергә лә тура килде. Гәзит уҡыусылар спектаклде күргән булһа, беләләр: унда ғаилә башлығы ҡатынының ихтыярына буйһоноп йәшәгән ир, заманы ла, ҡатынының социаль статусы ла быға йоғонто яһай. Башҡорт ир-егетенә, хатта сәхнәлә булһа ла, үҙенең булмышын, ирлек намыҫын еңеп, ошоға күнеүе анһат түгел. Әммә актер образды тамашасыға еткерергә бурыслы, ул актерҙың төрлө була алыуын күрергә тейеш. Был спектаклдәге тарих мине эске тетрәнеү кисерергә мәжбүр итте, уның менән мин өлкәнәйҙем. Өләсәйемдең: "Балаларым, Аллаға шөкөр, бөтөн нәмә бар бөгөн, беҙ үләп ашап үҫтек", - тигәнен хәтерләнем, ошо михнәтте күрмәнем дә, аслыҡ тойоғоһо минә ят булһа ла, йәйләүҙәрҙә мал көтөп йәшәгән халҡыбыҙ ҙа ошондай бәлгәнләккә төшөрөлгән булған бит. Булғандың ҡәҙерен онотоп китәбеҙ, тамашасы ошо хаҡта уйланып сыҡһа ла, спектакль үҙ маҡсатына өлгәште тигән һүҙ.

"Хыялға ҡаршы" спектаклендә Даян роле тәҡдим ителгәс, башта аптыраным. Сөнки кире образды уйнағаным юҡ кимәлендә ине. Етмәһә, әҫәр пьеса өҫтөндә түгел, ә повесть буйынса эшләргә тура килде, сәхнәгә сыҡҡансы нимәлер эҙләнек, таптыҡ, үҙгәрттек. Һуңғы көнгә тиклем уны ҡайһылай итеп уйнарға тигән һорау алдында инем. Тамашасы уны яҡшы ҡабул итте. Темаһы ла актуаль, режиссерҙың ҡыйыулығы ла ярты уңышы булғандыр. Театрҙың миссияһы шунда - кеше унда булғандан һуң ыңғай яҡҡа үҙгәрергә тейеш. Был спектаклдән дә күптәр күҙ йәштәренә мансылып сыға. 400 тамашасы араһынан 10 кеше генә лә уйланһа, беҙҙең эшебеҙ юҡҡа түгел.

### Уҡытыусылыҡ эше

Кешенең һәр ваҡыт яңы нимәгәләр өйрәнгеһе килә, ниндәйҙер яңы әйбер уҡығыһы килә. Хөрмәтулла Ғәззали улы Үтәшев балалар театр студияһында эшләргә саҡырғас, риза булдым. Балалар менән эшләүе ҡыҙыҡ та, фәһем дә алаһың. Телмәрҙәрен, тауыштарын үҫтерәбеҙ, тән хәрәкәте тигән дәрес тә бар. Уларҙан актер яһау - маҡсат түгел. Башҡорт балалары бәләкәйҙән үк һәләттәрен асһын, үҙҙәрен ышанысы тойһон, аудитория алдында сығыш яһауҙан ҡурҡмаһын, үҙҙәрен тота белһен, тибеҙ. Ә актер булам тигәне бар икән, уға ярҙам итәбеҙ. Һан яғынан күп булмаһаҡ та, һәр беребеҙ берәгәйле була алабыҙ бит. Бының өсөн балаларҙы тәрбиәләүгә көс һалабыҙ. Был студия баш ҡала үҙенсәлекле генә милли мөхит тә булдырҙы, килеп, үҙ-ара танышып, башҡортса аралашып ҡайтһалар ҙа файҙа. Үҙемдең ғаиләмдә лә балаларҙың башҡортса һөйләшеүенә иғтибар бирәм. Улым Йософтың да, ҡыҙым Сәлимәнең дә башҡортса матур һөйләшеүендә кәләшем Ләйсәндең хеҙмәте ҙур. Был йәһәттән мин дә талапсан атай.

Үкенес, әммә бөгөн телебеҙ ярлылана, телгә мөнәсәбәт тә үҙгәрә. Театрҙың теле - өлгө булырға тейеш. Шиғыр һөйләү кисәләрендә сығыш яһау беҙҙе лә үҫтерә. Егерме беренсе быуат театры, әлбиттә, ул бөтөнләй башҡа театр. Гел романтик булған милли театр бөгөн ҡыйыу экспериментҡа ла бара, был ыңғай күренеш. Сөнки театрҙа милли әйберҙәр ҙә, заманса лар ла булырға тейеш. Тик бер генә нәмә үҙгәрешһеҙ ҡала - ул тел. Дөрөҫ һөйләү, баҫымды дөрөҫ ҡуйыу, телдең һутлы, бай булыуы театрҙың кимәлен күтәрә, һинең сәхнәнән һөйләгәнеңә тамашасыға ышетелергә тейеш. Милли театрҙы тел генә йәшәтә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ысынлап та, заман менән бергә театр ҙа үҙгәрә. Ул үҙгәрергә тейеш тә - күтәргән проблемалары, жанрҙары, шул уҡ ваҡытта, актерҙары менән дә, сөнки заман менән бергә уның тамашасыһы ла үҙгәрә. Бөгөнгө йәш актерҙарҙың тормоштағы актер менән сәхнәләге актер араһына айырма ҡуйыуы ла ошонандыр, кем белә? Шуныһы ла бар, тормошта иң насар актер ҙа уйнай, әммә яҡшы актерҙар ғына ысынбарлыҡта йәшәй һәм сәхнәлә уйнай ала!**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

---

ярҙамын файҙаланып, башҡорт халҡының миллимәҙәни үҫешенә ярҙам күрһәтеү, халыҡтың мәҙәниәтен, тарихын һаҡлау һәм үҫтереү, милли мәҙәниәттең, йолаларҙың, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең һәм телдең күсәгилешлелеге мәсьәләләрен хәл итеү", - тип хәбәр итте Сахалин ҡоролтайы етәксеһе Заур Ғәлиев. Башҡорт ойошмаһы дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдарында башҡорттарҙың мәнфәғәттәрен күрһәтергә, милли үҫеш гранттарында һәм программаларында ҡатнашырға ниәтләй. Шулай уҡ әүҙемселәр Рәсәйҙең баш төбәктәрендәге һәм сит илдәрҙәге этник башҡорттар менән мәҙәни бәйләнештәр булдырырға теләй. "Ойошмабыҙға тотош Сахалин өлкәһе башҡорттары инә. Барыбыҙ ҙа Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә тыуып үҫкәнбеҙ, Башҡортостандан бик аҙҙар. Урындағы "Гөлдәр" ансамбле етәксеһе Гүзәлиә Солтанова - Силәбе өлкәһенән, Ҡурған өлкәһенән дә вәкилдәр бар", - ти Заур Ғәлиев. Ҡоролтай ҡатнашасаҡ тәүге сара - һабантуй. Сахалиндағы төрлө миллләт вәкилдәрен берләштергән милли байрам 14 июлдә Холмск ҡалаһында ойошторола.

## ЯҢЫ ТАБЫШТАР



**Германия музейында 1812 йылғы Ватан һуғышы дәүерендәге башҡорт ҡорамдары һәм уҡтары табылған. Ошо хаҡта Германияла йәшәүсе яҡташыбыҙ, журналист һәм режиссер Нәсүр Йөрөшбаев хәбәр итте.**

"Өс йыл элек Германияның Эрфурт музейында минә Наполеон дәүерендәге башҡорт яугирының ҡорманын табыу бәхете тейеү тураһында "Петерсберг цитаделенән дүрт ҡорман" тигән мәҡәлә яҙҙым. Эҙләнеүҙәрҙе дауам итергә булдым һәм быйыл майҙа минең үтенес буйынса музей хеҙмәткәрҙәре һаҡлағыстарҙан тағы өс ҡорман һәм туғыҙ уҡ сығарҙы. Боронғо әйберҙәр яҡшы торошта һаҡланған һәм уларҙың тиңе юҡ", - тип һөйләне "Башинформ" агентлығына Нәсүр Йөрөшбаев.

Уға бөтә ҡомартҡыларҙы фотоға төшөрөргә, үлсәргә, еҫкәргә һәм тотоп ҡарарға рөхсәт иттеләр, тип хәбәр итте агентлыҡ әңгәмәсеһе. "Был экспонаттар - беҙҙең ҙур хазина, - тине музей директоры Айдам әфәнде. - Ошо ҡомартҡыларҙың нәҡ беҙҙең музейҙа һаҡланыуы менән беҙ бик ғорурланабыҙ", - тип өҫтәне ул, минең ҡулыма ҡорманды тапшырып". Режиссер Башҡортостан Милли музейында ҡорамдар күргәҙмәһе ойоштороу мөмкинлеге тураһында килешкән. Әле ойоштороу мәсьәләләре хәл ителә. Үҙ сиратында Нәсүр Йөрөшбаев Эрфурт ҡалаһы музейына башҡорт ҡурайын һәм үҙенең "Сена өҫтөндә ҡурай моңо" документаль фильмын бүләк иткән.

ИНТЕРНЕТТАН



# ПЛАСТИК ҺАУЫТ ТА...

## хәүефле

■ Полиэтилен йәки пластик һауыттағы һөт һәм һөт продукттары кеше сәләмәтлегенә зыян килтереүе бар. Бындай ризыҡтар ашҡаҙан-эсәк тракты сирҙәре хәүефен арттыра, һауыт бүлеп сығарған токсик матдәләр - фталаттар бауыр өсөн дә зарарлы. Белгестәр 25 төрлө ошондай ҡаплы ризыҡты лаборатор шарттарҙа тикшергән. Пластик шешәләге һөттөң - 40 һәм пакеттағы һөттөң 58 процентында фталаттар табылған. Йәғни, фталаттар организмға һөт ризыҡтары аша ла инә. Һөт продукттарынан тыш, эсәр һыу ҙа хәүеф төркөмөндә. Ҡыҫҡаһы, пластик һауыттағы бөтөн төр ризыҡ та хәүефле. Бынан тыш, фталаттар синтетик кейемдә, төҙөлөш материалдарында, уйынсыҡтарҙа бар. Фталат пластмассаға ныҡлыҡ өсөн өҫтәлә.

■ Миннесота университеты ғалимдары асыҡлауынса, ата-әсәһе артыҡ ныҡ ҡурсалаған һәм контролдә тотҡан балаларҙың уҡыуы насар була. Бынан тыш, бындай балаларға дуҫтар табыуы ла ауыр. Эксперттар фекеренсә, өлкәнәйгән саҡта бала үҙенең тойғолары һәм ҡылыҡтары менән идара итергә өйрәнергә тейеш. Өлкәндәр яғынан булған контроль уларға ошоно үтергә ҡамасаулай. Тикшеренеүселәр 8 йыл дауамында 422 бала менән шөғөлләнә. Белгестәр ата-әсәләр менән баланың үҙ-ара мөнәсәбәтен дә күҙәткән. Нимә эшләргә кәрәклеген гел әйтеп торған әсәйҙәрҙең балалары үҙенең тойғоларына баш була белмәгән, үҙҙәрен насар тотҡан. 2 йәшлек балаға гел нотоҡ уҡып тораһағыҙ икән, 5 йәшкә еткәс унын насар ҡылыҡтарына аптырарға кәрәкмәй. 5 йәштә бала үҙе ҡылған эштәрҙең насармы, яҡшымы икәнен аңларға тейеш. Был йәштә ошоға өлгәшкән бала 10 йәшкә еткәндә үҙенең хистәрен тыйып тота белә, тимәк, тормоштоң социаль өлкәһендә уңышлыраҡ була, мәктәптә яҡшыраҡ уҡый. Баланы артыҡ ҡурсаларға түгел, ә уға тойғоларын контролдә тоторға өйрәтергә кәрәк ғаиләлә.

■ Вена университеты ғалимдары билдәләүенсә, һуҡ бармағы сығанаҡ бармаҡҡа ҡарағанда оҙонораҡ булған балалар эгоист холоҡлораҡ була. Улар уйынсыҡтары менән бүлешергә лә яратмай. Фәнгә билдәле, әгәр ҙә һуҡ бармаҡ сығанаҡ бармаҡҡа ҡарағанда оҙонораҡ булһа, бала әсә ҡарынында саҡта юғары тестостерон тәьҫиренә дусар булған. Элегерәк ғалимдар быны агрессивлыҡ менән аңлата ине.

■ Бөйөк Британия ғалимдары ҡояштың ультрафиолет нурҙарының тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған. Ҡояшлы көндә асыҡ һауала ҡыҫҡа ваҡытта ғына булыу ҙа артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә икән. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашыусылар махсус солярийҙа 20 көн буйынса "ҡояш ванналары" ала. Әммә уларҙың яртыһы ультрафиолет нурҙары аҫтында ҡыҙына, ә ҡалған кешеләрҙе был нурҙарҙан үҙенсәлекле быяла һаҡлай. Эксперименттың һөҙөмтәләрен тикшереп ҡарағас, шул асыҡлана: төҙүгә төркөмдәге кешеләрҙең ҡан тамырҙарындағы баҫым башҡаларҙыҡына ҡарағанда түбәнерәк була. Табиптар раҫлауынса, ультрафиолет нурҙары тәьҫирендә тире күҙәнәктәре азот молекулаларын синтезлаусы ферменттарҙы артығыраҡ эшләп сығара. Был матдә ҡанда күтәрелгәс, ҡан тамырҙары киңәйә һәм ҡан баҫымы түбәнәйә. Юғары ҡан баҫымы инсульт һәм инфарктҡа килтереүсе төп сәбәп булыуын иҫәпкә алғанда, "ҡояш ванна"лары кешенең ғүмерен оҙайта.

ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ

# ҠОРАМАНЫ ЛА...

## сәнғәт кимәленә күтәреп була икән



**Эш буйынса башҡорт халыҡ мәҡәлдәре тупланған һүҙлекте даими рәүештә ҡулланырға тура килә. Ғәҙәттәгесә ҡулға алған бер көндә: "Ике күңел бер булһа, сүплек башы гөл булыр", - тигән мәҡәлде уҡып, уйға ҡалғайным. Тәү ҡарамаҡҡа, был фекерҙең тел төбө ябай, аңлашылып торған һымаҡ ҡына булһа ла, бөтә "берләшкән күңелдәр" ҙә гөлләмәләр үҫтереүгә көс түкмәй бит әле беҙҙең заманда. Еңел булмаған тормошобоҙҙо йәмләп, бер төрлө көндәлек йәшәү рәүешебеҙҙе сағыу төҫтәргә буяп, сүптәй өйөлгән проблемаларыбыҙҙы берәм-берәм хәл итергә маташып йәшәгән кешеләр бармы беҙҙең арала? Ошо һорауға яуапты үткән аҙнала Бөрйән районының Иҫке Собханғол ауылында төбәктең "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы уҙғарған "Серле биҙәк ҡорама, үткәндәрҙән ҡот ала" тигән республика йыйынында таптыҡ һымаҡ.**

Башҡортостан Республикаһы Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль һәм рухи үҫеш буйынса "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһының райондарҙағы ағзалары даими рәүештә төрлө кимәлдәге йыйындар, саралар ойоштороп тора. Был юлы Бөрйән районының ағинәйҙәре рухташ, фекерҙәш ҡатын-ҡыҙҙарҙы үҙ ерендә сәләмләне. Сараға Башҡортостандың егерменән ашыу район-ҡалаларынан йөҙҙән ашыу ҡатын-ҡыҙ килде. Алыҫ араларҙы яҡын итеп, төрлө тарафтарҙан килгән делегацияларҙы хужабикәләр тәү сиратта башҡорт милли аштарынан һығылып торған сәй табынына саҡырҙы. Бер аҙ юл арыуҙары онотола биргәс, "Серле биҙәк ҡорама, үткәндәрҙән ҡот ала" тип аталған күркәм йыйынды асып ебәрҙеләр. Иҫке Собханғол ауылы мәҙәниәт йортоноң иркен генә фойеһына күптәнге таныштары менән әңгәмәләшеп, шаулашып, эркелешеп килеп ингән ағинәйҙәр ҡапыл ғына тынып ҡалды: уларҙы шулай Бөрйән оҫтабикәләренең иҫ киткес сағыу, төрлө-төрлө биҙәктәр һалып эшләнгән ҡорама ҡаралтылары әсир итте. Әлбиттә, был тынлыҡ оҙаҡҡа һуҙылманы, хәл-әхүәлдәр тураһындағы гәпләшеү инде оҫта ҡорамасыларҙың эштәренә һоҡланыу белдереүгә әүерелде. Бөрйән районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Рәшиҙә Ғиззәтуллина ҡунаҡтарға күргәҙмә тураһында ҡыҫҡа ғына мәғлүмәт еткерҙе. Республика халыҡ ижады үҙәге хеҙмәткәре Кәримә Ҡайҙалова ағинәйҙәрҙе сәләмләп, ҡорама ҡорау тураһында бер-ике кәлимә фекер еткерҙе. "Был күргәҙмәлә "Кәрәҙ" биҙәү-ҡулланма сәнғәте халыҡ клубы ағзаларының күҙ нурҙарын түгеп, күңел йылыһын һалып теккән ҡул эштәре эленгән. Ҡораманы һис кенә лә ярлылыҡ билдәһе итеп ҡабул итергә ярамай, башҡорт халҡында ул традицион һөнәрҙәрҙең береһе. Бында йыйылған эштәр барыһы ла иҫ киткес үҙенсәлекле, матур, тик бер генә теләгем бар: тәбиғи туҡымаларҙан эшләһәгеҙ, ҡорамалар йортоғоҙға йылылыҡ, йәм, ҡот бирер тороп", - тине Кәримә Шәриф ҡыҙы.

Күргәҙмәне арҡырыһына-буйына йөрөп ҡарап сыҡҡандан һуң ағинәйҙәр тамаша залына үтте. "Урал" башҡорт халыҡ йырын аяғүрә тороп тыңлағандан һуң, йыйынға Бөрйән районы "Фурҡан" мәсетенең имам-хатибы Рәсүл Мөхәмәтйәнов үҙ фатихаһын бирҙе. Шунан һүҙ йола буйынса район етәксеһенә - Бөрйән районы хакимиәте башлығы Рөстәм Шәриповҡа бирелде.

- Ағинәйҙәр элек-электән аҡһаҡалдар менән бер рәттән, халҡыбыҙҙың йәшәйешендә, тәрбиә мәктәбендә оло урын биләгән, үҙҙәренең кәңәштәре, тәжрибәһе менән йәмғиәтте алға әйҙәгән, - тип һөйләп китте Рөстәм Динислам улы. - Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙың йәмәғәт ойошмалары араһында иң әүҙеме булып танылған ошо "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы Бөрйән ерлегендә лә үҙенең кәрәклеген иҫбатланы. Ойошма ағзалары районыбыҙҙың мәҙәни майҙанында бик әһәмиәтле эштәр башҡара, район хакимиәте үҙенең көндәлек эшендә улар менән кәңәшләшеп тора, бергәләп төрлө саралар үткәрә. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың үҙ энтузиазмы, үҙ теләге менән ошолай бергә ойошоуы йәмғиәтебеҙҙең шундай ойошмаларға ихтыяжынан килә ул. Һеҙ, ағинәйҙәр, халҡыбыҙҙың киләсәген булдырыусы, телебеҙҙе, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙҙе тергеҙеүсе, йәштәребеҙҙе, балаларыбыҙҙы тәрбиәләүсе, заман һынауҙарына, кире күренештәргә ҡаршы тора алыусы ҙур көс. Беҙ һеҙҙе юғары баһалайбыҙ һәм киләсәктә лә бергәләп эшләрбеҙ, тип ышанам. Тик беҙҙең ир-егеттәрҙе лә ейләп үҙегеҙҙән арттан әйәртһәгеҙ ине. Улар һеҙҙең ярҙамға, кәңәшкә бик мохтаж. Ир-егеттәр бит замана ауырлыҡтарына бирешеп барыусан. Эргәбеҙҙә ошондай матур, тос һүҙ әйткән, ауыр минуттарҙа ярҙам ҡулы һуҙған, ағинәйлек сифаттарына эйә ҡатын-ҡыҙҙар булғанда, әлбиттә, ир-егеттәр үҙҙәрендә көс тойор, тормошта үҙ урындарын, үҙ шөғөлөн табырға ынтылыр, ғаиләләр тарҡалмаҫ, халҡыбыҙ яңы һулыш менән алға ынтылыр, тип уйлайым...

Әйткәндәй, Рөстәм Динислам улының саф башҡортса матур телмәр тотоуы бөтәһенең дә күңеленә хуш килде. Нисек кенә булмаһын, Башҡортостандағы бөтә етәкселәр ҙә республиканың икенсе дәүләт телендә былай матур һөйләшә алмай бит...



Бөрйән районында уҙғарылған йыйындың төп маҡсаты - бөтә республика ағинәйҙәренә башҡорт халҡының милли шөғөлдәре, милли сәнғәте һәм башҡа милли үҙенсәлектәрен популярлаштырыу, шуларҙа нигеҙләнеп эшләнгән проекттарҙы тормошҡа ашырыу, дәүләт ярҙамы алыу мөмкинлектәре тураһында тәжрибә уртаҡлашыу ине. Быға үткән йылдың аҙағында район ағинәйҙәренең "Донъя ҡораманан йыйыла" тигән проектын тормошҡа ашырыу өсөн Башҡортостан Республикаһының Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының конкурс шарттарын үтеп сығып, 200 мең һум грантҡа лайыҡ булыуҙары сәбәпсе булған. Бөрйән районының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Рәшиҙә Ғиззәтуллина бындай мөмкинлек барлығы тураһында әйтеп, эшкә булышлыҡ иткән район хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр һәм кадрҙар сәйәсәте буйынса урынбаҫары Айҙар Әлибәковҡа, мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Клара Тләүбаеваға, Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының мәҙәни, социаль һәм рухи үҫеш буйынса "Ағинәй" төбәк йәмәғәт ойошмаһы рәйесе Гөлфиә Янбаеваға рәхмәтен белдерҙе. Әлеге көндә Бөрйән районы ағинәйҙәренең "Кәрәҙ" биҙәү-ҡулланма сәнғәте халыҡ клубы ағзалары грант аҡсаһына тегеү машиналары, эш ҡорамалдары һатып алған, оҫтахана өсөн бүленгән бүлмәне ҡулланылышҡа индерергә йыйына, уны кәрәкле мебель менән йыһаздандырып алаһы ғына ҡалған. Ҡорамасылар бынан тыш та төрлө конкурс, күргәҙмә, фестивалдәрҙә әүҙем ҡатнашып тора. Ҡорама ҡорау эшенә Иҫке Собханғол, Байназар, Ғәлиәкбәр, Кейекбай, Әтек, Ҡыпсаҡ, Һарағы, Ҡолғона ауылдары ағинәйҙәре ҡуш ҡуллап тотонған. Райондың башҡа ауылдарындағы оҫта ҡуллы ҡатын-ҡыҙҙар ҙа уларҙан һис ҡалышырға теләмәй, әленән-әле оҫталыҡ дәресе үткәреүҙе һорап, мөрәжәғәт итеп торалар икән.

- Ҡорама ҡорауҙың Бөрйән ерлегенә хас булған төрҙәрен табып, шуларҙы тергеҙеү, милли кейемдә, көнкүрештә киң ҡулланыу сараһын күреү ине минең ниәтем, - тип һөйләй Рәшиҙә Хәй ҡыҙы. - Туризм йүнәлеше үҫеш ала, турфирмаларҙың етәкселәре кешеләр өсөн тәғәйен торлаҡтарҙы милли стилдә биҙәргә тырыша. Сөнки ҡорама менән биҙәлгән йорт эсендә энергетика башҡа була, унан тыныслыҡ, боронғолоҡ, тәбиғилек, ябайлыҡ бөркөлә. Ҡаланан, көсөргәнешле эштән, бетон өйҙәрҙән ялҡҡан кеше тап шуны эҙләп килә бында. Үҙем сит илдәргә сәйәхәт ҡылған кеше булараҡ, донъя кимәлендә илгиҙәрҙәрҙең ихтыяждарын яҡшы беләм. Улар үҙҙәре барған илдәге ерле халыҡтың ҡулдан эшләгән әйберҙәрен һатып алырға, бүтән бер ерҙә лә ашап-татып ҡарамаған ризығын тәмләп ҡарарға, урындағы халыҡтың йорт эсен күрергә, шунда иҫтәлеккә фотоға төшөргә теләй. Яңылыҡ күрергә, шунан тәьҫораттар алырға, яңыса һуларға өмөтләнеп килгән ял итеүсегә беҙ нимә бирә һәм ниндәй файҙа ала алабыҙ? Шүлгәнташҡа барған юл буйында ултырған ауылдарҙың туҡталыштарында күптән инде һатыу нөктәләре эшләргә тейеш. Ҡорама ҡорауҙы кәсептең бер төрөнә әйләндереп, ял итеүселәрҙең дә ихтыяжын ҡәнәғәтләндерергә, халҡыбыҙҙың да бәҫен күтәрергә, үҙебеҙ ҙә файҙа күрергә өйрәнһәк ине. Унан ҡалһа, ҡорама булған өйҙә үҙебеҙҙең дә донъябыҙ йәмлерәк булыр. Ҡораған әйбер беҙҙең күҙ нурыбыҙ, йөрәк тибешебеҙ, ҡул йылыбыҙ аша быуындар бәйләнешенә булышлыҡ итә! Өләсәй, ҡартинәй булараҡ, ҡыҙ балаларға иҫтәлеккә ҡалдырыр түшәк-юрғандар, өй биҙәр ҡорғандар, япмалар, алъяпҡыстар кәрәк беҙҙән...

Әбйәлил, Баймаҡ, Белорет, Хәйбулла, Йылайыр, Архангел, Ҡырмыҫҡалы, Әлшәй, Бишбүләк, Иглин, Ғафури, Учалы, Күгәрсен, Көйөргәҙе, Федоровка райондары, Межгорье, Сибай, Дүртөйлө, Октябрьский, Туймазы ҡалалары ағинәйҙәре Байназар ауылы ағинәйе Көнһылыу Ҡотлобаеваның сығышынан да күп фәһем алғандыр, моғайын. Ул ағинәйҙең иңенә ятҡан бурыстарҙы ғына түгел, көнүҙәк проблемаларҙы, уларҙы хәл итеү юлдарын, эш һөҙөмтәләрен дә теҙеп һөйләп сыҡты. Бигерәк тә республика ағинәйҙәренең эше йыйындан ғына тормауын, ә һәр районда, ҡалала, ауылда йыл әйләнәһенә, көн һайын дауам итеүен, ағинәйлектең ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙың йәшәү рәүешенә әйләнә барыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды Көнһылыу Ҡотлобаева.

- Ағинәйҙәр хәрәкәтенең башланыуына байтаҡ ҡына ваҡыт үтһә лә, күпселек халыҡ ағинәйҙәр эшмәкәрлегенең нимәнән ғибәрәт икәнен аңлап, белеп тә етә алмай, - тип башланы ул һүҙен. - Шуға ла уларҙы кемдәрҙер милли кейем кейеп, сәхнәлә бейеп-йырлап йөрөүсе фольклор төркөмө итеп кенә күҙ алдына килтерә. Ә кемдерҙер ҡатын-ҡыҙҙар советының күсермәһе итеп ҡарап, улар даирәһендәге бурыстарҙы йөкләтергә тырыша. Милли кейемдәрҙәге ағинәйҙәрҙең сәхнәләрҙәге сығыштары - эшебеҙҙең бер бәләкәй генә өлөшө ул. Беҙҙең ағинәйҙәр елкәһенә һалынған бурыстар бихисап: иң мөһиме, беҙ халҡыбыҙҙың әлмисаҡтан килгән йәмәғәт тормошон алып барыу мәктәбен тергеҙергә тейешбеҙ. Тәү сиратта сәләмәт йәшәү рәүешен тергеҙеү мөһим. Тарихтан билдәле: башҡорттар иң сәләмәт милләт булған элек. Камил туҡланыу мәҙәниәте, хужалыҡ итеү үҙенсәлеге, кәсептәре, халыҡ медицинаһы арҡаһында өлгәшкән ул быға. Бына шул сәләмәт йәшәү мәктәбе ҡағиҙәләре һәр ғаиләлә урын алырға тейеш. Ғаилә институтын, күркәм йолаларыбыҙҙы, айыҡ тормош мәктәбен, быуындар бәйләнешен тергеҙмәйенсә, башҡа маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу мөмкин түгел. Енси бәйһеҙлек, ташландыҡ балалар һәм ҡарт-ҡоролар ғаилә тәрбиәһе мәктәбе емерелеүҙән килә... Эйе, район башлығы Рөстәм Динислам улы дөрөҫ әйтте: барлыҡ маҡсаттарыбыҙға өлгәшеү өсөн беҙгә ир-егеттәр, аҡһаҡалдарыбыҙ иңе лә кәрәк. Улар беҙҙән, ҡатын-ҡыҙҙарҙан, алда барырға тейеш...

Көнһылыу Ҡотлобаева етәкләгән Байназар ауылы ағинәйҙәре, ысынлап та, шәжәрә, йолалар, сәләмәт йәшәү рәүешен тергеҙеү, тарих, эногpафия, топонимика, тел, мәғрифәтселек, дин һәм башҡа бик күп йүнәлештәр буйынса эшләп, башҡаларға өлгө булып тора. Бигерәк тә уларҙың электрон китапхана төҙөү, "Башҡорт Википедияһы" сиктәрендә бөтә донъя кимәлендә электрон энциклопедия булдырыу һәм "Викидәреслек" бүлегендә әүҙем эшләүе хуплауға лайыҡ: телефон, гаджеттар заманында интернет селтәрендә башҡорт халҡы, Башҡортостан тураһында тулы мәғлүмәт булырға тейеш һәм был эшкә ағинәйҙәр ҙә булышлыҡ итә икәненә инанған улар.

Бөрйән районы ағинәйҙәре үҙҙәренең эш һөҙөмтәләре, яңылыҡтары, кәңәштәре менән бүлешкәндән һуң, сараға саҡырылған ҡунаҡтар - танылған шағирә Таңһылыу Ҡарамышева, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты баш белгесе Рәйсә Күзбәкова, "Киске Өфө" гәзитенең баш мөхәррире Гөлфиә Янбаева, "Башбланкиздат" предприятиеһы етәксеһе Гөлсәсәк Әлибаева сығыш яһаны. Улар ағинәйҙәрҙең эшен юғары баһалап, маҡтау ҡағыҙҙары һәм иҫтәлекле бүләктәр генә өләшеп ҡалманы, башҡорт халҡының яҙмышына ҡағылышлы борсоулы һорауҙар буйынса ла үҙ фекерҙәрен белдерҙе. Әле бигерәк тә туған тел, халыҡтың социаль хәле, рухи тәрбиәһе тураһында хәстәрлек күреү мөһим булған заман, шуға ла ағинәйҙәрҙең тап ошо юҫыҡтарҙы күҙ уңында тотоп эшләүе кәрәклеген һыҙыҡ өҫтөнә алды улар. Бына ошондай эшлекле һөйләшеүҙәр менән Бөрйән районының "Мираҫ", "Ҡурыуҙы", "Тамъян гәүһәрҙәре" халыҡ фольклор ансамблдәренең сағыу, халыҡсан сығыштары аралашып барҙы. "Ҡурыуҙы" халыҡ фольклор ансамбле "Ҡаралды ҡағыу" тип аталған йоланы башҡарып күрһәтте. Улар районДың Байназар ауылында һаҡланып ҡалған ҡораманың бер төрө - сергетыш тураһында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәт еткерҙе. Сергетыш - ат һыртына, үндек менән эйәр араһына һалынған ҡорама япма. Сергетыштың осона ҡуйылған суҡтары "туҡмаҡ" тип йөрөтөлә, улар атты шәпләп, ҡыуалап бара икән. Ҡолғана ауылының "Тамъян гәүһәрҙәре" халыҡ фольклор ансамбле - "Кейеҙ баҫыу", "Мираҫ" халыҡ фольклор ансамбле "Һитә балы" йолаларын күрһәтте. Сара һуңында барыһы ла аяғүрә баҫып, Ишембай районы ағинәйҙәре Мәрйәм Солтанова һәм Фәүзиә Ҡотлогилдина яҙған "Ағинәйҙәр маршы"н башҡарҙы.

Тамаша тамамланғас, билдәле инде, ҡунаҡтар Бөрйән ағинәйҙәре үҙ ҡулдары менән әҙерләгән милли аш-һыуҙарҙан һығылып торған табын янына йыйылды. Үҙ-ара аралашыуға һыуһаған ҡатын-ҡыҙҙар аш табынынан һуң да тиҙ генә таралырға ашыҡманы. Бер төркөм Шүлгәнташ мәмерйәһен күрергә, икенсе төркөм Инсебикә ҡаяһы янына ашыҡты...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Республика ағинәйҙәре шулай әле бер районда, әле икенсе районда бергә-бергә осрашып, тәжрибә уртаҡлашып тороуҙы йолаға әйләндергән. Уларҙың һәр йыйыны бер фәһемле яғы менән хәтерҙә уйылып ҡалыусан. Был юлы беҙ ҡалдыҡ туҡыма киҫәктәренән тегелгән ҡораманы сәнғәт кимәленә күтәргән Бөрйән районы ағинәйҙәренең ҡул эштәренә, оҫталыҡтарына хайран булдыҡ. Баҡтиһәң, бер төрлө уйлап, бер төрлө эшләп йәшәргә өйрәнеп килгән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ, теләһә, ысынлап та, донъяны гөлләмәгә әйләндерә ала икән. Был хакиҡәттең асылын ошо йыйында булғандарҙың барыһы ла аңланы, буғай.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**



СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

## Аҡһым нисек ярҙам итә?

**B12 (цианокобаламин)** нервылар эшмәкәрлеген яйлау өсөн кәрәк. Организмда аминокислоталар, фолацин, холин алмашыныуын көйләй. Һыйыр малы бауырында, телдә, иттә, балыҡтарҙың ҡайһы бер төрөндә (сельдь, скумбрия, сардина), сырҙа, эремсектә, һөттә бар. Үҫемлек ризыҡтарында юҡ. Шуның менән бер рәттән, когнитив функцияларҙы нормаль тотоу өсөн витамин-аминокислоталар - С, А, Е һәм бета-каротин мөһим әһәмиәткә эйә. Улар ҡан тамырҙарын, нервылар системаһын нығыта, аҡһым, холестерин, тимер һәм ҡайһы бер витаминдар алмашыныуын көйләй. С витамины йәшелсә-емештә, еләктәрҙә һәм йәшел тәмләткестәрҙә, бигерәк тә гөлйемеш, ҡара ҡарағат, һырғанаҡта, татлы боросто, укропта, петрушкала, төҫлө кәбеҫтәлә, әфлисунда, ер еләгендә, миләштә, аҡ күсәнле кәбеҫтәлә, ҡайһы бер сорт алмаларҙа, мандаринда, ҡуҙғалаҡта, йәшелсә һәм емеш һуттарында бар. А витамины организмға бауыр, аҡ май, йомортҡа, кета уылдырығы аша инә йәки бауырҙа каротиндан (ҡыҙыл кишер, ҡыҙыл борос, шпинат, йәшел һуған, ҡуҙғалаҡ, һырғанаҡ, томаттар, миләш) барлыҡҡа килә. Е витамины (токоферолдар) үҫемлек һәм мал продукттарында була: ҙур күләмдә - көнбағыш, мамыҡ, соя майында, әҙерәк күләмдә - йәшелсәләрҙә, ҡуҙаҡлыларҙа, һөттә, аҡ майҙа, тауыҡ йомортҡаһында, иттә, балыҡта.

Минераль матдәләр ҙә когнитив дисфункцияны дауалауҙа һәм профилактикалауҙа бик мөһим. **Кальций** нервылар туҡымаһының ҡуҙғыуында һәм үткәреүсәнлек процесында ҡатнаша. Уның сығанағы булып һөт һәм һөт ризыҡтары тора. Оҙаҡ йылдар аҡыл эшмәкәрлеген матдәләр алмашыныуы, нерв һәм мейе туҡымаһы, мускулдар, бауыр, бөйөр эшмәкәрлеген көйләү, һөйәктәр, ферменттар, гормондар, витаминдар барлыҡҡа килтереүҙә ҡатнашҡан фосфор ҡулланыуға бәйләнеләр. **Фосфорҙың** төп сығанағы булып мал продукттары - ит, балыҡ, йомортҡа һарыһы, эремсек, сыр тора.

**Магний** нервылар системаһының ҡуҙғыусанлығын нормалләштерә. Был минерал етешмәгәндә кальций тоҙҙары артериаль ҡан тамырҙарына, йөрәк мускулдарына, бөйөрҙәргә ултыра һәм һыуҙа магний әҙ булған ҡайһы бер төбәктәрҙә йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарының юғары булыу сәбәбе булып тора. Ярмалар, ҡуҙаҡлылар, көрпә, сәтләүектәр, кишер һәм кәбеҫтә магнийға бай. **Калий** организмда һыу-тоҙ алмашыныуын, ҡан баҫымы кимәлен көйләй, организмдан һыуҙы һәм натрийҙы сығарырға булышлыҡ итә. Ул үҫемлек продукттары (ҡуҙаҡлылар, кипкән емеш-еләк, картуф) аша организмға инә. **Натрий** сығанағы булып аш тоҙо тора. Ул күҙәнәк-ара алмашыныу процесында ҡатнаша, организмда һыу тупланыуын тәьмин итә. Уға мал продукттары, боржоми, ессентуки һ.б. кеүек минераль һыуҙар бай. Йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары ваҡытында һәм когнитив дисфункцияны профилактикалау өсөн тоҙ ҡулланыуҙы көнөнә 5 грамға тиклем кәметергә йәки унан бөтөнләй баш тартырға кәрәк.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 2 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00, 09.15 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.55 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.40 "Красная королева". Драматический сериал (16+).
22.40 Чемпионат мира по футболу 2018. 1/8 финала. Прямой эфир из Ростова-на-Дону.
01.00, 03.05 "Сноуден". Триллер (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Королева красоты". 1-3-я серии. Сериал (12+).
23.25 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.10 "Место встречи изменить нельзя". Детективный сериал (16+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Золотой теленок". Сериал (16+).**
**11.00 "Итоги недели".**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**14.45, 23.30 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Борсаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 21.30 Новости.**
**16.45, 19.00, 22.00 "Интервью" (12+).**
**17.00 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**17.30 "Орнамент" (6+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.30 "Бай" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Бизнес-проба" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**24.00 "Легенды госбезопасности" (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

## 3 ИЮЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00, 09.15 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.50 "Жить здорово!" Программа о здоровье (12+).
10.55, 03.10 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18,25, 01.40, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
20.20 "Время".
21.30 "Красная королева". Драматический сериал (16+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Королева красоты". 4-6-я серии (12+).
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.10 "Место встречи изменить нельзя". Сериал (16+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Золотой теленок". Сериал (12+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 23.30 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**16.45 "Современник" (12+).**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.30 "Орнамент" (6+).**
**17.45 "Учим башкирский язык".**
**18.00 "Бай баҡса" (12+).**
**19.00, 22.00 "Интервью".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Уфимское времечко".**
**23.00 "Песня года" (12+).**
**24.00 "Легенды госбезопасности" (16+).**
**По окончании Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә".**

## 4 ИЮЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00, 09.15 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.05 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 01.35 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Красная королева". Драматический сериал (16+).
23.35 "Превосходство Борна". Боевик (12+).
04.05 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Королева красоты". 7-9-я серии (12+).
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.10 "Место встречи изменить нельзя". Сериал.

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Золотой теленок". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 23.45 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра" (6+).**
**16.45 "Современник" (12+).**
**17.00 "Моя республика" (12+).**
**17.30 "Орнамент" (6+).**
**17.45 "Свадьба наизнанку" (6+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 22.00 "Интервью" (12+).**
**19.30 "Алтын тирмә".**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Бала-саға" (6+).**
**24.00 "Легенды госбезопасности" (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

## 5 ИЮЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00, 09.15 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.50 "Жить здорово!" Программа о здоровье (12+).
10.55, 03.10 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 01.40, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
17.30, 18.15 "На самом деле" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Красная королева". Сериал (16+).
23.35 "Ультиматум Борна". Боевик (16+).
04.10 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Королева красоты". 10-12-я, заключительные серии (12+).
23.35 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.10 "Место встречи изменить нельзя". Сериал (16+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Золотой теленок". Сериал.**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Весело живем" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Байтус" (6+).**
**15.45 "Ҡош юлы. Балалар" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.45 "Замандаш" (12+).**
**17.00 "История Государства Российского" (12+).**
**17.30 "Орнамент".**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.00, 22.00 "Интервью" (12+).**
**19.30 "Башҡорттар" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Легенды госбезопасности" (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 "Бәхетнамә" (12+).**

## 6 ИЮЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00, 09.15 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.50 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00, 04.55 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Три аккорда" (12+).
23.10 "Эволюция Борна". Боевик (16+).
01.40 "Военно-полевой госпиталь". Комедия (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!" (12+).
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 02.45 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 17.40 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Склифосовский". Драматический сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
18.45 Футбол. Чемпионат мира-2018. 1/4 финала. Прямая трансляция из Казани.
20.55 "Елки-5". Комедия (12+).
22.45 Футбол. Чемпионат мира-2018. 1/4 финала. Прямая трансляция из Нижнего Новгорода.
00.55 "Огни большой деревни". Худ. фильм (12+).

### БСТ
**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Ровесники динозавров" (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Н.Асанбаев. "Вишневая гора" (12+).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Вопрос + Ответ = Портрет" (6+).**
**15.30 "Сулпылар".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Выше всех!" (6+).**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Замандаш" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.30 "Орнамент" (6+).**
**17.45 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Бала-саға" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Бизнес-обзор" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (12+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2018" (12+).**
**24.00 "Любовь, сбивающая с ног". Худ. фильм (12+).**
**02.00 Р.Кинзябаев. "Одолжи мне жеребца" (12+).**

## 7 ИЮЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00, 10.00 Новости.
06.10, 16.00 "За двумя зайцами". Комедия.
07.40 "Играй, гармонь любимая!"
08.25 "Смешарики. Новые приключения".
08.40 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.10 "Юрий Маликов. Все самоцветы его жизни" (12+).
11.10 "Теория заговора" (16+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Тамара Синявская. Созвездие любви" (12+).
13.15 Концерт, посвященный 75-летию Муслима Магомаева.
15.10 "Муслим Магомаев. Нет солнца без тебя..." (12+).
17.15, 18.20 "Вместе с дельфинами".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.20 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
20.20, 21.40 "Сегодня вечером" (16+).
21.00 "Время".
22.40 Чемпионат мира по футболу-2018. 1/4 финала. Прямой эфир из Сочи.
01.00 "Джейсон Борн". Боевик (16+).
03.15 "Двое в городе". Худ. фильм (12+).
05.05 "Мужское / Женское" (16+).

### РОССИЯ 1
05.20 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
07.10 "Живые истории".
08.00 "Говорит и показывает Уфа" (12+).
09.00 "По секрету всему свету".
09.20 "Сто к одному".
10.10 "Пятеро на одного".
11.00 "Вести".
11.20 "Вести-Башкортостан".
11.40 "Аншлаг и Компания" (16+).
14.15 "Вдовец". Сериал (12+).
18.00 "Привет, Андрей!" Ток-шоу (12+).
20.00 "Вести в субботу".
21.00 "Фламинго". Сериал (12+).
01.00 "Я тебя никогда не забуду". Худ. фильм (12+).
02.55 "Личное дело". Сериал (16+).

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45, 12.30,18.30 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Звездный бойскаут". Худ. фильм (6+).**
**10.00, 21.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "У дачи" (12+).**
**11.45 "Орнамент" (6+).**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**13.00 "Замандаш" (6+).**
**13.15 "Учим башкирский язык".**
**13.30 "Бай" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2018" (12+).**
**17.00 "Ирәндек моңдары-2018" (12+).**
**19.00 "Свадьба наизнанку" (12+).**
**20.00 "Весело живем" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Песня года" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**22.30, 02.00 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2018" (12+).**
**24.00 "Онг Бак". Худ. фильм (16+).**
**02.45 М.Карим. "Похищение девушки" (12+).**

## 8 ИЮЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00, 10.00 Новости.
06.10 "Расследование". Худ. фильм (12+).
07.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.00 "Часовой" (12+).
08.30 "Сказ о Петре и Февронии". Худ. фильм.
10.15 "Ирина Мирошниченко. "Я знаю, что такое любовь" (12+).
11.15 "Честное слово" с Юрием Николаевым.
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Андрей Мягков. "Тишину шагами меря..." (12+).
13.20 "Жестокий романс". Драма (12+).
16.00 "Большие гонки" с Дмитрием Нагиевым (12+).
17.30 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
18.35 "День семьи, любви и верности". Праздничный концерт.
21.00 "Воскресное "Время".
22.00 "Клуб Веселых и Находчивых". Летний кубок-2017 в Астане (16+).
00.40 "Огненные колесницы". Худ. фильм.
03.00 "Модный приговор".
04.00 "Мужское / Женское" (16+).

### РОССИЯ 1
04.50 "Срочно в номер! На службе закона". Сериал (12+).
06.45 "Сам себе режиссер".
07.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному".
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается". Юмористическая программа.
12.35 "Вместо нее". Сериал. 8 серий (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Интервью с Наилей Аскер-заде" (12+).
01.25 "Ким Филби. Моя Прохоровка". Док. фильм к 75-летию Курской битвы (12+).
02.25 "Право на правду". Сериал (12+).

### БСТ
**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики". Мультсериал.**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай бакса" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Выше всех!" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл".**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Байтус" (6+).**
**11.15 "Сулпылар".**
**11.30 "Кош юлы. Балалар" (6+).**
**11.45 "Любимая семья". Концерт студии "Тамыр".**
**12.00 "Моя семья".**
**15.00 Итоги недели (на башк.яз.).**
**15.45 "Дарю песню" (12+).**
**17.15 "Дорога к храму".**
**17.45 "Созвездие талантов" (6+).**
**19.30 "Интервью" (12+).**
**20.00 "Лидеры региона" (12+).**
**20.30 "Моя республика" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Кош юлы. Балалар" (6+).**
**00.45 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.45 "Большой босс". Худ. фильм (12+).**

***✓ Әле режиссер кастингта һайлап алынған балаларға кинопроба үткәрә. "Беҙ һигеҙ кешене һайланыҡ. Фото һәм видеояҙмаларға ҡарағанда, балалар башҡортса бик һәйбәт һөйләшә.***



СӘНҒӘТ. МӘҘӘНИӘТ. СПОРТ.

# ТОЛПАР БӨРКӨТЛӨГӘ ӘЙЛӘНӘ...




**Мостай Кәримдең "Өс таған" повесы буйынса тулы метражлы нәфис фильм төшөрөү урыны һайланды. Ғафури районының Толпар ауылы бер айға билдәле китаптағы Бөркөтлө ауылына әйләнәсәк.**

"Фильм төшөрөү урынын ошо көндәрҙә билдәләнек. Һәр ауыл 40 кешенән торған ижади команданы һыйҙыра алмай. Күлдәр ҙә эҙләйбеҙ, - тип хәбәр итте "Башинформ" агентлығына фильмдың режиссеры Айнур Асҡаров. - Эште июль урталарында башлайбыҙ, август аҙағына тамамларға ниәтләйбеҙ. Унан ярты йыл монтаж. Маҡсатыбыҙ - фильмды 2019 йылдың 20 октябренә тамамлау һәм Мостай Кәримдең 100 йыллығына күрһәтеү". Әле режиссер кастингта һайлап алынған балаларға кинопроба үткәрә. "Беҙ һигеҙ кешене һайланыҡ. Фото һәм видеояҙмаларға ҡарағанда, балалар башҡортса бик һәйбәт һөйләшә. Икенсе пландағы ролдәрҙе быға тиклем бергә эшләгән актерҙар уйнай, - ти Айнур Асҡаров. - Фильм Мостай Кәримдең повеҫын уҡыған кеүек ҡыҙыҡлы булырға вәғәҙәләй. Сценарийҙы камиллаштырабыҙ. Беҙ мотивтар буйынса төшөрәбеҙ, ләкин төп нөсхәнән ситкә тайпылмайбыҙ".

# ЭТНИК СПОРТ...




**Башҡортостандың Спорт һәм йәштәр сәйәсәте министрлығы, "Яҡтыкүл" һәм "Юбилей" шифаханалары ойошторған "Күсмә халыҡтар уйындары" - этник спорт төрҙәре буйынса ярыштар 4500-ҙән ашыу тамашасыны йыйҙы. Сара Әбйәлил районының "Яҡтыкүл" курортында уҙҙы.**

Бындай форматтағы фестиваль республикала тәүгә ойошторолдо. Милли көрәш, традицион уҡтан атыу, аттан уҡ атыу кеүек этник спорт төрҙәрендә 100-ҙән ашыу батыр көс һынашты. Сараны ойоштороусы Салауат Нафиҡов был сарала ваҡиғалар туризмы кеүек ҙур потенциал күреүен билдәләне. "Тамашасылар республиканың төрлө райондарынан килгәйне. Был йәнә бер тапҡыр республикала йәшәүселәрҙең Күсмә халыҡтар уйындары менән ҡыҙыҡһыныуы хаҡында һөйләй. Беҙҙең тамырҙарыбыҙ һәм ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ ошонда. Күсмә халыҡтар уйындарын, район һабантуйҙары тамамланғас, йыл һайын үткәрергә булдыҡ. Был Башҡортостандағы иң көслө спортсыларҙы асыҡларға мөмкинлек бирә", - тине ул. Еңеүселәр 2018 йылдың 2-9 сентябрендә Ҡырғыҙстанда III Бөтә донъя күсмә халыҡтар уйындарында ҡатнашасаҡ.

# ИҢ ШӘП ҠУРАЙСЫ КЕМ?



**Башҡорт халыҡ ҡоралдарында уйнаусыларҙың Ишмулла Дилмөхәмәтов исемендәге республика конкурсына йомғаҡ яһалды. Сара күренекле ҡурайсының тыуған төйәгендә, Башҡортостандың Йылайыр районында уҙҙы. Район һабантуйында гала-концерт һәм еңеүселәрҙе бүләкләү тантанаһы үтте. Стәрлетамаҡ театр-концерт берләшмәһе артисы Динар Абдуллин конкурстың төп призеры булды.**

Музыканттың тыуыуына 90 йыл тулыуға бағышланған традицион конкурста был юлы ла ҡурайҙа, думбырала, ҡыл-ҡумыҙҙа уйнаусылар, ҡурайсылар ансамблдәре, ғаилә ансамблдәре ҡатнашты. Һәр номинацияла еңеүселәр асыҡланды. Өфөнән "Айсулпан" ҡатын-ҡыҙҙар ансамбле, Йылайыр районы ҡурайсылар ансамбле, Сибайҙан Ғайсиндарҙың ғаилә ансамбле, Учалы ҡалаһынан "Толпар" ҡурайсылар ансамбле, Өфөнән ҡурайсы Илһам Әхмәтйәнов, Күгәрсен районынан Ирек Исхаҡов, Ғафури районынан Рәмил Ҡотдосов, Ейәнсура районынан Рафиҡ Исҡужин төрлө номинацияларҙа беренсе урын алды.

Музыка ҡоралдарын етештереүсе оҫталар араһында Рәмил Хөснуллин һәм Мөхәмәт Түлебаев иң яҡшылары булды. Йошкар-Оланан (Мари Иле) 76 йәшлек Муса Нурдәүләтов - иң өлкән ҡатнашыусы, Сибайҙан һигеҙ йәшлек думбырасы Ынйы Ғайсина иң йәш ҡатнашыусы тип билдәләнде. Ынйы шулай уҡ балалар номинацияһында еңеү яуланы. Рәсәйҙең атҡаҙанған, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Азат Айытҡолов етәкселегендәге баһалама комиссияһы эшләне.

# МӘРГӘН БУЛҺАҢ...




**Башҡортостандың Иглин районында традицион яндан уҡ атыу буйынса III "Мәргән уҡсы" Халыҡ-ара фестивале үтә. Сара 6-7 июлдә була.**

Фестиваль сиктәрендә ике турнир ойоштороласы - район хакимиәте башлығы бүләгенә атта һыбай килеш уҡ атыу һәм традицион яндан уҡ атыу буйынса турнир. Ярыш һөҙөмтәләре буйынса Башҡортостандың иң яҡшы 12 уҡсыһы асыҡлана. Улар артабан республика исеменән төбәк һәм халыҡ-ара турнирҙарҙа сығыш яһаясаҡ. Шулай уҡ "Евразия кубогы" халыҡ-ара турнирын уҙғарыу күҙаллана. Унда Башҡортостан Республикаһы йыйылмаһы, Рәсәй төбәктәренән һәм сит дәүләттәрҙән уҡсылар ҡатнаша. Әлегә 100-ҙән ашыу кеше ҡатнашырға теләк белдергән. Улар Словакиянан, Германиянан, Ҡаҙағстандан, Ҡырғыҙстандан, Беларустан, Башҡортостандан, шулай уҡ Рәсәй төбәктәренән. Фестивалде уҙғарыуға 90 мең һум күләмендә Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты бүленгән.

# МӘСКӘҮҘӘ - БАШҠОРТСА




**Мәскәүҙә "Алтын Ай" башҡорт бейеү ансамбле отчет концерты менән сығыш яһаны. Был юлы ул башҡорт телен яҡлауға арналды.**

"Биш йыл буйына, биләүҙән тиерлек ижади коллективта шөғөлләнгән балаларҙың үҫеп еткәнен күреү - ҙур ҡыуаныс. Был беҙгә, тамашасыларға, яҡташтарыбыҙ менән осрашып-күрешеү өсөн яҡшы мөмкинлек. Ҙур мегаполиста Башҡортостанда тыуып үҫкәндәрҙең ҙур ғаилә булып йәшәүе, юғалып ҡалмауы һәм легендар бейеүҙәребеҙ аша башҡа милләттәр араһына сығыуы менән ғорурланабыҙ", - ти ата-әсәләрҙең береһе Лилиә Байморатова.

Сараға Рәсәй Дәүләт Думаһы депутаты Рәмзил Ишһарин килгәйне. Ул ансамбль етәксеһе Нәзир Байегетовҡа рәхмәт хаты тапшырҙы һәм йылы һүҙҙәрен еткерҙе. "Артистарҙың оҫталығы көндән-көн арта барыуын күреп шатланабыҙ. Өлкән төркөм - классик, студенттар һәм уҡыусылар - дәртле, кескәйҙәр иһә күңелде нескәртә торған бейеүҙәр менән сығыш яһаны. Бейеү номерҙары араһында алып барыусылар Башҡортостан яҙыусылары һәм шағирҙары хаҡында һөйләне, Башҡортостандың бейеү менән генә түгел, әҙәби йолалар менән дә дан тотоуын төшөнөү ҡыуаныслы. Концерттарҙа күргән матур бейеүҙәр - ҙур эш", - тип тәьҫораттары менән уртаҡлашты тамашасылар.

# БӨЙӨК ЙЫРСЫНЫ ДАНЛАП



**Мәҙәниәт министрлығы һәм Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы Башҡортостанда Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге республика йырсылар конкурсы башланыуын хәбәр итте. Сара 20 июндән 15 ноябргә тиклем үтә.**

21 сентябрҙән 31 октябргә ҡәҙәр ҡатнашыусыларҙы тыңлау ҡаралған. 1-15 ноябрҙә конкурсҡа йомғаҡ яһала. Конкурста 18-35 йәшлек махсус белеме булған башҡарыусылар (училище, юғары уҡыу йорто), урта махсус һәм юғары уҡыу йорттарының йыр бүлеге студенттары ҡатнаша ала. Йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың әҫәрҙәрен - "Эшсе" операһынан Ниғмәт арияһын, "Сания" операһынан Зыя, Сания арияларын, "Маяковский үлеменә", "Шомло ел" һәм "Сайҡалалар кәмәләр" романстарын һәм йырҙарын башҡарырға тейеш (ҡатнашыусы үҙе һайлай). Ҡатнашыусыға 2018 йылдың 20 июненән 31 августа тиклем Башҡорт дәүләт филармонияһына ғариза бирергә кәрәк (450052, Өфө ҡалаһы, Гоголь урамы, 58). Мәғлүмәт өсөн телефон: 8 (347) 250-12-00.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Июнь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Әбйәлил районы** Салауат ауылынан Мәрхәбә Ноғоманова, **Баймаҡ районы** Ҡолсора ауылынан Фәйрүзә Баязитова, **Ауырғазы районы** Төрөмбәт ауылынан Миңлегөл Ибраҡова, **Федоровка районы** Бала Сытырман ауылынан Мәүсилә Үтәғолова, **Өфө ҡалаһынан** Наилә Усманова, Юнир Вәлиев һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас йөрәктән ҡотлайбыҙ! Гәзитебеҙҙең яҡын дуҫтарына ғаилә именлеге, ныҡлы сәләмәтлек теләйбеҙ. Тормошоғоҙҙа ҡыуаныстар, бәхетле мәлдәр күберәк булһын!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

* * *

Был көндәрҙә Рәсәй почтаһы көнө билдәләнә. Ошо айҡанлы Әбйәлил, Бөрйән, Белорет, Учалы райондарының почта хеҙмәткәрҙәрен профессиональ байрамыбыҙ менән ҡотлайым. Уларға иң матур, иң изге, иң ихлас теләктәремде еткерәм.

**Вәлимә ГАРДАНОВА,**
**Белорет почтамты етәксеһе урынбаҫары.**

Хөрмәтле почтальондар, ошо ҡотлауға беҙ ҙә ҡушылабыҙ. Гәзит-журналдарҙың таралыуы һеҙҙең егәрлелек, ныҡышмалыҡ, һеҙҙең йүгереп йөрөүҙәр аша атҡарылғанын беләбеҙ һәм баһалайбыҙ. Гәзитебеҙҙе әүҙем таратыусы дуҫтарыбыҙға, бигерәк тә Белорет, Баймаҡ, Сибай, Мәләүез, Ишембай почтамтына ҡараған бар райондарҙың почта хеҙмәткәрҙәренә рәхмәт һүҙҙәребеҙҙе еткерәбеҙ, тән һәм йән сәләмәтлеге, ишле бәхет-шатлыҡтар теләйбеҙ.

**"Киске Өфө"ләр.**

В соответствии с частью 1 статьи 63 Кодекса Республики Башкортостан о выборах Муниципальное бюджетное учреждение "Издательский дом "Уфа" городского округа город Уфа Республики Башкортостан сообщает о готовности предоставить печатную площадь для проведения предвыборной агитации по выборам депутатов Государственного собрания-Курултая Республики Башкортостан шестого созыва 9 сентября 2018 года в газетах "Вечерняя Уфа", "Уфимские ведомости", "Уфимская неделя" по цене 60 рублей за кв. см, в газете "Киске Офо" - 40 рублей за кв. см, в журнале "Уфа" - 30 рублей за кв.см.

| Площадь печатной публикации | Стоимость в газетах «Вечерняя Уфа», «Уфимские ведомости», «Уфимская неделя» (руб) | Стоимость в газете «Киске Өфө» (руб) | Стоимость в журнале «Уфа» (руб) |
|---|---|---|---|
| ¼ А3 | 15 000 | 10 000 | |
| ½ А3 | 30 000 | 20 000 | |
| А3 | 60 000 | 40 000 | |
| ½ А4 | | | 7 500 |
| А4 | | | 15 000 |

Цены указаны с учетом ндс 18%. Написание информационного материала -10% от стоимости публикации.
Контактный телефон (347) 273 35 92, 272 89 09,
e-mail: vureklama2007@mail.ru
реклама

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Июль (Шәүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 2 (18) дүшәмбе | 3:16 | 4:46 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 3 (19) шишәмбе | 3:17 | 4:47 | 13:30 | 20:23 | 21:53 | 23:23 |
| 4 (20) шаршамбы | 3:18 | 4:48 | 13:30 | 20:22 | 21:52 | 23:22 |
| 5 (21) кесе йома | 3:19 | 4:49 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 6 (22) йома | 3:20 | 4:50 | 13:30 | 20:21 | 21:51 | 23:21 |
| 7 (23) шәмбе | 3:21 | 4:51 | 13:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |
| 8 (24) йәкшәмбе | 3:22 | 4:52 | 13:30 | 20:19 | 21:49 | 23:19 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БЕЙЕҮ ХӘРӘКӘТЕ - АЙЫРЫМ МӘҒЛҮМӘТ,

## уның аша бала халҡы рухына яҡыная



(Башы 1-се биттә).

Балаларҙың "Байыҡ" бәйгеһе быйыл ун йыллыҡ юбилейын да билдәләне. Тап ун йыл элек республиканың бәләкәй бейеүселәре тәүге тапҡыр бер майҙанға йыйылғайны. "Ун йыл элек тә ниндәйҙер концерт эшләйек тип кенә йыйманыҡ балаларҙы, башҡорт бейеүен үҫтерәйек, иң-иң һәләтле балаларыбыҙҙы күрһәтәйек, тинек. Бар эштәргә лә баһаны ваҡыт ҡына бирә. Күпме исемдәр астыҡ ошо арауыҡта, улар араһында бейеүселәр генә түгел, бейеү ҡуйыусылар ҙа бар. Мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында, клубтарҙа балалар өсөн бейеү түңәрәктәре барлыҡҡа килде. Балалар классик бейеүҙәребеҙҙе белә, уларҙы бейей. Быларҙың барыһында "Байыҡ"ты ижад итеүсе ҙур команданың өлөшө лә бар. Беҙ бөгөн дә концерт эшләйек, тигән теләктән тотонмайбыҙ был эшкә. Камиллыҡтың сиктәре юҡ, тиҙәр, һаман да үҙебеҙгә тәнҡит күҙлеге аша ҡарайбыҙ, йылдан-йыл яңы маҡсаттар билдәләнә", - ти проект авторы Рита Өмөтбаева "Байыҡ"тың ҙур булмаған юбилейы тураһында. Шулай ҙа быйылғы Гала-концертта ярты меңләгән йәш бейеүсенең классик бейеүҙәребеҙҙең иң гүзәл өлгөһө "Гөлнәзирә"не бер юлы бер нисә сәхнәлә башҡарыуын күргәндән һуң, "Байыҡ"тың ошо ҡыҫҡа ғына осор эсендә ниндәй юғарылыҡҡа күтәрелгәнен аңлайһың.

Бейеүселәрҙең хәрәкәттәрендәге үҫеш, сәхнәлә үҙҙәрен әртистәрсә тота белеүҙәре тураһында ла күп әйтергә булыр ине. Иң бәләкәстәр араһында Гран-при яулаған Наҙгөл Әйүпованың етәксеһе Азалия Ҡотдосова хаҡлы билдәләүенсә, был бәйгегә еңел-елпе әҙерләнеп кенә килеп булмай. Бәйгеселәр ҙә, тимәк, бәйге талаптары ла көсәйә бара. Балалар араһында бейеүҙе күңеле менән кисереп, йөрәге менән бейеүселәр күбәйә. Үҙенең ҡылығына, темпераментына ҡарап, бейеү һайлай белә улар. Мәҫәлән, "Үҫәргән Байығы" холҡома тап килеп тора, үҙем дә бик шаян кешемен", - тип әңгәмә ҡорған Йылайыр егете Ғәзизйән Ғәлиәкбәровҡа нисек һоҡланмайһың инде! Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, бейеүсе Хәлил Ишбирҙин әйтеүенсә, иң мөһиме, "Байыҡ" аша, башҡорт бейеүе аша балалар үҙ милләтенең мәҙәниәте, тарихы менән таныша. "Башҡорт бейеүе шунһы менән айырыла, барлыҡҡа килгән ваҡытында уҡ уға ниндәйҙер йөкмәтке, мәғәнә һалынған. Һәр хәрәкәт - айырым мәғлүмәт. Ошоға төшөнгән бала үҙе өсөн халҡын яңынан аса, уға яҡыная. Тамашасы булып ҡына килгән кеше лә рухи уяныу кисерә".



Әйткәндәй, гала-концерт быйыл икенсе тапҡыр Өфөлә үтте. Быны ошо үҙенсәлекле бейеү мөхитенең башҡорттарҙың баш ҡалаһына күсеүе тип ҡабул итергә кәрәк. Беренсенән, бөтөн кеше лә быға тиклем балалар байығының үҙәге булып торған Күгәрсен районына тамаша ҡылыр өсөн бара алмай. Икенсенән, әлегә республика төбәктәрендә бейеүселәр күп булһа ла, Өфө ҡалаһы балалары был ағымға әүҙем генә ҡушылып китә алмай ине. Өфө районы Шамонин ауылында эшләп килгән "Дарман" ансамблен иҫәпкә алмағанда, телгә алырлыҡ коллективтар ҙа юҡ кимәлендә. Уларға эйәреп, "Гүзәл данс" бейеү коллективы ла үҙенең тәрбиәләнеүселәрен бәйгегә сығара башланы, быйыл Динә Хәйбуллина өлкән балалар араһында Гран-при яуланы. Бынан тыш, ете йәшлек Әдилә Билалова ла үҙ төркөмөндә еңеүсе булды. Ул Өфөнөң 2-се башҡорт лицейы эргәһендәге Балалар ижад үҙәгендә шөғөлләнә. Тимәк, был йәһәттән тәүге уңыштар ҙа бар.

### ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ысынлап та, уңыштарҙы барлағанда уларҙың барыһына ла башҡорт бейеүен күтәреүсе, уны данлаусы "Байыҡ" Республика бәйгеһе этәргес булып тороуын билдәләмәйенсә булмай. Әгәр ҙә ошондай бәйгеләр булмаһа, бейеү сәнғәте лә бөгөнгө кимәлгә күтәрелә алыр инеме икән? Бигерәк тә балалар өсөн мөһим бындай иғтибар. Башҡортостанды Рәсәй кимәлендә күрһәткән билдәле башҡорт ҡыҙы Наҙгөл Отузова ла: "Байыҡ" - йәш һәләттәргә ҡанат нығытыр майҙан", - тип бик тапҡыр билдәләгәйне. Ә быйылғы еңеүселәр иһә түбәндәгеләр: тулы ансамблдәр араһында Туймазы ҡалаһының "Сәфәр" өлгөлө хореографик ансамбле менән Ғафури районының "Быҙыбыт" өлгөлө халыҡ бейеүҙәре ансамбле; бәләкәй ансамблдәр араһында Учалы районының "Ирәмәл" өлгөлө халыҡ бейеүҙәре ансамбле менән Сорғот ҡалаһының "Шатлыҡ" халыҡ ансамбле; яңғыҙ бейеүселәр араһында Наҙгөл Әйүпова (Әбйәлил районы), Динә Хәйбуллина (Өфө ҡалаһы), Айвар Сәмиғуллин (Дүртөйлө ҡалаһы).**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТЕЛЕҢДЕ...

## тәртә буйы һуҙма

Таныған ерҙә буйға хөрмәт, танымаған ерҙә тунға хөрмәт.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Үҙебеҙ ниндәйҙер йомош ҡушҡан кешене ҡат-ҡат тикшереү - ул, үҫәме-юҡмы, тип тикшереү өсөн генә үҫентене ерҙән һурып сығарыуға тиң.

**(Ҡытай аҡылы).**

Һәр юғалтыу - ул табыш. Һәр табыш - ул юғалтыу.

**(Джалелитдин Руми).**

Үҙ-үҙе менән идара итә алмағандар башҡалар менән дә идара итә алмай.

**(Инглиз мәҡәле).**

Белмәйем, ҡайһыһы яҡшы: файҙа килтергән яуызлыҡмы, әллә зыян килтергән изгелекме?

**(Микеланджело).**

Еңеү - ул ахмаҡлыҡ. Еңергә түгел, әышандырырға кәрәк - бына ошо данға бәрәбәр.

**(Виктор Гюго).**

Яҡшыраҡ һикереү өсөн артҡа китеү кәрәк.

**(Француз мәҡәле).**

Аҡыллы булғың килһә, аҡыллы һорау бирергә, иғтибар менән тыңларға, тыныс ҡына яуап бирергә һәм әйтер һүҙең булмаһа, һөйләүҙән туҡтарға өйрән.

**(Иоганн Лафатер).**

Үҙ-үҙеңә ышанысыңды ҡаҡшатырға теләгәндәрҙән ҡас. Был ҡылыҡ ваҡ кешеләргә хас. Бөйөктәр һиңә, киреһенсә, һин дә бөйөк була алаһың, тигән тойғоно һеңдерер.

**(Марк Твен).**

Күреүе еңел ул, алдан күреү ауыр...

**(Бенджамин Франклин).**

Йылы тойғоларыңды оҙаҡ йәшерһәң, улар һыуынныуы ла мөмкин.

**(Жизель Итье).**

Насар уңыштан һуң да сәсергә кәрәк.

**(Сенека).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: " Дошмандарыңдан ҡурҡма - иң насар осраҡта улар һине үлтерергә мөмкин. Дуҫтарыңдан да ҡурҡма - иң насар осраҡта улар һиңә хыянат итергә мөмкин. Битарафтарҙан ҡурҡ - улар үлтермәй ҙә, хыянат та итмәй, әммә донъялағы бар хыянаттар һәм үлтерештәр уларҙың өнһөҙ ризалығы менән ҡылына".**

1 582218 911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 29 июнь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 1140/06